ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискэ Өфө

14-20 ноябрь (ҡырпағай) 2020

№46 (932)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Телевизорың боҙолмаһын икән ул...**



3

**Балыҡсы тигән атлы,**

башҡорт затлы ырыуҙанбыҙ



7

**Ваҡыт машинаһына ултырып...**

һәр тарихи дәүерҙе күрергә хыялланам



8-10

**Бала саҡ иләндә ҡалғандар**



11

**ТВ-программа** 14

*Хазинағыҙҙа булған белемдән артығын дәғүә итмәгеҙ. Күрмәйһегеҙме, эре башаҡлы бойҙайҙар һәр ваҡыт баштарын түбән эйеп тора. Бойҙайҙың йәки аҙ бөртөклө башаҡтар баштарын юғары күтәрә. Аҙ ғына һауа һалҡынайһа, һелкенә башлайҙар. Хәлбуки: утҡа яндырыуҙан башҡа уларҙың файҙалары ла юҡ.*

*Ризаитдин нәсихәттәренән.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Республикабыҙ ауылдары быйыл да "Айыҡ ауыл - 2020" конкурсына дәррәү ҡушылды. Уның ниндәйҙер һөҙөмтәләре һиҙеләме, эскелек кәмейме?

***Илһам БАЙТИЛДИН, хеҙмәт ветераны:*** Был эпидемия бөтөн хыялдарыбыҙҙы, уй-ниәттәребеҙҙе бутап, йәшәйешебеҙгә үҙ режимын индерҙе. Шуға ҡарамаҫтан, шөкөр, тормош дауам итә, шулай булырға тейеш тә. Улай ғына ла түгел, ер йөҙөнөң сирҙән арыныуы, тиҙерәк сәләмәтләнеүе уға ҡаршы тороусы көс менән үлсәнәсәк. Сиргә ҡаршы тороу ни тиклем ҡеүәтлерәк, берҙәмерәк булһа, ул шул тиклем тиҙерәк сигенәсәк. Тап бына ошондай киҫкен көрәш барған заманда халҡыбыҙҙан сәләмәт тормош рәүешенә ылығыуы талап ителә лә инде. Шуға күрә лә быйыл иғлан ителгән "Айыҡ ауыл - 2020" республика конкурсы һауыҡтырыуҙың бик урынлы сараларының береһе булараҡ ҡабул ителә. Тәүҙәрәк интернет буйлап, йәнәһе, тартҡан-эскән кешегә тажзәхмәт ҡағылмай, имеш, тигән фейк сығарылды. Көлкө, тип әйтер инем, был ҡайғылы хәл булмаһа. Төптө буш һүҙ, был кешене өмөтһөҙлөккә, сараһыҙлыҡҡа, күрәләтә эскелеккә этәрә түгелме? Нисек инде ул тартҡан-эскән кешенең былай ҙа яртылаш сереп-ҡоромланып бөткән үпкәһе зәһәр зәхмәткә ҡаршы тора ала? Улар бит былай ҙа саҡҡа шыйылдап тын алып йөрөй. Ә эскән кешенең иммунитеты бөтөнләй көсһөҙләнгән була, улар араҡынан башҡа бер ни ҙә ҡабул итә алмаҫ хәлдә. Бындай провокацион хәбәрҙәргә ышанырға ярамай. Эт өрөр, бүре йөрөр, тигән кеүек, сир ни тиклем генә ҡотормаһын, бәхеткә, күпселек ауылдарыбыҙҙа "Айыҡ ауыл - 2020" конкурсына әҙерлек эштәре туҡталғаны юҡ. Киреһенсә, ауылдарыбыҙ йәнләнә, төҙөкләнделә, тигән хәбәрҙәр генә уҡыйым мин матбуғат һәм интернет баҫмаларынан. Ысынлап та, был конкурстың маҡсаты ныҡлы уйланылған, ул дөйөм милләт һаулығын ҡайғыртыу, халыҡтың рухын күтәреү маҡсатында үткәрелә. Конкурс физик сәләмәтлек өсөн генә түгел, ә рухи-әхлаҡи ныҡлыҡ тәрбиәләүе менән дә ҡиммәт, минеңсә. Ә бит күптәр раҫлауынса, ауылдарыбыҙҙа эскелек бермә-бер кәмене, быны мин үҙемдең күҙәтеүҙәрҙән дә сығып әйтәм. Республика Башлығының тыйылған арзанлы алкоголь эсемлектәр менән законһыҙ сауҙа итеүселәр хаҡында мәғлүмәт еткереүселәргә премия биреү хаҡындағы тәҡдиме лә үҙ эшен эшләне, буғай: элек асыҡтан-асыҡ һатыу итеүселәрҙең ҡомһоҙлоғо баҫыла төшкәндәй. Быйылғы конкурс сиктәрендә бик күп файҙалы ойоштороу саралары үткәрелә. Ауылдарҙың тышҡы күренешен төҙөкләндереүҙән тыш та байтаҡ файҙалы ғәмәлдәр башҡарыла. Мәҫәлән, ошо конкурс сиктәрендә халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәренең район ауылдарына сығып, ҡабул итеүҙәр ойоштороуы маҡтауға лайыҡ, тип иҫәпләйем. Республикабыҙҙың көнбайыш, көнсығыш, төньяҡ, көньяҡ биләмәләре, шулай уҡ Урал аръяғы мәшғүллек үҙәктәренең кешеләрҙе эшкә йәлеп итеүе, төрлө һөнәрҙәр буйынса вакансиялар хаҡында мәғлүмәттәр биреп, һәр теләгән кешегә яраҡлы эш эҙләшеүе ошоға тиклем күҙәтелгән нәмә түгел ине. Хәбәр ителеүенсә, был үҙәктәр хеҙмәтенә йөҙәрләгән кеше мөрәжәғәт иткән, кәңәштәр алған, байтағы эшкә урынлашҡан. Дөрөҫ ойошторолған был сара, сөнки мәшғүллек - үҙе үк айыҡлыҡ, тигән һүҙ, эш кешеһенең эсеп йөрөргә ваҡыты ла, теләге лә булмаҫҡа тейеш, сөнки һәр кемгә үҙенең эш урыны ҡиммәт, айырыуса бөгөнгө көндә.

Республика Башлығы Радий Хәбиров тәҡдиме менән быйылғы конкурстың призлар фонды былтырғыға ҡарағанда 10 тапҡырға арттырылыуы айырыуса ҡыуаныслы. Проект кураторы, медицина фәндәре докторы Сәлиә Мырҙабаева белдереүенсә, конкурста ҡатнашыусыларҙың географияһы ла киңәйҙе, унда ҡатнашыусылар һанын тағы ла арттырыу ҡарала. Аҡсалата дәртләндереү төп еңеүселәргә генә түгел, финалға сығыусыларға ла, әүҙем йәмәғәтселәргә, ойоштороусыларға ла ҡаралған. Ә инде еңеүсе булған 5 ауыл ауылдарҙы үҫтереү буйынса комплексы программаға индереләсәк. Шәп бит был!

(Дауамы 2-се биттә).




12+

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# КЕРӘН ҠАРА ШАЛҠАНДАН ТАТЛЫРАҠМЫ?



**Әлегерәк Америка Ҡушма Штаттарының президент һайлауына бер ваҡытта ла әллә ни иғтибар иткәнем булмай торғайны. Әммә һуңғы йылдарҙа, инде оло кеше булараҡмы, океан артында ятҡан ана шул дәүләткә кем баш булып килеренә битараф булып ҡалғаным юҡ.**

Бынан дүрт йыл элек Хиллари Клинтон ханым менән Трамптың алышҡанын күҙәткәйнем. Уҙ илем булмауына ҡарамаҫтан, ҡатын кешенең власть башына менеүен һис кенә лә теләмәгәйнем шунда ла. Юҡ, "көсһеҙ зат"-тың берәй яғы оҡшамағаны өсөн түгел, ә уны - ҡатын-ҡыҙҙы ифрат та ныҡ йәлләүем арҡала. Шундай яуаплы, ауыр эшкә "егелдергем" килмәгәйне... Ошо арала әлеге етмеш дүртен тултырған Трамп менән етмеш һигеҙ йәшлек Байден бабайҙың алышыуын да ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәттем. Ниһайәт, олораҡ һәм байыраҡ булған Байден бай еңеп сыҡты, буғай. Президент тәхете өсөн алыш барған мәлдә был ике ҡарт бер-береһен кем тип кенә атаманы ла, бер-береһенең өҫтөнә ниндәй генә бысраҡ яҡманы. Береһе икенсеһен "Путиндың эте", тип әйтергә лә тартынманы. Икенсеһе лә түгеһен Рәсәй менән лояль мөнәсәбәттә булыуҙа ғәйепләне. Бөтә донъяны баҫып алған коронавирустың таралыуында ла кемеһелер "ғәйепле" булып ҡалды. Әле береһе енеүгә ирешеп, "президент креслоһына" ултырырға йәтешләп торғанда, икенсеһе уға "тантана итергә ашыҡмаҫҡа" кәңәш итә-итә, һайлауҙар мәлендәге мутлыҡта ғәйепләп, уны судҡа бирергә ҡарар итте буғай... Шул ике бабайҙың ҡайһыныһы АҠШ президенты булыуын теләр инегеҙ, тиғән һорау бирһәләр, мин шунда уҡ "Керән ҡара шалҡандан татлыраҡ түгел", тиғән урыҫтарҙың бер мәҡәлен килтерер инем. Сөнки Ҡушма Штаттарҙы "донъя тотҡаһы" тип хис итҡән был кешеләрҙән Рәсәйебеҙгә ҡарата "йылы ҡараш" һис кенә лә өмөт итерлек түгел. Кемеһе генә власть башына менһә лә, электән килгән ғөрөф-ғәҙәттәренә тоғро булып, беҙҙе беренсе һанлы дошман, ә Ҡытайҙы төп конкурент итеп һанаясағы көн кеүек асыҡ. Шуға күрә был икәүҙең береһенең дә еңеүен теләмәнем. Башлыса Рәсәйгә тоҫҡалған йәҙрә ҡораллы илдең етәксеһе булараҡ, президентта "йәҙрә сумаҙаны" асҡысы ла буласаҡ шул, бына шунда әтнәкә. Склеротик үҙгәрештәр сәбәпле баш мейеһе тамырҙары һәүетемсә тарайған оло йәштәге быныдай ҡарт-ҡороға шундай асҡысты ышанып тапшырыуҙары ла хәүефле, тип һанайым (бындай йәштә "Атеросклероз сосудов головного мозга" тиғән диагноһыҙ кеше бик һирәк була). Исмаһам, алтмыш менән етмеш араһындағы йәшерәк кешеләр булһа, бәлки, уйланмаҫҡа ла булыр ине. Ғөмүмән, "Хрен редьки не слаще", тип урыҫ юҡҡа ғына әймәгән. Мин, ҡәҙерле яҡташтар, һеҙҙең бик күптәрегеҙ һымаҡ уҡ, бына ошо хаҡта уйланып алдым. Әйе, тик бер аҙ уйланып ҡына, ә артыҡ борсолоп түгел. Беҙҙән тормаған нәмә өсөн борсолоуҙың да әллә ни файҙаһы юҡ бит инде. Алда ни булһын тик бер Аллаһ ҡына белә. Иң мөһиме - Раббыбыҙҙан үҙебеҙҙең хөкүмәтебеҙ өсөн иман, һаулыҡ, ғәҙеллек, эштәренә еңеллек һорайыҡ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Республикабыҙ ауылдары быйыл да "Айыҡ ауыл - 2020" конкурсына дәррәү ҡушылды. Уның ниндәйҙер һөҙөмтәләре һиҙеләме, эскелек кәмейме?*

(Башы 1-се биттә).

***Венера ҠАСҠЫНОВА, Баймаҡ районы Ишей ауылы йәмәғәтсеһе, уҡытыусы:*** Ауылыбыҙ күҙгә күренеп үҙгәрә, төҙөкләнә. Ишей - быйылғы "Айыҡ ауыл - 2020" конкурсында ҡатнашыусылар исемлегендә. Әлеге ынғай үҙгәрештәргә тап ошо ҡарар сәбәпсе булды ла инде. Ысынлап та, ауылдаштарым үҙгәрештәр көтә, элеккесә йәшәргә теләмәй ине. Үҙгәрештәр иң тәүҙә ауылыбыҙҙың тышҡы йөҙөндә күренде: ағастар ултыртылды, ҡайһы бер объекттар көртәләп алынды, ҡоймалар буялды, һәр урамда ҡоҙоҡтар тәртипкә килтерелде. Уҡытыусы булараҡ, минең өсөн иң ҡыуаныслыһы балалар майҙансығы булды. Был хаҡта беҙ бик күптән хыяллана инек инде. Беҙҙең бала саҡҡа ундай нәмә тәтемәне, исмаһам, балаларыбыҙ өсөн шуны эшләйек, тип, мин уҡыусыларым менән ҡайҙарға ғына үтенес хаттары яҙманыҡ! Ниһайәт, һорауыбыҙ ҡәнәғәтләндерелде: бына тиғән балалар уйын майҙансығы төҙөлдө. Тышҡы күренеш тә бик мөһим, шул уҡ ваҡытта кешеләр күңелендә лә үҙгәрештәр көрәк. Ауылдаштарыма рәхмәтлемен: бер тауыштан дәррәү айыҡлыҡ конкурсына ҡушылдыҡ. Ауылыбыҙҙа быға тиклем ир-егеттәр ҡоро юҡ ине, ул ойошторолдо һәм законһыҙ алкоголь менән сауҙа итеү урындарына рейд менән эшен башлап та ебәрҙе. Ир-егеттәрсә һөйләшеү үҙенекен итте: ошоғаса арзан араҡы менән сауҙа итеп, әҙәм аңын ағыулаусылар шөғөлдәрен туҡтатырға һүҙ бирҙе. Артабан улар үҙҙәрен нисек тотор - был мәсьәлә хәҙер ныҡлы контролгә алынды. Ауылыбыҙҙағы ни бары 81 йортта 200-ҙән ашыу кеше йәшәй, был улар менән күҙмә-күҙ аралашыу-аңлашыуҙарҙы байтаҡҡа еңеләйтә, унан һуң кемдең ни ҡылғаны, нисек йәшәүе лә ус төбөндәгеләй күренеп тора. Ә ғөмүмән, конкурсҡа әҙерлек эштәрен беҙ август аҙаҡтарында уҡ башлап ебәргәйнек инде. Тәүҙә ойоштороу мәсьәләләре, план һәм маҡсаттар билдәләнһә, сентябрь аҙаҡтары, ауыл хужалығы эштәре тамамланыуға, оҙаҡ иҫтә ҡалырлыҡ матур көн - ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға арнап, байрам ойоштороҡ. Унған хужабикәләребеҙ аш-һыу оҫталыҡтарын, үҙҙәре эшләгән милли биҙәүестәрен күрһәтте, район үҙәгенән саҡырылған парикмахер, визажист, маникюр оҫталары хеҙмәтенән файҙаланды, матур концерт күрһәтте. Ә был кисәнең иң мөһим маҡсаты былтырғы айыҡ ауыл конкурсында икенсе урын яулаған райондаштарыбыҙ - Йылым ауылынан саҡырылған ҡәҙерле ҡунаҡтарыбыҙ менән аралашыу ине. Улар ошо конкурс буйынса үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлашты, бик күп файҙалы кәңәштәрен бирҙе. Матур төйәгебеҙҙе тағы ла йәмлерәк һәм һәр ваҡыт айыҡ итеп күрергә теләгән ауылдаштарымдың бер төптән булып, конкурста урын алайыҡ, тип тырышып, дәртләнеп эшләүҙәрен күреп, күңелем күтәрелә, яңынан-яңы пландар тыуа. Урын алыу почетлы булһа ла, уныһы, минеңсә, әллә ни мөһим дә түгел. Ә бына ауылыбыҙҙың ошо ваҡыт эсендә таныҡһыҙ булып үҙгәрә барыуы - үҙе ҙур еңеү. Шуныһы мәртәбә - эскелек кәмене. Элекке кеүек магазин алдарында, аулаҡ урындарҙа төркөмләшеп эсеп торған кеше хәҙер, шөкөр, ҡалманы. Йәшерене юҡ: бар ине ҡатын-ҡыҙҙар араһында ла шым-шым ҡыҙмаса "байрам" итеп алыусылар. Ундай хәлдәр ҙә үҙенән-үҙе бөттө. Төйәгебеҙҙе күтәрәбеҙ, матурлайбыҙ, беҙ кемдән кәм - үҙебеҙгә бит йәшәргә бында, тип, һәммәһе бер төптән тырышып йөрөйҙәр, рәхмәтлемен уларға.

***Резеда ХӨСӘЙЕНОВА, "Әлшәй хәбәрҙәре" гәзите хеҙмәткәре:*** Август айында республикала "Айыҡ ауыл - 2020" конкурсына старт бирелде. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл бәйгенең муниципаль этабында Әлшәйҙән 57 ауыл ҡатнаша.

Районыбыҙҙың боронғо башҡорт ауылдарының береһе булған Ҡыпсаҡ-Аҫҡарҙа йәшәүселәр ҙә айыҡ тормош өсөн ығлан ителгән акцияны хуплап, заман сиренә ҡаршы дәррәү көрәшкә берҙәм ҡушылды. Ошо уңайҙан ауыл Советы хакимиәтендә йыйылыш уҙҙы, унда ауыл активистары, дин әһелдәре, уҡытыусылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, депутаттар ҡатнашты. Конкурс шарттары менән танышып, һәр кем үҙ тәҡдимен еткергәндән һуң, саралар планы ҡабул ителде, уға ярашлы, төрлө спорт ярыштары, милли байрамдар, тирә-яҡты төҙөкләндереү, йәшелләндереү буйынса өмәләр, эскелеккә ҡаршы акциялар, рейдтар үткәреү ҡуҙаллана. Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Әлфәрит Йосопов: "Бер кемгә лә сер түгел, һуңғы ваҡытта эскелек һаҙлығына батыусылар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күбәйгәндән-күбәйә. Бигерәк тә, был афәттең ҡатын-ҡыҙҙар араһында таралыуы - аянyслы хәл. Шуға ла дөрөҫ аңларға кәрәк, әгәр беҙ быйыл "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашабыҙ икән, был әле Ҡыпсаҡ-Аҫҡарҙа эскелек юҡ, тигәнде аңлатмай. Төрлө саралар үткәреп, уңған, тырыш ғаиләләрҙе өлгө итеп ҡуйып, айыҡ йәшәү рәүешен пропагандалау менән бер рәттән, киләсәк быуынға сәләмәт тормоштоң өҫтөнлөгөн дә күрһәтергә тейешбеҙ",- тип билдәләне.

Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауыл мәҙәниәт йорто директоры, "Айыҡ ауыл" конкурсын үткәреү буйынса ойоштороу комитеты рәйесе Фәнзилә Әхмәтова әйтеүенсә, һәр кесәҙна ауылда Сәләмәтлек көндәре уҙа, халыҡ Дим буйын сүп-сарҙан таҙартыу буйынса иғлан ителгән "Таҙа яр" акцияһын да дәррәү күтәреп алған. Шулай уҡ ағинәйҙәр, ауыл старостаһы һәм участка инспекторы менән берлектә имен булмаған ғаиләләргә рейд ойошторғандар. Шуны ла әйтергә кәрәк, ауылдағы өс сауҙа нөктәһенең икеһендә бөгөн алкоголле эсемлектәр һатылмай. Күптән түгел үткән "Мәргән уҡсы" бәйгеһе лә ҡыпсаҡ-аҫҡарҙарҙың күңелендә бик күркәм сара булып хәтерҙә ҡаласаҡ. Унда ҡатнашыусылар сағыу милли кейемдәрҙә ҙур ихласлыҡ менән уҡ атып, мәргәнлектә, йылғырлыҡта үҙ көсөн һынап ҡараны. Ауыл старостаһы Рәшит Ғәлимуллин бәйгеселәрҙе уҡ атыу ысулдары менән таныштырған.

Әйе, күмәкләшеп, бер уйҙан изге эшкә тотондо ҡыпсаҡ-аҫҡарҙар. Ә берҙәм булғанда әллә ниндәй эштәр атҡарырға, шул иҫәптән "йәшел йылан"ды ла еңеп сығырға мөмкин. Теләк кенә булһын.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓13 ноябрьгә мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда COVID-19 йоҡтороуҙың 115 яңы осрағы асыҡланды. Пандемия башланғандан һуң республикала 12 096 яңы коронавирус инфекцияһы осрағы иҫәпләнә. Һауыҡҡандарҙың дөйөм һаны - 11 103. Йәмғеһе 928 кеше дауалана. Хәбәр ителеүенсә, тәүлек эсендә лабораторияла раҫланған диагноз менән вафат булғандар һаны берәүгә артҡан һәм хәҙер 65 кеше тәшкил итә.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә республика Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итеүенсә, чиновниктар араһында эпидемияға ҡаршы талаптар ҡәтғи үтәлә. Уның һүҙҙәренсә, "хәҙер Аҡ йортта битлек киймәгән бер хеҙмәткәрҙе лә күрмәгәнең", бындай режим ведомство ҡарамағындағы барлыҡ учреждениеларға ла ҡағыла. Башҡортостан Республикаһы Башлығы хакимиәтендә белдереүҙәренсә, Башҡортостан Башлығы Хакимиәте хеҙмәткәрҙәренең 70 проценты эш урынында. Ҡалған хеҙмәткәрҙәр өйҙән эшләй.

✓Башҡортостандың Ҡариҙел районы Советы депутаттары муниципалитеттың яңы башлығын вазифаға раҫланы. Халыҡ һайланыусылары район хакимиәте етәксеһенең элекке урынбаҫары Айҙар Шәйҙуллиндың кандидатураһын бер тауыштан хупланы. Конкурста бөтәһе ике дәғүәсе - Айҙар Шәйҙуллин һәм урындағы 2-се мәктәп директоры Илдус Хәрипов ҡатнашты.

✓Башҡортостанда ресторан, бар, кафе һәм фуд-корттарҙың эше ярты төнгә тиклем оҙайтылды. 23 октябрҙән "Юғары әҙерлек" тәртибен индереү тураһында указға үҙгәрештәргә ярашлы, кафе-ресторандарға, юл буйы сервисы объекттарынан тыш, төндә эшләү тыйылды. Улар өсөн таңғы 6-нан төнгө 11-гә хәтлем эшләү тәртибе билдәләнгәйне. Эшҡыуарлыҡ вәкилдәренең мөрәжәғәте буйынса, властарҙың ҡарары менән дөйөм туҡланыу урындарының эш тәртибе тағы бер сәғәткә оҙайтылды. Хәҙер улар таңғы 6-нан төнгө 12-гә хәтлем эшләргә мөмкин.

✓2020-2021 уҡыу йылында һәләтле уҡыусыларға Башҡортостан Республикаһы Башлығы стипендиялары тәғәйенләнгән. 6 ноябрҙә республика Башлығы ҡул ҡуйған указ рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Айлыҡ стипендия алырға тейешләләр араһында - урта махсус музыка колледжы, балалар музыка һәм художество мәктәптәре, сәнғәт мәктәптәре, лицей-гимназия, мәктәп уҡыусылары. Йәмғеһе 100 стипендия түләнә.

*✓ Ике-өс көндән әлеге мастер шылтырата һәм телевизорҙың әҙер булыуын әйтә. О, юҡ , шатланырға бер сәбәп юҡ. Беләһегеҙме, ни хаҡҡа миңә иҫәп-хисап белдерә был? Тәүҙә үҙҙәре атаған 3 меңде теүәл генә 5-кә ҡабатлағандар - 15 мең!*



БЫНАҒАЙЫШ!

**Гәзитебеҙҙең үткән һанында ғына тормошобоҙға үтеп итеп, ышаныслы тамыр йәйә башлаған алдыҡ һәм кешеләрҙе төп башына ултыртыусы мошенниктар хаҡында "Әйт,тиһәгеҙ..." рубрикаһында яҙып сыҡҡайныҡ. Шунан һуң даими уҡыусыбыҙ С. исемле (тулы исемен атамауҙы үтенгән) ханымдан минең бәйләнешкә күләмле генә хәбәр килеп төштө. Автор "Киске Өфө" гәзитенә быҙдай материал баҫҡан өсөн рәхмәтен белдерә, кешеләргә аңлатыу, уларҙы алданыуҙан аралауҙың бик тә кәрәкле булыуы тураһында яҙа һәм күптән түгел генә үҙе менән булған хәлде бәйән итә. Артабан һүҙ уның исеменән бара.**

# ТЕЛЕВИЗОРЫҢ БОҘОЛМАҺЫН ИКӘН УЛ...

"Бер заман яҡшы ғына эшләп торған телевизорым "гөлт" итеп һүнде лә ҡабат тоҡанманы. Тауышы бар, элеккесә һөйләп тора, ә экран - дөм-ҡара. Ток үткәргес һәм кабель төҙөк, урынында, күҙгә күренеп торған сәбәп юҡ. Бер көн үтте, ике... Бәлки, эшләп китер, тигән өмөттәрем дә һүнде, әйтерһең, донъям ҡараңғыланды: халыҡ-ара хәлдәрҙе, яңылыҡтарҙы белмәй ултырыу яйһыҙ икән бигерәк. Әлдә почта йәшнигемә "Киске Өфө"нө төшөрөп китә рәхмәт яуғыр почтальоныбыҙ. Тик ул да бик һағындырып, аҙнаға бер генә килә, ә миңә көн дә хәбәрҙар булыу кәрәк. Шулай өйрәнелгән: бер көн яңылыҡтарҙан мәхрүм ҡалһаң да, донъяла әллә ниҙәр булып яталыр төҫлө. Иғлан буйынса бер шәхси эшҡыуар-оҫтаға шылтыратыуыма ул әлеге билдәләргә ҡарап, "эш яҡтыртҡыста" (улар телендә "подсветка" була икән) тигән ҡарар сығарҙы һәм өйгә килеп төҙәтергә теләк белдерҙе, ремонт хаҡының 500 һумдан алып, иң күп тигәндә (әгәр башҡа сәбәптәр ҙә була ҡалһа) 3 меңдән дә артмаясағын белдерҙе. Мин уйларға булып, трубканы һалдым. Ни эшләргә? Бынауы ҡырғын ҡоторған мәлдә нисек итеп күрәләтә өйөңә таныш түгел кеше саҡыртмаҡ кәрәк? Әллә кем булып сыға әле ул. Яңғыҙ ҡарт-ҡороно иҫәңгерәтә һуғып, бар аҡсаһын талап сығыусылар аҙ булдымы инде? Йыйған аҡсам юҡ юҡлыҡҡа, был айлыҡ пенсиянан коммуналь хеҙмәттәргә түләгәндән, ашарға ул-был һатып алғандан ҡалғаны ғына инде... 10 мең пенсияны нимәгә еткерәһең? Өйгә оҫта саҡыртҡы килмәне шулай ҙа. Юҡмы икән ни элекке кеүек көнкүреш техникаһы төҙәтеүсе оҫтаханалар? Күп йылдар инде улар хеҙмәте менән файҙаланырғы тура килгәне юҡ ине, бармы улар бөгөн, эшләйҙәрме - бер ни белмәйем. Телефонымдан ҡарап, шуларҙы барлай башланым. Әәә, хәҙер бит улар икенсе төрлө атала: сервис үҙәк. Ышаныслыраҡ булыр, тип, шундайҙарҙың берейһенә - ҙурырағына (тышҡы яҡтан офистарының фотоһында элгәндәр хатта сайттарына) туҡталам һәм "Нова" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт - сервис үҙәгенең телефон һандарын йыям. Яғымлы ғына йәш ҡыҙ тауышы күңелде тынысландырып ебәрҙе. Диспетчер-оператор тип таныштырҙы үҙен. Өйгә саҡыртыу кәрәкмәй, телевизорығыҙҙы барып алабыҙ (курьер), төҙәткәс, килтереп ҡуябыҙ, ти был. Хаҡтары ла баяғы шәхси оҫта әйткәндән артыҡ түгел. Мин инде риза ҡуш ҡуллап, тик төҙәтһендәр генә. Ҡыҙыҡай мастер менән тоташтыра. Ул да эш ниҙәлекте һөйләтеп алғас, ике-өс көндә әҙер була, тип күңелде күтәреп ебәрә. Мин заявка бирәм һәм курьер килеп, телевизорымды алып та китә.



Ике-өс көндән әлеге мастер шылтырата һәм телевизорҙың әҙер булыуын әйтә. О, юҡ, шатланырға бер сәбәп тә юҡ икән шул. Беләһегеҙме, шул саҡ ни хаҡҡа миңә иҫәп-хисап белдерә был? Тәүҙә үҙҙәре атаған 3 меңде теүәл генә 5-кә ҡабатлағандар - 15 мең! Баҫып торған еремдән, хәлһеҙләнеп, ултыра төштөм, бер ни ҙә әйтә алмайым, тел көрмәлде лә ҡуйҙы. Хәлемде хатта ки "теге яҡта" ла асыҡ самаланылар, ахыры, миңә тынысланырға кәңәш биреп, йыуата башланылар, баяғы ҡәтғи тауыштарының ҡәҙимге йомшарғанын һиҙеп, хәҙер мин "бөйөргә таянырға" ашыҡтым: хәҙер тиҙ ярҙам саҡырам, тейем быларға, минең һаулыҡ өсөн зыянды ҡапларға әҙер булығыҙ, тик ул 15 мең менән генә сикләнмәҫ, тип ебәргән булам. "Туҡтағыҙ, валерьянка эсеп алығыҙ, мин һеҙгә ташлама яһай алам", - ти теге тауыш һәм 15-тән 2 меңде шундуҡ алып ташлай. Үҙегеҙ шаһит: был да минең өсөн бик ҙур сумма. "Мин был хаҡҡа яңы телевизор һатып алам", - тием. "Алығыҙ, тик ул барыбер 5-6 йылдан тағы боҙоласаҡ, хәҙер шулай эшләйҙәр", - булды яуап. Тағы һатыулашырға, был юлы инде һалым инспекцияһын, прокуратураны, Роспотребнадзорҙы телгә алып һөйләшергә тура килде. Һөҙөмтәлә тағы бер меңгә ендем быларҙы! Шул нөктәлә һүҙҙе йомғаҡларға булды былар һәм башҡаса бер ниндәй сигенеүҙәргә лә бара алмауҙарын белдереп, яйлап түләргә өгөтләй башланылар. Тик мин инде һуңлап булһа ла интернеттан уҡып белгәйнем: аҡса туплап, телевизорыңды ҡайтарып алғансы, уны үҙҙәрендә тотҡан өсөн көн дә күпмелер процент иҫәпләү ихтималлыҡтары ла бар икәнен, шуға, күршемдән бурысҡа алып булһа ла әлеге 12 меңде түләргә мәжбүр булдым... Телевизорымды былай, вәғәҙә итеүҙәренсә, килтереп киттеләр, әлегә ул һәйбәт кенә эшләй, тик күпмегә сыҙар икән - әйтә алмайым. Сервис-үҙәк былай, килешеүҙә теркәлеүенсә, ни өсөндөр тотош 3 йыл гарантия бирә. Шуныһына ла рәхмәт инде..."

Әйе, авторыбыҙ һаман да кешелеклегенә барып, рәхмәтен йәлләмәһә лә, бындай үҙәктәр, асыҡланыуынса, бөгөн - бар, иртәгә - юҡ. Күпмелер капитал туплайҙар ҙа "йөҙҙәрен" йә исемдәрен, адрестарын алмаштырып, икенсе сүрәткә керәләр, имеш, тип тә яҙалар. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: көнкүреш приборҙарығыҙ, ноутбук йә телевизорҙарығыҙ берүк төҙөк була күрһен, ипле файҙаланығыҙ, юғиһә, уларҙы ремонтлатыу мажаралары ана шулай ҡиммәткә төшөүе бар. Иң тәүҙә шулай ҙа беҙҙең әлеге авторыбыҙ - С-ның хатаһынан һабаҡ алығыҙ: ремонтлатыр алдынан ҡайҙа, кемгә мөрәжәғәт итерегеҙҙе ныҡлап асыҡлағыҙ, туғандарығыҙ, дуҫ-таныштарығыҙҙан белешегеҙ, был турала мөмкин тиклем тулыраҡ мәғлүмәт туплағыҙ.

Сер түгел, бөгөн тоталь алдыҡ заманы, һәр өлкәлә мошенниклыҡ күкрәп "сәскә ата". Элеккесә берҡатлылыҡ, сафлыҡ, ышаныусанлыҡ ғәҙәттәрегеҙҙе онотоғоҙ. Һәр тәҡдим, сәйер шылтыратыуҙарға шикләнеп ҡарарға, дөрөҫлөгөн тикшерергә өйрәнегеҙ. Үҙегеҙ һайлаған сервис объекты хаҡында интернеттан, таныштарығыҙҙан тулы мәғлүмәт алырға тырышығыҙ. Әлеге кешеләрҙе төп башына ултыртыусы Яуаплылыҡтары сикләнгән ойошмалар, йәнәһе, ошондай сервис үҙәктәр байтаҡ ҡына икән: "Акцент", "Эдельвейс", "FixService 24", "Remlab" һәм башҡа шундайҙарҙы Picabu социаль селтәре фашлап яҙып сыҡты: "Бындай сервистарҙа махсус өйрәтелгән, фантазияға бай, таҫма телле кешеләр эшләй, улар ремонтҡа алған ҡорамалды баштарынан сығарып диагностикалай, булмаған, башҡарылмаған хеҙмәттәр өсөн аҡса өҫтәп алалар. Улар Рәсәйҙең егермеләгән ҙур ҡалаларында 5-6 йыл эшләйҙәр ҙә унан исем-атамаларын, урын-адрестарын үҙгәртәләр. Улар тоҙағына эләгә ҡалһағыҙ, бойондороҡһоҙ экспертизаға мөрәжәғәт итегеҙ, алданған клиенттар берләшеп, прокуратура, һалым органдарына коллектив хаттар яҙығыҙ, киң мәғлүмәт саралары, журналистарға мөрәжәғәт итегеҙ: улар мошенниктарҙы фашлаусы материалдар яҙып, телетапшырыуҙар эшләй ала. Сайттарҙа был "яуаплылыҡтары сикләнгән" ойошмалар хаҡында күберәк дөрөҫөн яҙығыҙ, туғандарығыҙға, дуҫтарығыҙға һәм таныш-тоноштарығыҙға һөйләгеҙ, хәбәр таратығыҙ".

Бына шундай хәлдәр. Шуныһы ғәжәп итә: кеше алдауҙарға, мошенниктарға ҡаршы бер ниндәй власть органы ла ҡаршы көрәшеү түгел, һуңлап булһа ла берәй сара күрергә лә тырышмай, бер кемдең унда эше лә юҡ, әйтерһең дә, был нормаль күренеш. Мәҡәл теле менән әйткәндә, "Батып барыусыны ҡотҡарыу батып барыусының үҙ эше" булып ҡала килә. Бөгөнгө ҡырғын мәлендә, йәшәү менән үлемесле сир араһында көрәш барғанда ла ҡайһы берәүҙәрҙең ана шулай үҙ файҙаһын ҡайғыртып, кеше кеҫәһенә сат йәбешеп ятыуҙары, кеше ғүмере, һаулыҡ, мәрхәмәтлектән башҡа барлыҡ ҡиммәттәрҙең дә мәғәнәһен юғалтыуы ла туҡтата алмай мошенниктарҙы. Кеше рәнйеше лә, сир хәүефе лә сик түгел ундайҙарға. Аң булығыҙ!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөгә эш сәфәре менән Ҡырғыҙстан делегацияһы килде. Делегация составында Үҙәк Азияла микрофинанслау өлкәһендә киң билдәле етәксе Бабур Тольбаев һәм йәмәғәт эшмәкәре, политолог Калнур Ормушев бар. Рәсәй Ислам университеты майҙансығында Рәсәй менән Ҡырғыҙстандың дини лидерҙары араһында тәүгә ике яҡлы онлайн-саммит уҙғарылды. Унда Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты рәйесе Тәлғәт Таджетдин һәм Ҡырғыҙстан мөфтөйө Максатбек Токтомушев ҡатнаша. Яҡтар 2021-2022 йылдар осоронда Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты һәм Ҡырғыҙстан мосолмандарының Диниә назараты араһында Хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара килешеп эш итеү тураһында килешеүҙе ғәмәлгә ашырыу барышын билдәләне.

✓Башҡортостанда пастеризацияланған айыртылмаған һөткә хаҡтың артыуы күҙәтелә. Башстат мәғлүмәттәре буйынса, республикала октябрҙә 2,5-3,2 процент ҡуйылыҡтағы пастеризацияланған һөттөң бер литры уртаса 51,75 һумға етте. Ғинуарҙа Башҡортостанда йәшәүселәргә ошондай уҡ һөт 50,06 һумға төшә ине. Ғәҙәттәгесә, һөткә хаҡ буйынса иң ҡиммәт ҡала - Өфө. (53,72 һум). Ә иң арзан һөт - Сибайҙа, бер литры уртаса 47,03 һум тора.

✓Ошо арала Төркиәнең Анталия ҡалаһында "блиц" һәм "рапид" төрҙәрендә халыҡ-ара шашка буйынса донъя беренселеге үтте. Башҡортостан шашкасылары Әлиә Әминева менән Айнур Шәйбәков блиц буйынса донъя беренселегендә еңеүгә өлгәште. Уйындың тәүге көнөндә үк "Башҡортостан" үҙәк шашка клубы спортсылары ике алтын, көмөш һәм бронза яуланы. Ҡатын-ҡыҙҙар араһынан Әлиә Әминева (Өфө) еңеүсе булды. Өсөнсө урында - Айгөл Иҙрисова (Өфө) алтынсы урында - Тамара Танһыҡҡужина. Ир-егеттәр араһында Өфөнән Айнур Шәйбәков еңде. Икенсе - Александр Георгиев (Өфө), өсөнсө - Юрий Аникеев (Украина), Стәрлетамаҡтан Мораҙулла Амриллаев - етенсе урында.

✓Башҡортостанға йәнә грипҡа ҡаршы 10 мең доза "Совигрипп" вакцинаһы килтерелде. Вакцина хроник, шулай уҡ үпкә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән, һимереүҙән яфаланған өлкән йәштәгеләргә прививка яһау өсөн тәғәйенләнгән. Тиҙҙән препарат медицина ойошмаларына бүлеп бирелә, тип хәбәр иттеләр республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, быйыл ғына Башҡортостанға 1 532 763 доза грипп вакцинаһы килтерелгән, шул иҫәптән балалар өсөн 364 183 доза.

ҠЫҪҠАСА

# ЭШЛЕКЛЕ ТЕЛ...

✓ **Интернет селтәрендә "Эшлекле башҡорт теле" мобиль ҡушымтаһы эшләй башланы. Был Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды тарафынан нәшер ителгән уҡыу әсбабының электрон варианты.** Хәҙер уны смартфонға күсереп алырға һәм Ер шарының телә́һә ҡайһы нөктәһендә файҙаланырға була. Был проект эшлекле башҡорт теленең морфологик һәм синтаксик тасуирланышын асып биреүсе, эшлекле аралашыу мәҙәниәте буйынса мәғлүмәт биреүсе уҡыу әсбабы. Ошонда уҡ авторҙар "Рәсми-эшлекле лексиканың русса-башҡортса һүҙлек-белешмәһе"н бирә һәм теоретик белемде нығытыу өсөн ғәмәли эштәр тәҡдим итә. Баҫманың икенсе өлөшөндә үҙгәртелгән һәм өҫтәлгән "Эш ҡағыҙҙары өлгөләре" урын алған. "Әсбап башҡорт телен башлап өйрәнеүселәрҙең дә, документтар менән эш итеүсе чиновниктарҙың да өҫтәл китабына әйләнер, тип уйлайбыҙ. Ҡыҫҡаһы, дәреслек документтарҙы башҡорт телендә алып барырға теләгәндәр өсөн тәғәйенләнә. Мәҫәлән, балалар баҡсаһына йәки мәктәпкә башҡортса ғариза яҙырға теләгәндәр өсөн бында әҙер өлгөләр бар", - ти Фонд белгесе Рита Аҡбулатова.

✓ **Башҡортостанда 55 мең кеше пенсияһына ауыл өҫтәмәһе ала, тип хәбәр иттеләр Пенсия фондынан.** Ауыл хужалығында 30 йылдан ашыу эшләп хаҡлы ялға сыҡҡандар (хәҙерге ваҡытта эшләмәгән) өсөн 2019 йылдың 1 ғинуарынан 25 процент өҫтәмәгә хоҡуҡ булдырылды. Пенсия фондында билдәләүҙәренсә, ауыл хужалығында эш стажын иҫәпләү өсөн Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарарында раҫланған эштәр, производстволар, һөнәрҙәр, вазифалар исемлеге ҡулланыла. Биш йөҙҙән ашыу һөнәр буйынса колхоз-совхоздарҙа һәм башҡа ауыл хужалығы ойошмаларында эшләү иҫәпкә алына. 1992 йылға тиклем эшләү ауыл стажына индерелә. Өҫтәмәнең уртаса суммаһы - 1421 һум (шуға ярашлы, совет осоро ауыл хужалығы эшсәненең уртаса пенсияһы яҡынса 5,7 мең һум, өҫтәмә менән - 7,2 мең һум самаһы).

✓ **Башҡортостанда "Торатау" геопаркының сиктәре билдәләнде.** Башҡортостан Республикаһының рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында республика Хөкүмәтенең тейешле ҡарары баҫылған. Документҡа ярашлы, геопарк Ишембай, Стәрлетамаҡ, Ғафури һәм Мәләүез райондары биләмәләре менән сиктәш. Башҡортостан Республикаһының Туризм буйынса дәүләт комитеты етәксеһе Салауат Нафиҡов һүҙҙәренсә, "Торатау" геопаркы тулы ҡеүәтенә эшләй башлаһын өсөн юл картаһының 60 пунктын ғәмәлгә ашырырға кәрәк. "Геопаркта бихисап объекттар, шул иҫәптән этнографик, археологик, тәбиғәт ҡомартҡылары бар. Уның биләмәне үҫтереренә һәм иң мөһиме - инвестициялар йәлеп итеренә иҫәп тотабыҙ", - ти ул. "Торатау" геопаркының дөйөм майҙаны - 4 мең квадрат саҡрымдан ашыу.

✓ **Башҡортостанда төндә Белорет районы Аҙнағол ауылында йәшәгән 60 йәшлек ир полицияға шылтыратып, өй ихатаһында бүренең һөжүм итеүе тураһында һөйләгән.** Йыртҡыс пенсионерҙың аяғын тешләгән, ләкин өлкән йәштәге ир-уҙаман унан ҡотолоп, йортона инеп бикләнгән. Уға участковый Азат Ғәлимов килгән. Полицейский урынды ентекләп ҡараған ваҡытта йыртҡыстан зыян күргән тағы ике кешегә тап булған. Улар - ошо ауылда йәшәгән 44 йәшлек ҡатын һәм уның танышы. Ҡатынға ярҙам саҡыртҡандар. Табиптар уның күҙе йәрәхәтләнеүен, бер нисә һынған, тешләнгән урыны булыуын асыҡлаған. Участковый бүрене Ағиҙел ярамында, йәрәхәтләнгән ир йәшәгән урын янында, күреп ҡалған. Йыртҡыс уға ташланырға иткән, шуға полиция хеҙмәткәренә табель ҡоралын ҡулланырға тура килгән. Хәҙер зыян күргәндәрҙең барыһына ла ярҙам күрһәтелә. Һәләк булған йәнлек ветеринарҙарға тапшырылған. "Кешеләргә ташланып өлгөргән йыртҡыс менән осрашыу ҡурҡыныс ине, ләкин мин был мәлдә, башҡа бер кем дә шашҡан бүренең ҡорбаны булмаҫҡа тейеш, тип уйланым", - ти Азат Ғәлимов.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЕР МӨНӘСӘБӘТТӘРЕ КӨЙЛӘНӘ

**БР Хөкүмәтендә үткән оператив кәңәшмәлә дәүләт милке сикләнгән ер участкаларын биреү өлкәһенә индерелгән үҙгәрештәр буйынса фекер алышыу булды.**

Мәғлүм булыуынса, 2 ноябрҙә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров ошо хаҡтағы законға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, быға тиклем ҡала округтары, муниципаль райондар һәм ҡала биләмәләрендә булған милек хоҡуғы сикләнмәгән ерҙәр хәҙер БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы ҡарамағына күсә. Закон 2021 йылдың 1 ғинуарынан көсөнә инә. "Буталыш булмаһын өсөн күсеү осороноң ҡалған айҙарында был ер участкалары элеккесә урындағы үҙидара органдарында ҡала, - тип аңлатты БР ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская. - Шул уҡ ваҡытта халыҡтың урындағы үҙидаралыҡты тормошҡа ашырыуҙың конституцион хоҡуғы боҙолмай. Улар артабан да референдумдар үткәрергә, шулай уҡ туранан-тура теләк белдереү йәки урындағы үҙидаралыҡтың һайлау йәки башҡа органдары аша муниципаль һайлауҙарҙа ҡатнашыу хоҡуғына эйә булып ҡала. Дөйөм алғанда, яңылыҡтар ер мөнәсәбәттәре өлкәһендә хеҙмәт күрһәтеүҙә бер төрлөлөккә ярҙам итәсәк, йәғни хеҙмәттәрҙе электрон исулға күсереү иҫәбенә бизнес-йәмғиәттең генә түгел, ә халыҡтың да ер алыу процедураһын ябайлаштырасаҡ".

"Ғәмәлдә беҙ ер мөнәсәбәттәрен ябайлаштырабыҙ, унда коррупция барлыҡҡа килеүен кәметәбеҙ, - тине Башҡортостан Башлығы. - Беҙҙең был өлкәгә дәғүәләребеҙ бик күп. Әгәр асылған енәйәт эштәрен алып ҡараһаҡ, уларҙың күпселеге сикләнмәгән ер участкаларына бәйле булыуын күрербеҙ. Хәҙер беҙ уларҙы берлектә күҙәтә аласаҡбыҙ. Шул уҡ ваҡытта һуңғы һүҙ муниципалитет башлыҡтарында буласаҡ. Ер һатыуҙан йәки уны ҡуртымға биреүҙән килгән килем урындағы бюджетҡа китәсәк".

Башҡортостан Башлығы профиль министрлыҡтарына 2021 йылдың 1 ғинуарынан хеҙмәтте сәнәғәт ҡулланылышына индереү өсөн декабрҙән дә ҡалмай ер участкаһын бүлеүгә электрон рөхсәт алыуҙың алгоритмын әҙерләргә ҡушты.

# ҠАҘҘАРЫҢДЫ ҺУЯ БАШЛА!

**Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы ауыл халҡына һыуыҡтар төшкәнен көтмәй өйрәк-ҡаҙҙарҙы һуя башларға кәңәш бирә.**

Министрлыҡта ҡош киҙеүе вирусының күрше төбәктәрҙән үтеп инеүе ихтимал тип хәүефләнәләр. Сир күпселек осраҡта ҡоштоң үлеменә килтерә. Уны ҡырағай күсмә ҡоштар тарата. Рәсәйҙең 11 төбәгендә, шул иҫәптән Башҡортостан менән күрше Татарстанда һәм Силәбе өлкәһендә грипп буйынса хәүефле 75 пункт теркәлгән дә инде. Башҡортостандың Баҡалы районынан биш саҡрым алыҫлыҡта ла ауырыу сығанағы табылған. Әлеге ваҡытта унда вирустың таралыуын бөтөрөү менән шөғөлләнәләр.

Башҡортостандың ветеринария хеҙмәтендә 8 800 775 58 28 номеры буйынса "ҡыҙыу бәйләнеш" эшләй. Ҡоштар ҡапыл ҡырыла башлаған осраҡта шылтыратып, белгестәр менән кәңәшләшергә мөмкин. "Әгәр берәй хужалыҡта сир асыҡланһа, тотош төбәк карантинға ябыла: продукцияны сығарыу тыйыла. Башҡортостанда ҙур ҡошсолоҡ предприятиелары күп: Благовар тоҡомло ҡошсолоҡ заводы, "Башҡортостан бройлеры", "Индюшкин". Шуға күрә вирустың республика биләмәһенә үтеп инеүенә юл ҡуймау мөһим. Ҡырағай ҡоштар менән бәйләнешкә инмәһендәр өсөн шәхси хужалыҡтарҙағы ҡош-ҡортто тиҙ арала ябып ҡуйырға, билдәһеҙ мал аҙығы һатып алмаҫҡа, тере ҡош-ҡорт индермәҫкә кәрәк", - тине Башҡортостандың ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов республика Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә. Билдәләнеүенсә, республика менән сиктәш зоналарҙа ауырыу таралыу сәбәпле, Салауат районында, дөйөм алғанда, Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында ҡош-ҡорт һатыуға ветеринария контроле көсәйтелдә. Башҡортостанда әлегә йорт ҡоштарының ошо хәүефле инфекцияны йоҡтороу осраҡтары юҡ. Халыҡҡа ҡош-ҡортто ихатала ғына тоторға кәңәш ителә.

# ИЛЬӨЙӘРЛЕК СӘНӘҒӘТЕ

**Бөтөн республикалағы кеүек үк, Баймаҡ районында ла тәбиғи таш сығарыуҙа тәртип урынлаштырып, легаль булмаған барлыҡ карьерҙарҙы юҡ итеүгә өлгәшелде.**

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: бынан ике йыл элек Баймаҡ районының Темәс ауылы халҡы тәбиғи таштарҙы законһыҙ сығарыу тураһында Радий Хәбировҡа мөрәжәғәт иткәйне. Шул арҡала хатта был карьерҙарҙа эшләүсе мигранттар менән урындағы йәштәр араһында конфликттар ҙа булып алды. Шул саҡта Башҡортостан Башлығы төбәктә тәбиғи таш сығарыуҙы тулы тәртип урынлаштырылғанға тиклем ваҡытлыса туҡтатып торорға ҡушҡайны. Ул бөтөн Урал аръяғы райондарында күп һанлы бындай законһыҙ күренештәргә ысын мәғәнәһендә катастрофа тип атаны. Баймаҡ районында ғына ла был таштар ҡырағай рәүештә культивация эштәрен башҡармайынса 40-тан ашыу урында сығарыла ине. "Мин карьер эштәренә ҡаршы түгел, тик улар закон буйынса эш итергә, алынған килемдең төп өлөшөн район проблемаларын хәл итеүгә йүнәлтелергә тейеш. Сығарылған таш Мәскәүгә, Мәскәү өлкәһенә, Грозныйға оҙатыла. Бынан беҙ бер ни ҙә алмайбыҙ икән, нинә һатабыҙ? Бәлки, был эштән баш тартырғалыр? Ә бит бюджетҡа бынан 5 миллионлап аҡса ала алабыҙ",- тигәйне республика Башлығы. Әйтеп кителеүенсә, был өлкәлә тәртип булдырылды һәм, мәҫәлән, шул уҡ Баймаҡ районында плита һәм таш сығарыуға лицензияны урындағы эшҡыуарҙар алды.

7 ноябрҙә Баймаҡ районына эш сәфәре ваҡытында Радий Хәбиров йөҙләүсе таштар етештереүсе шәхси эшҡыуар Ишдәүләт Ғибәҙәтовтың предприятиеһында булды. Эшҡыуарҙың һүҙҙәре буйынса, был ҡатмарлы эпидемиологик осорҙа уның продукцияһына ихтыяж кәмене. Радий Хәбиров Башҡортостанда киң тәҙәкләндереү программаһы йәйелдерелеүен билдәләне һәм материалдар һайлағанда тәҙәлөш ойошмаларының урындағы етештереүселәргә өҫтөнлөк биреүе тураһында әйтте. Төбәк етәксеһе Хөкүмәт премьер-министры Андрей Назаровҡа Баймаҡ етештереүселәре плиталарын һатып алыу мәсьәләһен ҡарарға ҡушты. "Законһыҙ эш итеүселәрҙән ҡотолоу беҙҙең төп маҡсат ине, хәҙер үҙебеҙҙең намыҫлы эшҡыуарҙарға ярҙам итәсәкбеҙ. Бынан тыш, беҙгә илһөйәрлек сәнәғәтен үҫтерергә кәрәк. Үҙебеҙҙә етештерелгәндә иң тәүҙә беҙ үҙебеҙ файҙаланырға тейеш", - тине етәксе.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә йоҡа боҙҙоң хәүефле булыуын иҫкәрткән мәғлүмәт таҡталары ҡуйыла башланы. Был хаҡта Граждандарҙы яҡлау идаралығынан хәбәр иттеләр. Иғландар ҡаланың һыу яҡтылығы булған һәр районында ҡуйыла. Уларҙың төп бурысы - ҡала халҡын хәүеф тураһында иҫкәртеү, йылға-күлдең ошо участкаһында боҙға сығыуҙың фажиғәле тамамланыу ихтималын хәбәр итеү. Боҙға сығыуҙың яңы участкалары асыҡланған осраҡта мәғлүмәт таҡталарының һаны арттырыла.

✓Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар полководецы, генерал-майор, Рәсәй Геройы Миңлеғәли Шайморатов тураһында спектакль буйынса репетиция тамамлана. "Ат уйнатып алдан бара" спектакленең премьераһы 19 һәм 20 ноябрҙә театрҙың Бәләкәй сәхнәһендә була (Ҙур сәхнә әле һаман реконструкциялана). Сценарий авторы - Зөһрә Бураҡаева, проекттың художество етәксеһе - Айрат Абушахманов, ҡуйыусы режиссер - Хөрмәтулла Үтәшев, рәссам - Альберт Нестеров, композитор - Урал Иҙелбаев, хореограф - Рәис Низаметдинов. Консультант булып Салауат Хәмиҙуллин сығыш яһай.

✓Башҡортостанда һауа шарттарының боҙолоуы күҙәтелә. "Водителдәргә тиҙлек режимын һәм арауыҡты һаҡларға кәңәш бирәм. Бер-берегеҙҙе һаҡлағыҙ!" - тип мөрәжәғәт итте Башҡортостан Республикаһының баш дәүләт автоинспекторы Динар Ғилметдинов. Бынан тыш, Өфө мэрияһында үткән оперативкала водителдәргә йәйге тәгәрмәстәрҙе ҡышҡыһына алмаштырырға кәңәш иттеләр.

✓Өфөлә "Торатау" Конгресс-холы һәм Салауат Юлаев һәйкәле янында пиксель шыршыны ҡороу башланды. Былтыр властар Башҡортостандың тығыҙ ҡалаһы өсөн ошондай яһалма шыршы һатып алды. Иң бейек конструкция Өфөлә - 32 метр. Хаҡы - 20,8 миллион һум. Шулай уҡ баш ҡалаһы биҙәү өсөн Италиянан башҡа фигуралы конструкциялар һәм иллюминация һатып алынды. Уҙған йылда баш ҡалала 18 байрам майҙансығы эшләне. Әле ҡала районы хакимиәттәре төп байрамға әҙерләкте башлай. Әйтәйек, Ленин районында алты боҙ ҡаласығы, ике һырғалаҡ, тығыҙ хоккей майҙансығы асылырға тейеш.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ БАРА,

## әммә хаталы яҙыуҙар бөтмәй

**Һуңғы ваҡытта ҡала хакимиәтендә генә түгел, барлыҡ кимәлдәге кәңәшмәләр ҙә көндән-көн киңерәк тарала барған ковид-пневмония сире тураһындағы мәғлүмәттән башлана, шикелле. Был юлы ла Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Радмил Мөслимов көн тәртибендә ҡараласаҡ мәсьәләләргә күсер алдынан республика Башлығының юғары әҙерлек режимы тураһындағы Указына индергән үҙгәрештәренә туҡталып китте.**




Битлектәр кейеү һаман да беренсе төп талап булып торһа һәм битлекһеҙ йөрөгән өсөн административ яза ҡаралһа, ноябрь һуңына тиклем 65 йәштән өлкәндәр һәм хроник сирҙәре булыусылар өсөн мотлаҡ ҡурсаланыу режимы индерелә. Уларға көндөҙгө сәғәт 11-ҙән 1-гә тиклем генә магазинға сығырға, дарыуханаға, финанс ойошмаларына һәм бәйләнеш салондарына барырға рөхсәт ителә. Ә инде эш урынын ҡалдыра алмаған һәм эшләп йөрөүсе пенсионерҙар мотлаҡ үҙҙәре менән һәр саҡ паспортын һәм эш биреүсе ойошманың справкаһын йөрөтөргә тейеш. Бынан тыш, 18 йәшкә тиклемге балалар сауҙа-күңел асыу үҙәктәренә тик ата-әсәләре йәки уларҙы алыштырған законлы вәкил икәнлеген раҫлаусы документы булған кешеләр менән генә килә ала.

Көн тәртибенә килгәндә инде, тәбиғәт беҙгә алдан бер ни тиклем хәбәр ебәрҙе - саҡ ҡына булһа ла ҡар яуҙырҙы. Әйтерһең дә, ул сюрприздары менән ҡыш көтөүен шулай иҫкәртергә булды. Махсус техниканың әҙерлеге тураһында үткән кәңәшмәнән хәбәр иткәйнек инде, ә ҡарҙы сығарыу майҙандарының әҙерлеге нисек икән? Өфө ҡалаһы Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы етәксеһе Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, бындай майҙандар, шул иҫәптән ете - төп һәм 3 - өҫтәмә полигон, һәр районда бар һәм уларҙың һаны 10-ға етә. Калинин районына бушлай ҡулланыуға тәүлек әйләнәһенә эшләүсе ҡар иретеү пункты тапшырылған. Ҡарҙы иретеү барышында сүп-сар һәм ҡом айыртыла, һөҙөмтәлә канализация коллекторҙары бысрамай һәм тығылмай. Дөйөм алғанда, ҡар йыйыу полигондары 6 миллион кубометрға иҫәпләнгән, ә былтыр был күрһәткес 3,5 миллион кубометр булған.

Мәғлүм булыуынса, был аҙнала балалар оҙайлы каникулдан һуң ҡабат уҡый башланы һәм 5-10-сы синыфтар онлайн белем алыуға күсте. Ә каникулдарҙа балаларҙың буш ваҡытын үткәреү нисек ойошторолдо икән? Был хаҡта ҡала хакимиәтенең Мәғариф бүлеге начальнигы Елена Хаффазова һөйләне. Уның билдәләүенсә, 9-сы, 11-се сығарылыш синыфы уҡыусылары онлайн-форматта имтихандарға әҙерләнгән. Бынан тыш, уҡыусыларҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһының мәктәп этабы, предмет олимпиадалары үткән, уларҙа 4-11-се синыфтарҙан 15 387 уҡыусы ҡатнашҡан. 8-11-се синыфтар 14 предмет буйынса уҡыу-күнекмә йыйынында онлайн уҡыған. "Киләсәккә билет" федераль проекты сиктәрендә 1387 уҡыусы профтест үткән, 900 уҡыусы онлайн-профһынауҙа үҙ көсөн барлап ҡараған. 26 октябрҙә башланған "Йәш профессионалдар" (WorldSkills Russia) VI Төбәк чемпионатының һайлап алыу турында 31 компетенция буйынса 89 уҡыусы ҡатнаша. "Артек" Халыҡ-ара балалар үҙәгендә 31 октябрҙән 5 ноябргә тиклем үткән "Ҙур тәнәфес" Бөтә Рәсәй конкурсы финалында Өфөнән 5 уҡыусы еңеүсе була һәм "Артек"ка путевка менән бүләкләнә.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы инициативаһы менән 2020 йыл Башҡорт теле йылы тип иғлан ителгәйне. Ҡалала ла был юҫыҡта ниндәйҙер эштәр алып барыла. Улар менән хакимиәттең телдәр сәйәсәте буйынса бүлек начальнигы Салауат Дәүләтшин таныштырҙы. Билдәләнеүенсә, 2007 йылдан хакимиәт ҡарамағында ҡалалағы төрлө тармаҡтарҙағы алтаҡталарҙы, рәсми ҡағыҙҙарҙы дәүләт башҡорт телендә яҙыу, йәғни дәүләт телдәрен ҡулланыу буйынса Терминология комиссияһы эшләй. Быйыл иһә билдәле сәбәптәр арҡаһында был эш дистанцион алып барыла. "Консультацияларҙы телефон аша үткәрәбеҙ. Эскиздарҙы беҙҙең электрон почтаға һалалар һәм беҙ ошо ойошма менән бәйләнешкә сығабыҙ, - ти Салауат Дәүләтшин. - Быйыл барлығы 2500 мөрәжәғәт булды. Уларҙың күбеһе төрлө реклама агентлыҡтарынан һәм алтаҡталар эшләүсе ойошмаларҙан. Терминология комиссияһы баш ҡала предприятиеларынан, ойошма-учреждениеларҙан килгән 1935 мөрәжәғәтте ҡараған, уларҙың 300-ө ҡабаттан эшләү өсөн кире ҡайтарылған, 845-енә мәғлүмәтте файҙаланыу һәм урынлаштырыуға таныҡлыҡ бирелгән.

Әммә, иғтибар итһәгеҙ, хаталар һаман да осрай. Күрәһең, шул уҡ ойошма, предприятиеларҙың ошо яҙыуҙар өсөн яуаплы бүлектәрендә башҡорт телен яҡшы белгән хеҙмәткәрҙәр булмай тороп, хаталы яҙыуҙар бөтмәҫтер. Ошо хаҡта ла уйларға кәрәктер, моғайын. Юҡһа, нисәмә йылдар хаталар өҫтөндә эш дауам итә, ә улар бөтөргә уйламай ҙа...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҠЫҪҠАСА

# АҒИҘЕЛ ЯРЫНДА...

**Өфө тәңгәлендәге Ағиҙел йылғаһының яңы яр буйы көслө ташҡын зонаһында урынлашҡанлыҡтан, уны төҙөкләндереү айырым иғтибар талап итә.** Йылға кимәле нуль посынан - 1,5 метрға тиклем төшөргә, ә көслө ташҡын ваҡытында 12 метрға тиклем күтәрелергә мөмкин. Шуға яр буйының һәр ярусы айырым ҡулланылышҡа эйә. Бында капиталь объекттар урынлаштырырға һәм йәшелләндереү эштәре алып барырға мөмкин. Үрге ҡатламдағы прогулка зонаһында эскәмйәләр, сүп-сар һауыттары, бағаналар ҡуйылған, ағастар ултыртылған, яҡтылыҡ булдырылған. Түбәнге ике ярус 12 июндән 15 апрелгә тиклем файҙаланыла. Урта террасала (88 метр) һыу баҫыу ихтималлығы яҡынса 10 процент, түбәнге террасала (84,5 метр) - 100 процент. 15 апрелдән 15 майға тиклем уларҙы һыу баҫыуы мөмкин, шуға күрә унда ике аҙна дауамында комплекслы таҙартыу эштәре алып барылыуы мөмкин. Тағы ла ике аҙна инженер системаларын көйләүгә китә. Һыу баҫасаҡ террасаларҙа бер йыллыҡ ҡына үҫентеләр ултыртыла, даими булмаған сауҙа нөктәләре урынлаштырыла, йәшелләндереү һәм архитектура яҡтыртыуы эштәре башҡарыла. Шул уҡ ваҡытта яр буйында, хатта рельеф рөхсәт иткәндә лә, пляждар булмаясаҡ.

✓ **Өфө аэропортында яңы коронавирус инфекцияһына тест уҙғарыу өсөн икенсе пункт асылды.** Аэропорттың икенсе терминалында асылған коронавирусҡа тест тапшырыу пункты халыҡ-ара рейстар менән ҡайтҡан пассажирҙарға иҫәпләнгән. Ул сит илдән килгән рейстарҙың графигына ярашлы асыла. Элек асылған тест уҙғарыу пункты ла эшләүен дауам итә. Ул беренсе терминалда киске сәғәт 8-ҙән иртәнге 8-гә тиклем асыҡ. ПЦР алымы менән алынған анализ һөҙөмтәләре 48 сәғәт эсендә әҙер була. Тест буйынса тикшереүҙе Башҡортостан Республикаһында Гигиена һәм эпидемиология үҙәге үткәрә. Һөҙөмтәләрҙе ике тәүлектән һуң алырға мөмкин. Алдан хәбәр ителгәнсә, сит илдән ҡайтҡан граждандар өс көн дауамында ПЦР алымы менән коронавирусҡа тест тапшырырға, шунан һуң Дәүләт хеҙмәттәре порталында теркәлеп, уның һөҙөмтәләрен хәбәр итергә тейеш.

✓ **Башҡортостанда торлаҡҡа хаҡ артыуы дауам итә, тип хәбәр итте республика статистиктары.** Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, өсөнсө кварталда республиканың беренсел баҙарында торлаҡтың бер квадрат метры уртаса 65,6 мең һумға еткән. Был 2020 йылдың икенсе кварталына ҡарағанда 0,9 процентҡа күберәк. Башҡортостанда "икенсел" торлаҡ арзанырак - өсөнсө квартал йомғаҡтары буйынса бер квадрат метры өсөн уртаса 60,3 мең һум. Ағымдағы йылдың икенсе кварталы менән сағыштырғанда, республикала икенсел торлаҡ баҙарында хаҡтар 1,7 процентҡа артҡан. Әгәр торлаҡҡа хаҡты 2019 йылдың аҙағы менән сағыштырғанда, Башҡортостанда беренсел баҙарҙа ул - 3,4 процентҡа, икенсел баҙарҙа 1,6 процентҡа артҡан, тип йомғаҡ яһанылар Башстатта.

✓ **Киләһе йылда әсәлек капиталы күләме индексациялана һәм артабан уны йыл һайын арттырыу планлаштырыла.** Был турала Рәсәйҙең хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры урынбаҫары Ольга Баталина хәбәр итә. Бынан алда Хеҙмәт министрлығы 2021 йылда әсәлек капиталы инфляцияның прогноз кимәлен иҫәпкә алып 3,7 процентҡа артасағын хәбәр иткәйне. Уның күләме беренсе балаға - 483 882 һум, икенсеһенә 639 432 һум була. Әсәлек капиталын биреү Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ҡушыуы буйынса әҙерләнгән "Демография" милли проектында ҡаралған. 2007 йылдан икенсе балаһы тыуған йәки тәрбиәгә алған (шулай уҡ артабанғы бала, әгәр быға тиклем әсәлек капиталына хоҡуҡ булмаһа йәки юлланмаһа) ғаиләләр ошондай дәүләт ярҙамына хоҡуҡлы. 2020 йылдан беренсе балаһы донъяға килгән ғаиләләрҙең дә әсәлек капиталына хоҡуғы бар. 2020 йылдың 1 ғинуарынан һуң тәүге балаһы тыуған ғаиләләр өсөн әсәлек капиталы күләме 466 617 һум тәшкил итә. 2020 йылдан икенсе сабыйы донъяға килгән ғаиләләр өсөн әсәлек капиталы 150 мең һумға арттырыла.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Туҡранбаш

❖ Туҡранбаш (клевер луговой) С витаминына, башҡа матдәләргә лә бай. Уны ябыҡҡанда, аҙ ҡанлылыҡтан эсәләр. Анемия, С витамины етмәгәндә 1-2 ҡалаҡ туҡранбаш сәскәһен 1 стакан һыуҙа сәй кеүек бешерәһең һәм көнөнә 2-3 мәртәбә икешәр ҡалаҡ эсәһең. Был төнәтмә хәтерҙе лә яҡшырта.

## Битлектәр

❖ Оҙайлы ялдар мәлендә бит тиреһен туҡландырыу, таҙартыу өсөн битлектәр яһап алығыҙ. 1 йомортҡа һарыһын туҡып, 3-6 тамсы лимон һуты өҫтәргә, биткә һылап, кипкәнен көтөргә лә, тағы бер ҡат һыларға. 15-20 минут тоторға.

❖ 2 балғалаҡ эремсеккә 1 балғалаҡ петрушка йәки ҡаты итеп яһалған 1 балғалаҡ сәй, 1 балғалаҡ етен майы, лимон йә әфлисун ҡабығын ҡырып ҡушығыҙ.

❖ 2 ҡалаҡ һоло онона 1 ҡалаҡ үҫемлек майы, 1 балғалаҡ бал, 3 ҡалаҡ һөт ҡушырға. Бит тиреһендәге һырҙарҙы бөтөрөү өсөн ҡулланыла.

## Мүк еләге

❖ Ҡыш - мүк еләге (клюква) миҙгеле. Мүк еләге йөрәк, ҡатын-ҡыҙҙар сирҙәре һәм башҡа ауырыуҙарҙан файҙалы.

❖ Мүк еләге һутын ҡулланыу енси юлдар инфекцияһы барлыҡҡа килеүен һәм таралыуын булдырмай, сөнки мүк еләге һуты бактерияларға кеше күҙәнәктәрендә һаҡланып ҡалырға мөмкинлек бирмәй. Ҡатын-ҡыҙҙарға шәкәр ҡушылмаған мүк еләге һутын йышыраҡ эсергә кәрәк.

❖ Мүк еләгендәге проантоцианидин органик ҡушылмаһы тештәрҙе таш һәм юшҡындан таҙарта, шуға ла пародонтозды иҫкәртеү өсөн мүк еләге ҡулланыла.

❖ Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларға мүк еләге һутын бер нисә ай дауамында ҡабул итеү ашҡаҙан яман шеше йәки яҙваһы барлыҡҡа килтерә торған бактериаларҙан ҡотолорға ярҙам иткән.

❖ Көн һайын бер стакан мүк еләге һуты эсеү юғары тығыҙлыҡтағы липопротеиндарҙың, икенсе төрлө әйткәндә, "яҡшы" холестериндың артыуына, ә түбән тығыҙлыҡтағыларының кәмеүенә килтерә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✔ *Яҙын өйҙә ултырыуға түҙгән булһаҡ, көҙөн был хәл уҡыусыларҙы психологик стресҡа индерҙе. Хәҙер уларҙы был халәттән сығарып һәм артабанғы мәктәп тормошона һалып алыу бик ауыр буласаҡ.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ ҠОРАМАҺЫ

Ҡара төҫтәге ҡорамалар ғәҙәттә ҡыҙылдары менән тоташтырыла, һирәгерәк асыҡ йәшел, асыҡ һары, ҡыҙғылт һары, алһыу, зәңгәр, күк менән ҡушыла. Айырыуса алһыу зәңгәр, шәмәхә, көрән, ҡуйы ҡыҙыл төҫтәр менән бик һирәк ҡулланыла.

Аҡ төҫ һәр ваҡыт тик ҡара менән генә йәнәш килә, әммә аҡ туҡыма ҡорама биҙәктәрендә үтә һирәк ҡулланыла.

Нәфис төҫтәр (алһыу, сирень, зәңгәр), күрәһең, ҡорамаға сағыштырмаса һуңыраҡ осорҙа ингән.



*Стена буйына һалынған түшәм (БР, Белорет районы, Аҙналы ауылы). Автор фотоһы. 1976*

Боронғо фотоларға ҡарағанда, XIX быуат аҙағы - XX быуат башында шаршау, түшәмес һәм башҡа әйберҙәрҙе эшләгәндә һүрәтле туҡымалар ҙа ҡулланғандар, әммә улар орнаменталь композицияның бөтөнлөгөн боҙған; шуға тигеҙ буялған туҡымаларҙы һайлағандар.

Оҫта ҡуллы ҡатын-ҡыҙҙар ни бары 3-4 төҫ ҡулланып ҡына зауыҡлы әйберҙәр теккән. Был традиция бөгөнгө Башҡортостан территорияһында оҙаҡ йылдар һаҡланған, бигерәк тә көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш райондарҙа. Мәҫәлән, Күгәрсен районындағы тар урындыҡ ябыуы ике рәт ҡыҙғылт һары ҡыя шаҡмаҡтар һәм уларҙың уртаһында урынлашҡан бер рәт ҡара ҡыя шаҡмаҡтар менән биҙәлгән. Ҡыҙғылт шәмәхә ҡайма буйында орнаменталь ерлекте тигеҙләп торған зәңгәр өсмөйөштәр киҫкен ҡара-ҡыҙғылт һары "ҡаршы торошто" йомшартҡан. Ейәнсура районындағы түшәмдә зәңгәр һәм шәмәхә төҫөндәге ҡыя шаҡмаҡтарҙан торған орнамент шундай уҡ ҡыя шаҡмаҡ һәм бәләкәйерәк өсмөйөштәрҙән ҡоралған ҡыҙыл ерлектән асыҡ айырылып торған. Түшәм күк туҡыма менән көпләнгән, тар яғына ҡара һары төҫтәге ҡайма тегелгән. Әбйәлил районында осраған түшәмдең уртаһы күҙгә ташланып тора, унда ике рәт көрән ҡыя шаҡмаҡтар уртаһына асыҡ йәшелә ҡоралған. Ҡара күк төҫтәге ҡаймаһына нигеҙ яғы менән ҡаратып тегелгән нәҙек ҡара һыҙыҡ һүрәтле йәшел өсмөйөштәр ҡыя шаҡмаҡ орнаментты тулыландырған. Ҡара күк ҡайма һәм ике төҫтәге туҡыманы ҡулланып (мәҫәлән, ҡыҙыл һәм көрән), кәкерсәккә оҡшаш орнамент хасил иткән ҡорама менән көпләнгән юрғандар ҙа осраған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

КӨНАУАЗ

**Үҙизоляцияла ултырыуға ярты йылдан ашыу булып китте. Мәктәп уҡыусылары һәм студенттарҙың өйҙән уҡығанына ла байтаҡ инде. Балаларҙың ситтән тороп уҡыуын башта ҡыҙыҡ итеп тә, уйын-көлкө аша ла һөйләһәләр, бөгөн был тәртиптең мәктәп өсөн дә, ата-әсәләр өсөн дә, ә иң мөһиме, уҡыусыларҙың үҙҙәре өсөн бәлә булып килеүен йәшермәйҙәр. "Был белем биреү түгел инде", тип асыҡтан-асыҡ әсенеп әйтә һәм баштарын тота уҡытыусылар ҙа, ата-әсәләр ҙә. Ә шулай ҙа уҡырға кәрәк. Балалар белем алырға һәм төрлө яҡлап үҫешергә тейеш. Мәктәпкә һәм уҡытыусыларға һалынған яуаплылыҡ ҡапыл ғына ата-әсәнең үҙ елкәһенә төшөп ятты һәм улар был осраҡта ни эшләргә белмәй ҙә ҡалды. Бөтәһе лә түгел, әлбиттә. Уҡыу-уҡытыуҙы ғаилә болаһына әйләндереп ебәргәндәр ҙә, балаларын интернет донъяһына оҙатып, тыныслыҡ тапҡандар ҙа һәм был эште тейешле системаға һалып алып, ауыр ваҡыттарҙы бәләкәстәре (үҫмерҙәре) менән бергә үтә белгән ата-әсәләр ҙә бар. Был темаға башланғыс синыф уҡыусыһының әсәһе Зилә Ниғмәтуллина менән һөйләштек.**

# БАЛАНЫ ӨЙҘӘН УҠЫТАБЫҘ...



➔ **Бала яңғыҙ уҡыуҙы, мәктәптән айырылыуҙы ауыр кисерәме?**

- Башта беҙ был хәлде бер айға, ике айға ғына тип уйланыҡ бит. Балалар ҙа каникул итеп кенә ҡабул иткәйне. Тора-бара, ваҡыт үтә тора балалар ҙарыҡты, уларҙа ысын мәғәнәһендәге апатия башланды. Бәләкәстәр уҡытыусыларын, синыфташтарын, шул шаулы тормошто башҡаса күрә алмаҫбыҙ тигән өмөтһеҙлеккә төштө. Олораҡтарға аңлатып булалыр, ә бәләкәстәр "ҡасан" тигән һорау менән йәнде ҡыя ғына. Ата-әсәләр менән һөйләшеп торабыҙ, күптәрҙең хатта ашауы, йоҡоһо насарайған, ә уҡырға теләк юғалыуы тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Оҙайлы ваҡыт бер өйҙә ултырыу һәм сикләнгәнлек бер ғаиләләге балаларҙы ла йыш әләгешеүгә, сыйышыуға килтерә икән. Яҙын өйҙә ултырыуға түҙгән булһаҡ, көҙөн был хәл уҡыусыларҙы психологик стресҡа индерҙе. Хәҙер уларҙы был халәттән сығарып һәм артабанғы мәктәп тормошона һалып алыу бик ауыр буласаҡ.

➔ **Һеҙ баланы өйҙә нисек уҡытаһығыҙ? Башланғыс класс уҡыусыһын, мәҫәлән, контроль аҫтында тоторға кәрәк түгелме?**

- Бөтә ата-әсәләрҙең дә педагогик белеме юҡ һәм күптәр үҙҙәре эштә. Тимәк, һәр ваҡыт контролдә тотоу бик икеле. Шунлыҡтан балаға уҡыуға булған яуаплылыҡты һендереп кенә алға китеп була был осраҡта. Беҙҙең өйҙә тәртип ошолай ҡоролдо: иң беренсе сиратта телефондан айырылдыҡ. Асылда, ул телефонды уға бығаса ла тотторор өйрәтмәгәйнек. Бер ниндәй ҙә интернет уйындары юҡ. Яҡшы билдәһен дә, эш эшләгәнен дә телефон менән баһаламайбыҙ. Сөнки бөгөн балалар агрессияһының 80 проценты тик шул интернет уйындарынан килә. Ундағы бейеклектәр яулайым тип көйәләнеүҙәре, еңәм тип сирышыуҙары уларҙа спорт азартын түгел, ә асыуын башҡаларға төшөрөү ҡылығын уята. Атыу, туҡмау, ҡан ҡойоу, юҡ итеү нигеҙенә ҡоролған ундағы күп нәмә.

Телевизорҙан да мәғәнәһеҙ мультфильмдарҙы ҡаратмайбыҙ, ә тәбиғәт, сәйәхәт, тарих, космос буйынса ҡыҙыҡлы тапшырыуҙарға "ултыртырға" тырышабыҙ. Мәҫәлән, "Пятница" каналындағы сәйәхәттәр тапшырыуы бөтә ғаилә өсөн дә фәһемле. Алып барыусы Дима Комаров улыбыҙҙың кумиры булып китте. Уның гуманистик ҡарашлы, мәҙәниәтле, белемле журналист булыуы балаға ныҡ тәьҫир итә. Дима Комаров күрһәткән илдәрҙең флагтарын эшләп әлеп бара.

Уҡыу программаһы буйынса әҙәби уҡыуҙарҙа аҙыраҡ көйһеҙләнә. Мәктәптән ҡушылғандар уға яңылыҡ була алмай инде. Әсбаптар ҙа баланы әүрәтмәй артыҡ. Һүрәттәре маҡтанырлыҡ түгел, иллюстрациялар юҡ тигәндәй. Бәхтиһән, башланғыс синыфтарҙа әсбаптарҙың биҙәлеше ҙур роль уйнай икән.

Баланы өҫтәмә шөғөлләндереү өсөн республика мәғариф сайттарында, ҡала сайттарында төрлө конкурстар бар. Төрлө темаларға ла эш табырға була унда. Беҙ һүрәт бәйгеләрендә ҡатнашабыҙ.

➔ **Икенсе класс балаһына телефон урынына китап тотторор ултырта алыу өсөн ниндәй мөгжизәгә эйә булырға кәрәк? Шулай шаяртып һорайым, сөнки был, күп ата-әсәләрҙең фекере буйынса, мөмкин булмаған хәл.**

- Ысынында был мөмкин хәл һәм мин ундай балаларҙы беләм дә. Беҙ улыбыҙға йәш-йәш ярымдан китап алдыҡ, уҡыныҡ, һүрәттәрен ҡараныҡ. Үҫә бара "Һинең китапханаң" тигән кәштә булдырҙыҡ. Ул да ололар кеүек китаптарына ҡултамғаһын ҡуйып теҙеп ҡуйырға өйрәнде. Телевизор һәм телефонға сикләү булғанда, китап баланы тиҙ арбай ул. Интернет уйындар һәм сит илдең мультиктары яман ғәҙәттәргә өйрәтә торған сығанаҡтар булһа, китаптар, ғәҙәттә, изгелеккә, мәрхәмәтлеккә, илһөйәрлеккә саҡыра. Сөнки китапты һин уға үҙең һайлап алып бирәһең.

Бөтөн әкиәттәрҙең дә, кинофильмдарҙың да китап варианттары бар бит. Мәҫәлән, "Гарри Поттер" кеүектәрҙең дә. Киноға ҡарағанда китабы күпкә ҡыҙығыраҡ һәм байыраҡ, тип аңлатам уларҙы. Мажаралар менән арбалған бала бындай тәҡдимдән баш тартмай ул, ғәҙәттә.

Малайҙарҙың ҡыҙыҡһыныуҙары алыҫ ерҙәр, космос серҙәре, батыр сәйәхәтселәр, хайуандар донъяһы, фәндәр асышы, серле нәмәләр тураһында була торған. Нимәгә әүрәүен белеп алырға кәрәк. Һәм китап магазинына, китапханаға алып йөрөтөп өйрәтеү мөһим. Унан уҡығаны тураһында һорашып, иҫең китеп тыңларға кәрәк. Малайҙар халҡы әсәйҙәрен, өләсәйҙәрен белемдәре менән аптыратырға ярата. Ғөмүмән, әлеге сикләнгәнлек мәлендә баланың ниндәй ижади башланғысына ла риза булырға кәрәктер, тип уйлайым (һәм башҡа ваҡытта ла). Бөгөн беҙҙә гуашь-буяуҙарға диван да, ҡорғандар ҙа буялып бөткән, хеҙмәт дәресе залды мастерской итеп ҡуйған, йоҡо бүлмәһе астрологик үҙәк, бер мөйөш музей, икенсеһе музыка класы. Ҡурай, флейта, ҡумыҙ концерттарын кис һайын ҡуйып торорға тырышабыҙ, һикереп төшөп бейеп китеү ҙә мотлаҡ.

Тағы ла бер мөһим нәмә - тәбиғәт. Тәбиғәткә яҡын булыу баланы яңғыҙлыҡтан ҡотҡара. Урманда уйланып, һөйләшмәй генә йөрөргә, тирә-яҡты күҙәтергә өйрәтегеҙ. Һындырмаҫҡа, тапамаҫҡа, ҡырҡмаҫҡа, үлтермәҫкә икәнде лә төшөндөрөгөҙ. Ныҡ тынысланып, иләҫләнеп ҡайта бәләкәстәр ҡырҙан. Иң һәҙәмтәле һәм осһоҙло алым.

Былар барыһы ла эшләп йөрөгән ата-әсә булдыра ала торған эштәр. Баланың үҙ донъяһы, ололарҙыҡы айырым икән тип уйларға ярамай. Бала менән ҡуша йәшәргә кәрәк. Шунда ғына ул һинең һүҙеңде тыңлай, әйткәнеңде ишетә, кәңәштәреңде тота торған булып тәрбиәләнә. Һин телефонда, балаларың бер яҡта телефонда ятып кис үткәрһәгеҙ икән, ғәйепте ситтән эҙләргә кәрәкмәй.

➔ **Мәктәптең файҙаһын баһаланыҡ был хәлдә, шулай бит?**

- Әлбиттә, баһаланыҡ. Балаларҙың йәмғиәт менән аралаша, тиҫтерҙәре менән бергә үҫә, уҡытыусы тигән оло шәхес менән таныша ала торған бер ҙур тормошо бит ул мәктәп. Күпме матур кисерештәр үтә, тәрбиә-һабаҡ ала, башҡаларҙы күҙәтә улар унда. Һөнәрмәндәр ҡулында әүәләнә. Мәғариф системаһын, мәктәптәрҙе, уҡытыусылар хеҙмәтен һуңғы йылдары артыҡ баһаламай киттек, сер түгел, быны хәҙер уйланыр мәл килде. Беҙҙә бушлай уҡыуҙар, бөтөн төрлө түңәрәктәр ҙә бар, үҫешеүҙең ниндәй төрөн һайлаһаң да ҡаршылыҡтар юҡ - белем ал ғына. Шуның ҡәҙерен беләйек. Үҙкурсаланыуҙарҙы үтеп, мәктәптәребеҙҙә һағынып барырбыҙ, тигән өмөттәбеҙ, Алла бирһә.

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА әңгәмәләште.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БАЛЫҠСЫ ТИГӘН АТЛЫ, БАШҠОРТ ЗАТЛЫ ЫРЫУҘАНБЫҘ

**Балыҡсы ырыуы төньяҡ башҡорттарына ҡараған этнографик төркөмгә инә. Улар нигеҙ һалған ауылдарҙың күпселеге Төй һәм Сарс йылғалары буйында урынлашҡан. XX быуат башындағы революцияға тиклем ошо ырыу халҡы йәшәгән административ территория Өфө губернаһының Бөрө өйәҙе Балыҡсы олоҫо тип атала. Хәҙерге ваҡытта Асҡын районының Әмир (Байгош), Билгеш, Гөмбә, Яңы Сөйөш, Кәмәшиҙе, Солтанбәк (Иҫке Сарс), Сураш, Яңы Ҡушкилде, Иҫке Ҡушкилде, Урмияҙ (Юрмияз), Үршиҙе, Көнгәкбаш, Ташлыкүл (Шишмә), Ҡариҙел районының Муллаҡай, Яңы Муллаҡай, Түбәнге Балмазы ауылдарында балыҡсы ырыуы вариҫтары йәшәй.**



Район үҙәге булған Асҡын ауылына, Башҡортостандың башҡа райондарына һәм Рәсәйҙең башҡа тарафтарына күсеп киткән кешеләрҙе лә иҫәпкә алғанда, балыҡсы ырыуына ҡараған башҡорттарҙың дөйөм һаны әлеге ваҡытта 5-6 мең самаһына етә, тип әйтергә була. Әлбиттә, был боронғо ырыу ҙурҙарҙан түгел, әммә уның үҙенә генә хас боронғо тарихи тамырҙары бар.

Көньяҡтараҡ урынлашҡан башҡа ырыуҙар менән сағыштырғанда, үҙенең географик торошо менән айырылыбыраҡ торған балыҡсы ырыуы ауылдары этник яҡтан бер төрлөрәк - был яҡтарҙа башҡорт ырыуҙары Рус дәүләтенә ҡушылған замандарҙан бирле мишәр йәиһә ҡаҙанлылар (аҙаҡтаныраҡ татар этнонимын алыусылар) миграцияһы күҙәтелмәй. Улар башлыса рус крепостарынан артыҡ алыҫ булмаған ерҙәрҙә, оло юлдарға яҡыныраҡ ерҙәрҙә төпләнергә тырыша. Ә тарихи Башҡортостандың төньяҡ тарафтарында, таулы-урманлы зонала ер эшкәртеү мөмкинлегенең сикләнгәнерәк булыуы ситтән килеүселәрҙе артыҡ ылыҡтырып бармаған.

Тарихи күҙлектән сығып ҡарағанда, башҡорт йәмғиәтенең ырыу-ҡәбилә ҡоролошо ҡанундарына һәм традицияларына нигеҙләнгән йәшәү рәүеше, үтә тотороҡло булып, ил-йорт булараҡ, ниндәй генә дәүләт составына инеүенә ҡарамаҫтан, күп быуаттар дауамында әллә ни үҙгәрештәр кисермәй. Ғөмүмән, башҡорт халҡы, күпселек төрки ҡәүемдәренән айырмалы, бер нисә тиҫтәнән артып киткән, бер-береһе менән реаль йәиһә мифик туғанлыкта торған оло ырыу-ҡәбилә берләшмәһе булараҡ, күп быуаттар буйына формалашыуын дауам итә. Был башҡорт этногенезының айырып алғыһыҙ сифаты. Тап шуның өсөн башҡорттар Рус дәүләтенә ҡушылған осорҙан башлап, Рәсәй империяһы тамам формалашып бөткән замандарҙа ла Башҡорт иленең административ-территориаль бүленеше уларҙың ырыу-ҡәбилә ҡоролошона яраҡлаштырып башҡарыла. Һәр бер ырыу йәшәгән территория ошо ырыу исеме менән аталған олоҫто хасил итә. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: башҡорт йәмғиәтендә аҫабалыҡ, йәғни ер биләүсе хоҡуғы тотош ырыуға бирелә. Башҡорт аҫабалығы, Алтын Урҙа замандарында ла монгол хандары тарафынан танылып, халыҡтың дөйөм хоҡуҡи статусы рәүешендә тейелгеһеҙ була. Ә рус чиновниктары батша исеменән башҡорт ырыу башлыҡтарына, аҫабалыҡ статусын раҫлатыу бурысы йөкмәтелгән халыҡ вәкилдәренә, ошо хоҡуҡты танып, уны раҫлаусы һәм һаҡлаусы (подтвердительный һәм оберегательный) грамоталар тапшырып ныҡыта. Тик XIX быуаттың икенсе яртыһында, Башҡорт халҡы менән идара итеү буйынса административ реформа ғәмәлгә ашырылыу барышында традицион олоҫтар системаһы территориаль принцип буйынса үҙгәртеп ҡорола, ә башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғы империя менән бергә XX быуат башында ғына юҡҡа сығарыла.

Балыҡсы ырыуының боронғо тамырҙарын барлап ҡарайыҡ. Әйтергә кәрәк, ошо ырыу тарихы ғилми яҡтан әлегә тиклем тулыһынса хәл ителеп бөтөлмәгән мәсьәлә булып тора. Шуға ҡарамаҫтан, билдәле булған һәм ентекләп өйрәнелгән ғилми сығанаҡтар нигеҙендә балыҡсы ырыуының килеп сығышы хаҡында байтаҡ ҡына фараздар менән бер рәттән, етди һығымталар ҙа эшләнгән. Иң тәүҙә күренекле тарихсы-этнолог Р.Ғ. Кузеевтың фараз-гипотезаларын ҡарап үтәйек.

Ул балыҡсы ырыуының килеп сығышын ошо этнонимдың иң беренсе күҙгә ташланған этимологик мәғәнәһе - балыҡ тотоу менән шөғөлләнеүсе ҡәүемгә ҡарата ныҡнып ҡалған һүҙ менән аңлатыуҙы дөрөҫ тип тапмай. Башҡорт этнологы яҙыуынса, балыҡсылыҡ төрки сығышлы ҡәүемдәрҙә бер ҡасан да хужалыҡ итеүҙең төп тармағы ла, ырыу көнкүрешен тәьмин итерлек килем сығанағы ла булмай. Шуға ҡарамаҫтан, ҡаҙаҡтарҙа, төркмәндәрҙә, ҡырғыҙҙарҙа һәм тувалар ҙа ла балыҡсы этнонимы менән аталып йөрөтөлгән ырыуҙар булыуы билдәле. "Балыҡсылыҡ күпселек осраҡтарҙа башҡорттар, ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙар хужалығында әллә ниндәй әһәмиәткә эйә булмай, йәиһә бөтөнләйе менән булмай. Шулай уҡ балыҡ культы менән бәйле боронғо ҡараштар рудименттарының яҙма сағылышы юҡ. Ошо сәбәптәр халыҡ этимологияһы тәьҫирендә был этнонимдың боронғо башҡорттарҙың хужалыҡ шөғөлдәре менән бәйле булыуы хаҡындағы фекеребеҙҙе кире ҡағырға мәжбүр итә", - тип яҙа Р.Ғ. Кузеев.

Әле бәйән ителгән фекерҙән сығып, ошо күренекле тарихсы "балыҡсы" субэтнонимының этимологик нигеҙендә "balig" тигән боронғо төрки һүҙе ятыуын фаразлай, сөнки тап ошо һүҙ боронғо төрки яҙма ҡомарткыһы булған Орхон ташъяҙмаһында "кала" мәғәнәһендә ҡулланылған. Күлтегин хөрмәтенә бағышланған Оло яҙмала шундай һүҙҙәр бар: "Тогу балыкда сунушдимез...", йәғни "Тогу ҡалаһы янында һуғыштыҡ". Билге ҡағанға арналған ташъяҙмала Бешбалыҡ ("Бишҡала") телгә алына. Шулай уҡ боронғо төрки һәм монгол дәүләттәрендә хан ставкалары Орду-балыҡ йәиһә Хан-балыҡ, тип аталған була. XI быуатта йәшәгән төрки тел белгесе, ғалим Мәхмүт Ҡашғари үҙенең "Диван Лугат ат-Турк" ("Төрки һүҙҙәре йыйынтығы") тип аталған ғилми әҫәрендә был һүҙгә ошондай аңлатма биргән: "Балик - мәжүсиҙәр һәм Уйғыр һөйләшендә "кәлгә, ҡала" була. Шунан биш балик ("биш ҡала") атамаһы барлыҡҡа килә - ул Уйғырҙарҙа иң ҙур ҡала. Уларҙың икенсе бер ҡалаһы йәңи балик ("яңы ҡала"), тип атала".

Әммә боронғо төрки теләндәге "balik" һүҙенең икенсе бер мәғәнәүи ерлектә ҡулланылған икенсе варианты ла булған - был хәҙерге төрки телдәрендә киң ҡулланылған "балыҡ" һүҙе. Иң ҡыҙығы ла шунда: был ике төрлө мәғәнәлә ҡулланылған омоним бер үк "бал" тамырынан барлыҡҡа килгән. Быны академик С.П. Толстов былай аңлата: боронғо төрки телендә -bal- тамыры һыуланып шыйыҡланған батҡаклы ергә ҡарата әйтелгән. Мәхмүт Ҡашғари ҙа шуны уҡ раҫлай: "Аргу һөйләшендә "балик" - "бысраҡ". Бынан төрки һүҙе "балчук" (балсыҡ) хасил булып, Үҙәк Азияла төп төҙөү материалы булған балсыҡ кирбестән һалынған ҡалаларҙың "балик" тип атала башлауына ерлек биргән. Һыу аҫтында, йылға төбөндәге еүеш балсыҡ өҫтөндә йәшәгәнлектән, балыҡ та шул уҡ тамырҙан хасил булғандыр, тип фараз ҡылырға була. Әйткәндәй, төрки һүҙе "балчыранмак" тәнгә, кейемгә бысраҡ буялыуҙы аңлата, ә башҡорт телендә был һүҙ, -л- фонемаһы төшөп ҡалып, "бысранмаҡ" формаһын алған. "Блато" тигән славян, уның русса варианты "болото" һүҙҙәренең тамырында ла шул уҡ боронғо -bal- тамырын шәйләп була.

Быны ошондай фекерләү логикаһынан сығып, тарихсы Р.Ғ. Кузеев "балыҡсы" этнонимының боронғо этимологик тамырҙарын төрки донъяһы менән бәйләй алған да инде. Боронғо төрки донъяһында гөрләп торған ҡалалар, дошмандар һөжүменән һаҡланыр булырлыҡ кәлгәләр байтаҡ булған. Ошо ҡала-кәлгәләрҙе һаҡлаусы профессиональ яугирҙар, ҡала һаҡсылары кланы булыуын инҡар итеп булмай. Тап ошо социаль төркөмдөң халыҡ араһында "баликчи", "балыҡсы", тип атала башлауы бик мөмкин. "Күрһәтелгән аналогиялар һәм балыкчи атамаһының күскенселәр (тувалар, ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙар, төркмәндәр, башҡорттар) араһында таралыуы этнонимдың боронғо төрки сығышлы булыуы хаҡында һөйләй... Балыҡсы, балыҡсылар боронғо ҡалаларҙың (мәҫәлән, Етеһыуҙың) күскенсе периферияһын тәшкил итеп, ниндәйҙер шарттарҙа уларҙы һаҡлау бурысын үтәгән булыуы мөмкин", - тип яҙа Р.Ғ. Кузеев.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләнә.**
**(Дауамы бар).**

---

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

**Бөтмәҫ дандары ҡалды**

Батальон комиссары Абдуллин Әхмәт Ғатаулла улы етәкләгән дивизия политбүлеге партия һәм комсомол ойошмаларын төҙөү буйынса бик күп эш башҡарҙы. Дивизия төҙөлгән мәлдә ундағы партия-комсомол ҡатламы ни барыһы 12 процент булһа, һуғыш хәрәкәттәре башланыуға ул 32 процентҡа тиклем үҫте, ә коммунистар нисбәте 21 процентҡа етте. Уның комсомол буйынса ярҙамсыһы, өлкән политрук Н.Д. Аҙнағолов яугирҙарҙы ауырлыҡтар алдында ҡаушап ҡалмаҫҡа өндәне. Тәүге алыштарҙа уҡ коммунистар һәм комсомолецтар юғары ҡаһарманлыҡ өлгөләрен күрһәтте. Улар иң беренсе булып атакаға ташланды, оборонала торғанда дошман ҡыҫымына һис бирешмәне.

Частарҙы һәм уларҙың штабтарын һуғышҡа әҙерләү өсөн дивизия командиры М.М. Шайморатов күп көс һалды. Һуғыштың тәүге осоронда туплаған тәжрибәһенә таянып, ул полктарҙы ныҡышмалы рәүештә өйрәтте, һауа торошоноң ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, һуғыштың төрлө төрҙәре буйынса тактик күнекмәләр ойоштороҙо. Тәүге алыштар барышында ул ут һәм тере көстәр менән уңышлы маневр эшләп, ҡабул ителгән ҡарарҙарын үтәлешен ныҡышмалы рәүештә талап итте.

Брянск фронтының Хәрби Советы Башҡорт дивизияһының тәүге оборона алыштарына юғары баһа бирҙе. 1942 йылдың 31 июлендә фронт буйынса приказ менән дивизияның 97 кешеһе орден һәм миҙалдар менән бүләкләнде. Август айында дивизияға 38-се армияның Хәрби Советы ағзаһы, СССР Юғары Советы депутаты генерал-майор Воронин килде. Ул СССР Юғары Советы Президиумы ҡушыуы буйынса тантаналы шарттарҙа батырлыҡ күрһәткән офицер һәм һалдаттарға орден һәм миҙалдар тапшырҙы.

Башҡорт дивизияһы, ныҡлы һәм ышаныслы соединение булараҡ, хәрби дан һәм хөрмәт ҡаҙанды.

1942 йылда комдив Миңлеғәли Шайморатовтың урынбаҫары, ул Донбасс ерендә батырҙарса һәләк булып ҡалғас, артабан 16-сы гвардия атлы дивизияһы тип атала башлаған хәрби соединениеның командиры вазифаһына тәғәйенләнгән Григорий Андреевич Беловтың һуғыш хәтирәләренән алынған мәғлүмәттәрҙән һуң, ҡаһарманлыҡтары өсөн юғары дәүләт наградаларына лайыҡ булған башҡорт атлыларының исемлеген ҡатлап гәзитебеҙ битендә баҫыуҙы урынлы, улар хаҡындағы мәңгелек хәтерҙе яңыртыу сауаплы булыр тибеҙ.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләнә.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Ҡәберҙәрҙә, ысынлап та, бәһлеүәндәр күмелгәйне. Һөйәктәренең оҙонлоғо ғына метр ҙа һикһән биш сантиметр, эре, ап-аҡ һөлдәләр, тештәре лә теүәл, эргәләрендә метр ҙа егерме сантиметр оҙонлоҡтағы тимер ҡылыстар ята.*

# ВАҠЫТ МАШИНАҺЫНА

## һәр тарихи дәүерҙә

**Башҡортостан Республикаһының Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге етәксеһе Данир Әхмәҙи улы ҒӘЙНУЛЛИНдың хеҙмәт биографияһы тулыһынса тип әйтерлек үткән быуаттың 80-се йылдар аҙағында илебеҙҙә башланып китеп, бөгөн дә дауам иткән үҙгәрештәр дәүеренә бәйле. Әйтергә кәрәк, Данир ошо осор һынауҙарын лайыҡлы үтеп, үҙен шәхес булараҡ һәр йәһәттән раҫлаған кеше. Уның менән әңгәмәбеҙ ҙә, асылда, ошо үҙгәрештәр юҫығында барыр.**

**Данир Әхмәҙи улы, һәр кемдең ғүмере буйына хәтерендә һаҡланған бала саҡ хәтирәләре була. Һинең күңел китабыңда был йәһәттән ниндәй ваҡиғалар теркәлеп ҡалған?**

- Минә ике йәш ине. Ул саҡта Стәрлетамаҡ районының Мәксүт ауылында йәшәнек. Бер мәл ауыл халҡын магазин янына йыйып ултырттылар. Мәксүттән бер нисә саҡрым алыҫлыҡтағы "Кама-2" объектында ер аҫтында ядро шартлау үткәрәләр икән. Өләсәйем дә иҫән ине әле. Айрат абзыйым, Резеда апайым яныбыҙҙа, мин әсәйемдең алдында ултырам. Нимәләр көтәбеҙ. Иҫемдә, ер бер мәл тирәһенә күтәрелеп, тулҡын булып килде лә, магазин янында йыйылған халыҡты һикертеп кенә үтеп китте. Халыҡ ыңғырашты. Мин ҡурҡыштан ағырып илап ебәрҙем. Бала саҡтағы тәүге хәтирәм ошо...

Артабан беҙ Стәрлебаш районының Аллағыуат ауылына күстек. Туғыҙ йәшлек абзыйым мәктәптә бирелгән хәлүәһен алып ҡайтып, минең менән бүлешеп ашай торғайны. Уның тәме! Әле лә тел осомда... Өҫтәлдәге ризыҡ түгел, ә нәҡ абзыйым менән бүлешкән аҙыҡ тәме сабый хәтеремдә уйылып ҡалған...

Ауылға район үҙәгенән икмәк машинаһы килә торғайны. Магазинға килеп туҡтай ҙа, ҡабарып бешкән икмәктәрҙе эскә, магазин кәштәһенә ташыйҙар. Ул ваҡытта ауыл халҡы колхозда эшләгәс, икмәк бешерергә, күрәһең, ваҡыттары булмаған, магазиндан һатып алдылар. Йыш ҡына магазинға килтерелгән икмәк етмәй ҙә ҡала торғайны. Малайҙар менән магазин янында уйнағанбыҙҙыр инде, күҙәтеп торам да, үҫкәс, мин дә ауылға хуш еҫле икмәк ташыған шофер булырмын, барыһына ла етерлек итеп икмәк алып килермен, тип хыялландым...

Әсәйебеҙ беҙҙе, 3 балаһын, бер үҙе ҡарап үҫтерҙе. Айрат ағайым 1965 йылғы, Резеда апайым 1967 йылда тыуған, мин - 1970 йылғы. Бәләкәйҙән бөтәбеҙ ҙә эшләп үҫтек. Атайһыҙ булғас, ҡош-ҡорт, мал-тыуар беҙҙең өҫтә булды. Был ваҡиғалар ҙа ныҡлап күңелгә уйылып ҡалған.

**Һинең тормошоң, хеҙмәт биографияң тарихтан айырылғыһыҙ. Бала сағыңда, үҫмер осороңда һәм артабанғы ғүмер юлыңда тарихҡа мөнәсәбәт һиндә нисек формалашты һәм бында кемдәрҙең йоғонтоһо булды?**

- Тарих менән ҡыҙыҡһыныуым бала саҡтан бар ине. Быға Исламғол олатайым да сәбәпсе булғандыр. Мин гел уның артынан эйәреп йөрөнөм. Һуғыштан сулаҡ булып ҡайтҡайны ул. Һул ҡулы юҡ ине, мин уның буш салғыйынан тотоп алып, йәнәшләп йөрөй инем. Көтөү көтөргә лә, бесән сабырға ла ул эйәртте. Йәшмәт буйы, Беренсе Ябалаҡ, Сафия, Мөхәмәт утарҙары, Гөмбәт тауы тигән урындарҙы күрһәтеп, уларҙың ни өсөн шулай аталыуын бәйән итте. Ауыл янындағы Өсуба ҡурғандары, ер-һыу атамалары менән дә ул таныштырҙы. Ашҡаҙар яры ишелеп төшкәс, ташҡа әйләнгән ҡарағай тамырҙары килеп сыҡҡайны. Шуларҙы миңә күрһәтеп, тимәк, бында әүәле ҡара урман булған, тип һөйләгәне хәтерҙә. Исламғол олатайым ниндәйҙер кимәлдә миңә тарихты, археологияны өйрәнеүгә этәргес биргән, күрәһең.

Бала саҡ дуҫтарым менән бер заман теге Өсуба ҡәберлеген тикшереп ҡарарға булдыҡ. Ололар һөйләүенсә, төн етһә, шунан тәңкә сылтыратып ҡыҙҙар Ашҡаҙарға һыуға төшә, таңға табан кире күтәрелеп китәләр, ти. Олатайым унда бик боронғо, бәһлеүән кәүҙәле батырҙар ята, ти торғайны. Ҡылыстары, ҡоралдары, алтындары менән ҡуша күмелгәндәр, ти ине. Малайҙар менән ҡаҙҙыҡ бер убаны, кеше һөйәктәре килеп сыҡты. Әммә эште аҙағына еткерә алманыҡ. Ауыл ҡарттары күреп ҡалып, елкә төбөнә таяҡ менән һуғып, ҡыуып ҡайтарып ебәрҙеләр.

Ауыл ситендә әүәле шишмә бар ине, тип һөйләгәйне әсәйҙәр. Сиҙәм ерен һөрөп, шишмә сығып ятҡан урынды баҫыуға әйләндергәндәр. "Юрматы ханлығы"н ойошторған дуҫтарым менән шул шишмәне ҡотҡарырға булып киттек бер мәл. Көрәктәр менән бер нисә рәт барып ҡаҙыҡ, шишмә юлын оҙаҡ таҙаланыҡ. Беҙ Өфөгә уҡырға киткәс, шул ерҙән ике шишмә ағып китте һуңынан. Янында ағастар үҫеп сыҡты. Әле ул урын шырлыҡҡа әүерелгән.

**Юрматы ханлығы? Ҡыҙыҡ! Уны нисегерәк итеп ойоштороуығыҙ хаҡында ла һөйләп китмәҫһеңме?**

- "Юрматы ханлығы"н ойоштороу ҡаҙ себешен көтөүгә бәйле. Ни өсөн тигәндә, себеш көтөү шәхсән минең бурыс ине. Тап шул сәбәпле иптәштәрем менән рәхәтләнеп урам ҡыҙыра алмағас, яңы уйын уйлап таптым. Марс Көсәпҡолов, Рәмзил Ишһарин, Фәтих һәм Азамат Ҡолһариндар менән "Юрматы ханлығы" төҙөнөк. Себештәр - беҙҙең ат көтөүҙәре. Улар янынан китә алмағас, иҫке генә бишмәткә ултырып алдым да, үҙемде хан итеп иғлан иттем. Дуҫтарға бей титулдары бирҙем. Ҡалайҙан һайман эшләнек. Ҡылыстар юнып, һөңгөләр әтмәләп алдыҡ. Юрматы батырҙарының ҡаһарманлыҡтарын дәфтәргә яҙып барабыҙ. Батырлыҡ өсөн ҡалайҙан миҙалдар таратам. Бер ваҡыт шулай ҡылыс тағып, урам буйында ҡалайҙарҙы менән шалтырап йөрөгән дуҫтарымдан һауынсылар көлгән. Улар наҙан, тарихты белмәй, беҙ беләбеҙ, үткәндәр менән ғорурланырға кәрәк, тип тынысландырҙым егеттәрҙе. Беҙ күп ауылдарҙағы балалар һымаҡ, "Ҡыҙылдар - аҡтар" уйнаманыҡ, "Башҡорттар - дошмандар" тигәнен һайланыҡ. Тәмәке тартырға теләк тә, интылыш та булманы.

**Ханға буйһонған "бейҙәрең" һуңынан барыһы ла оло шәхестәр булып киткән. Шәхес булып үҫер өсөн дә үҙ тарихыңды белергә кәрәк. Шулай түгелме?**

- Һис шикһеҙ, шулай. Аллағыуат һигеҙ йыллыҡ мәктәбенә уҡырға барғас, тарих уҡытыусыһы Хөсәйен Йыһангир улы Аҫҡаров тарихҡа һөйөүемде арттырҙы. Ул ваҡытта "Ағиҙел" журналында бик күп тарихи романдар баҫыла торғайны. Булат Рафиҡовтың, Яныбай Хамматовтың, Әхиәр Хәкимовтың, Ғәли Ибраһимовтың һ.б. яҙыусыларҙың китаптарын сират тороп уҡыныҡ. Тап шул романдар аша миндә башҡорт тарихына ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килде.

Аллағыуат мәктәбендә класта ете кеше уҡыныҡ. Минең ауыл хужалығы институтын бөтөрөп, тыуған ауылыма колхоз рәйесе булып ҡайтырға тигән хыялым бар ине. Азамат Бикташев - парторг, Сөмбел Рәжәпова - баш бухгалтер, Нәжип - агроном, Илфат Моратов - зоотехник, Светлана менән Гөлдәр бухгалтерияла хисапсы була, тип класташтарым менән план ҡороп, вазифаларҙы бүлешеп бөткәйнек. Үҙебеҙсә ауылды үҫтерергә ине ниәт...

**Ине, тиһең, ә ауылыңды үҫтерергә, колхоз рәйесе булырға һиңә нимә ҡамасауланы һуң?**

- Өфөләге 1-се интернат-мәктәпкә уҡырға килгәс, тағы ла юғарыраҡ маҡсаттар ҡуйырға, бөтә республика мәнфәғәтендә эшләргә була икәнен аңланым. Интернат-мәктәптә тырыш балалар йыйылғайны. Класс етәксебеҙ БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы Алмаҡай Сәлмән ҡыҙы Ҡолдәүләтова, тәрбиәсебеҙ Фәриҙә Ғәли ҡыҙы Зөлҡәрнәева ине. Егерме алты уҡыусының бөтәһе лә юғары уҡыу йортона инде. Класташтар араһында федераль судьялар, район хакимиәте башлыҡтары, инженер-төҙөүселәр, тележурналистар, уҡытыусылар, эшҡыуарҙар бар. Тарихтан Марат Мөхәмәтйән улы Хафизов уҡытты. Тарихҡа булған ҡыҙыҡһыныуым уға артты. Мәктәп тамамлағас, агроном булырғамы, тарих буйынса китергәме, тип баҙап ҡалдым. Документтарҙы алып, троллейбуста китеп барғанда "Ауыл хужалығы институты" туҡталышында саҡ төшөп ҡалманым. Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетына имтихандар тапшырып, студент булып киттем. Университетта беренсе йылда уҡ яҙмышымда мөһим роль уйнаған кеше менән танышырға яҙҙы. Ашханала бер оло ағай иҙәнгә төшкән аҫҡысын эҙләй ине, табып бирҙем. Археолог Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов ине ул.

**Оло ғалим менән танышыуығыҙ символик мәғәнәгә лә эйә булған икән. Нияз Мәжитов үҙе һиңә тарихҡа ниндәй аҫҡыстар табып бирҙе һуң?**

- Әйтергә кәрәк, барлыҡ аҫҡыстарҙы ла Нияз Абдулхаҡ улы бирҙе, дөрөҫөрәге, аҫҡыстарҙың ҡайҙа ятҡанын күрһәтте. Танышып киттек. 1-се интернаттан килгәнде белгәс, кафедраһына саҡырҙы, үҙенә специализацияға алды. Курс эшен, һуңынан диплом эшен уның ҡулы аҫтында яҙҙым. Мине үҙенең кафедраһына ярты ставкаға лаборант итеп алды, утыҙ һум эш хаҡы иш янына ҡуш булды. Артабан Ырымбур өлкәһенә, Филипповка ҡурғандарындағы Сармат алтындары табылған ергә экспедицияға ла ебәрҙе. Ике тапҡыр Арҡайым ҡаласығында ла экспедицияла ҡатнаштым.

Бер йыл уҡығас, ауылдағы үҙебеҙҙең ауыл эргәһендәге Өсуба иҫкә төштө. Нияз ағайҙан шунда ҡаҙыныу эшенә ҡайтырға рөхсәт һораным. Аспирант Флорид Сөнәғәтов менән ҡуша ебәрҙе. Курсташым Буранбай Ильясовты ла алдыҡ. Трактор менән сиҙәмен алдыртҡайныҡ, ләхеттәр килеп сыҡты. Ҡаҙырға тотондоҡ. Һөлдәләрҙе сығара башлағас, ғүмерҙә күрмәгән дауыл ҡупты. Беҙ щетка менән таҙартып торабыҙ, ел кире күмеп тора. Флоридтың күҙенә сүп төштө. Уны медпунктҡа алып барҙыҡ. Гәрәсәт киҫкә генә туҡтаны. Ҡурғандан ун ике һөлдә таптыҡ. Өҫкө ҡатламда баҡыр быуат ваҡытындағы бура мәҙәниәте ҡәберлектәре булып сыҡты. Кешеләрҙе ҡырын һалып, аяҡтарын әҙерәк бөкләп, өҫтөнә бура ҡороп күмгәндәр. Беҙҙең эраға тиклемге XVIII-XII быуатта йәшәгәндәрҙең һөйәктәре. Тәрәнерәк төшкәс, шул уҡ ҡурғандарҙа сармат ҡәберлектәренә юлыҡтыҡ. Һирәк-һаяҡ ерек ағастары менән уратылған ҡәберҙәрҙә, ысынлап та, бәһлеүәндәр ята ине. Һөйәктәренең оҙонлоғо ғына метр ҙа һикһән биш сантиметр тирәһе, эре, ап-аҡ һөлдәләр, тештәре лә теүәл, эргәләрендә метр ҙа егерме сантиметр оҙонлоҡтағы тимер ҡылыстар, боттары араһында баҡыр, тимер һәм көмөшләнгән уҡ-башаҡтар ята. Ҡылысты ҡаҙып алдыҡ та, һоҡланып торабыҙ. Флорид: "Теймәгеҙ, тиҙерәк елем менән ҡапларға кәрәк, юғиһә, ыуалып төшәсәк",- тип әйтеп тора инде. Юҡ, уның һүҙенә ҡолаҡ һалмайынса, күтәреп алабыҙ тигәйнек, тимер ҡылыс ҡомға әйләнеп, ҡойолдо ла төштө. Баҡтиһәң, сәғәт-сәғәт ярымда тимер кислород менән реакцияға инә лә, күҙ алдында юҡҡа сыға икән. Тимер хәнйәр ҙә, ҡылыстар ҙа әрәм булды. Ә баҡыр һәм көмөш уҡ-башаҡты алдыҡ.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡәберҙәре бигерәк бай булып сыҡты. Алтын сулпылар, көмөш көҙгөләр күн янсыҡтарға һалынған, хатта бәйләнгән суҡтарына тиклем шул килеш. Ни өсөн тигәндә, алтын-көмөш эргәһендә әйбер нисә мең йыл ятһа ла, серемәй. Баш остарында - хушбуйҙар, үҙҙәре яһағандары ла, Ҡара диңгеҙ яғынан килтерелгәндәре лә бар. Хәҙер беҙгә хушбуй Франциянан килә, ә элеккеләр уны гректарҙан алған. Һауыт эсендә еҫле майҙар, бер яғында - ҡыҙыл, икенсе яғы һары, аҡ буяулы яҫы таштар, төрлө косметика...

Шулай итеп, бала саҡтан хыял иткән теге ҡурғанды ҡаҙҙым. Бер нәмәһе аптыраҡ: олатайым унда батырҙар күмелгәнен, байлыҡтары булғанын ҡайҙан белде икән?

**Ә Арҡайым ҡаласығын ҡаҙыуға бәйле ниндәй хәтирәләрең бар?**

- Нияз Мәжитов беҙҙе, тарих факультеты студенттарын, Арҡайым ҡаласығында алып барылған ҡаҙыныу эштәрендә ҡатнашырға ебәргәйне. Өфөнән Азамат Вилданов, Буранбай Ильясов, Артур Иҙелбаев менән барҙыҡ. Ен-пәрейгә ышанмайым.

***Башҡорттар төрлө компоненттан, ырыу-ҡәбиләләрҙе тәшкил итеүсе уникаль халыҡ. Урал һәр ваҡыт башҡорт халҡының төп төйәге булған. Заманалар тыныс булғанда халҡыбыҙ ырыуҙары Уралдан ситкә сығып, киңәйеп таралған. Ауыр замандар килгәс, улар яңынан Уралға һыйынған. Урал тауҙары башҡорттоң һаҡланыр ҡәлғәһе. Ул ағастан, таштан ҡәлғә һалмаған, географик, тәбиғи ҡәлғәне хуп күргән.***

***✓ Һанлы цивилизация яңы асыштарға беҙҙе бөгөн үк алып бара. Шул ысул менән Әбйәлил районында иллегә яҡын сармат курғандары таптыҡ. Шүлгәнташта күҙгә күренмәгән һүрәттәрҙе һанлы технология ярҙамында билдәләнек.***



# УЛТЫРЫП...

## күрергә хыялланам

Шулай ҙа шикләнерлек бер ваҡиға булды. Таш ҡурғандарҙы тикшерә инек. 3-4 көн эшләгәс, төнөн төшөмдә теге ҡурғандарҙың әрүахтары килде. Ҡүмәкләп мине ҡулымдан һөйрәйҙәр, стена аша тартып сығарырға, үҙҙәре менән алып китергә тырышалар. Ҡот осто. Иртән һикереп торҙом да, яланға сығып йүгерҙем. Берәүгә лә өндәшмәнем. Ҡаҙылған ҡурғандарҙы күмеп, ерләнгәндәр рухына үҙем белгәнсә доғалар уҡып ҡайттым. Шунан һуң ғына егеттәргә төшөмдө һөйләнем. Былар мине төндә һаҡларға булдылар. Йәнәһе, әрүахтар алып китә башлаһа, тартып алып ҡалалар.

Төнөн һыуыҡ, тимер будкала йоҡлайбыҙ. Мейес урынына электр плитәне ҡуйҙыҡ. Төн уртаһында эҫегә түҙмәй, уянып киттем. Ҡараңғы, барыһы ла йоҡлай, будкала бер нәмә лә күренмәй. Ҡулымды һуҙып, һәмләнеп, теге электр плитәһен һүндерергә китеп барам. "Тот, Даниҙы алып китеп баралар", - тип ҡысҡырып ебәрҙе кемеһелер, күмәкләп миңә килеп йәбештеләр... Ә барыбер күңелгә шик төшкәйне инде. Экспедиция тамамланғанын көтмәнем. Арҡайымға яҡын ауылға баҫыуҙар аша туранан 20 саҡрым йәйәү сығып, Сибай аша ҡайтып киттем.

Арҡайым тигәндән, быйыл һанлы лаборатория тикшеренеүҙәре ярҙамында Әбйәлил районында Арҡайым тибындағы ике ҡаласыҡ табылды. Был факт Һынташ мәҙәниәтенең бик ҙур киңлектәрҙе биләүе хаҡында һөйләй. Был цивилизация мотлаҡ рәүештә урындағы халыҡ - башҡорттар менән бәйле. Археологик ҡаҙылмалар шуны иҫбатлай: әлеге һәр бер башҡорт ауылы эргәһендә баҡыр быуаттан бирле ҡаласыҡтар булған. Тимәк, бында кешеләр йәшәгән. Уларҙың зыяраттары баҡыр быуаттағы зыяраттарҙың өҫтөнә йә эргәһенә эшләнгән.

**▸ Дөйөм археология фәненең бөгөнгө торошо нисек?**

- Бөгөн Уралдың ян-яғы, дала яҡтары ғына археологик яҡтан өйрәнелгән, ә бына Уралтауҙың үҙе, ғөмүмән, археологик яҡтан тикшерелмәгән. Был йәһәттән беҙҙе киләсәктә асыласаҡ ҡәлғәләр, ҡаласыҡтар, бар донъяны хайран итерлек асыштар көтәлер, тип уйлайым. Хәҙер һанлы археология ныҡ үҫеште. Һауанан ерҙе фотоға йә видеоға төшөрөп, хатта бейеклеге ун-ун биш сантиметрлыҡ түңәрәктәрҙе, иғтибарҙы йәлеп итерлек археологик объекттарҙы билдәләп була. Элек был мөмкин түгел ине, күп осраҡта археологтар объекттарға осраҡлы рәүештә юлыға ине. Һанлы цивилизация яңы асыштарға беҙҙе бөгөн үк алып бара. Әле яңыраҡ ҡына шул ысул менән шул уҡ Әбйәлил районында иллегә яҡын сармат курғандары таптыҡ. Шулай уҡ Шүлгәнташ мәмерйәһенең эсендә кешенең күҙенә күренмәгән һүрәттәрҙе һанлы технология ярҙамында билдәләнек.

**▸ Әйткәндәй, Шүлгәнташтағы музей комплексын төҙөү эштәре ниндәй кимәлдә бөгөн?**

- Әлеге көндә музей комплексын төҙөп бөтөп барабыҙ. Ул 4 мең квадрат метрҙан торған комплекс буласаҡ. Музей ғына түгел, ә фәнни-мәҙәни үҙәк. Унда лабораториялар, экспонаттарҙы һаҡлау урындары, ғалимдар өсөн кабинеттар урын аласаҡ. Шунда уҡ экспозиция төҙөләсәк, унда һүрәттәрҙең копиялары ҡуйыласаҡ. Музей эсендә балалар өсөн ике класс-кабинет эшләнек. Унда мәктәп балалары килеп тыуған яҡ тарихын өйрәнәсәк. Быны беҙ Европа музейҙарына ҡарап, үҙебеҙгә күсерҙек. Музей комплексы эсендә 40 һәм 100 урынлыҡ ике конференцзал төҙөү күҙ уңында тотола. Тыштан музейҙың бер яҡ стенаһы амфитеатр итеп эшләнәсәк. Унда меңәрләгән кеше йыйып, ҙур саралар, шул иҫәптән фольклор фестивалдәре, шул уҡ "Урал батыр" эпосын ятҡа һөйләү конкурстары үткәреп буласаҡ.

Хәҙер район үҙәге менән Шүлгәнташты тоташтырған асфальттың һуңғы саҡрымдары һалынып ята. Алдағы йылдарҙа Шүлгәнташҡа газ да килеп етәсәк. Газ музей комплексынан тыш тирә-яҡтағы ауылдарға ла үтәсәк. Былар барыһы ла республикабыҙ Башлығы Радий Фәрит улы Хәбиров ярҙамында тормошҡа ашырыла. Ул беҙҙең пландарҙы, музей комплексы төҙөү буйынса концепцияны хупланы, беҙгә һәр йәһәттән ярҙам итергә әҙер булыуын белдерҙе.



***Беренсенән, сарматтар менән йылҡысылыҡ, малсылыҡ тарихыбыҙ уртаҡ, икенсенән, уларҙың вариҫтары бөгөн дә йәшәй. Сарматтарҙы урта быуаттарҙа дьярмат тип атаһалар, бөгөн улар юрматылар. Тимәк, минең атай-олатайҙарым да сарматтар булған. Хәҙерге юрматылар антропологик яҡтан Европа халыҡтарына оҡшаған. Ҡыҫҡаһы, сарматтар бер ҡайҙа ла юғалмаған: башҡорт халҡының бер өлөшө булып киткән.***

**▸ Шүлгәнташ бөгөнгә үҙенең серҙәренең нисә процентын асты икән?**

- Миненсә, 5 процент самаһы ғыналыр. Реставрация эштәре башланғас, барлыҡ донъя ғалимдарын аптыратырлыҡ дөйә һүрәттәрен таптыҡ бит инде. Донъялағы бөтә мәмерйәләрҙә лә тип әйтерлек мамонттар, бизондар, аттар бар, әммә береһендә лә дөйә һүрәте юҡ ине. Бындағы иң боронғо дөйә һүрәтенә 19 мең йыл. Шүлгәнташ мәмерйәһенең уникаль булыуы тағы ла шунда: Франция, Испания ғалимдары фекерҙәре буйынса, донъялағы барлыҡ мәмерйәләге һүрәттәр реаль ысынбарлыҡты сағылдырһа, Шүлгәнташтағы һүрәттәр символик мәғәнәгә эйәләр. Бынан шундай һығымта яһап була: һүрәтте эшләүселәр художестволы үҫеш, фекерләү йәһәтенән күпкә юғарыраҡ торған, йәғни натурализмдан азат булған. Киләсәктә технологиялар тағы ла яҡшырғас, ҡалын кальцит аҫтындағы һүрәттәрҙе лә күрә алырбыҙ тип ышанам. Ә улар бар, әлегә уларҙың һыҙаттарын ғына күреүгә өлгәштек. Һүрәттәр эшләнгән ваҡытта, йәғни 17-19 мең йыл элек Ер шарында барлығы бер миллион самаһы кеше йәшәгән. Ырыу-ҡәбиләләрҙең телдәре лә бер-береһенә оҡшаш булған, кешелек әле ул заманда халыҡтарға бүленмәгән. Шуға күрә Францияла ла, Испанияла ла, Уралда ла бер үк һүрәттәр эшләнеүенә аптырарға кәрәкмәй.

**▸ Ә мәмерйәлә табылған баш һөйәгенә бәйле ниндәй дәлилдәр, фараздар килтереп була тип уйлайһың?**

- Шуныһы әһәмиәтле: мәмерйәлә табылған бөтә баш һөйәктәре лә ҡатын-ҡыҙҙыҡы. Уларға 12-20 йәш булған. Улар баҡыр быуат ваҡытында мәмерйәлә күмелгән. "Урал батыр" эпосында Ер аҫты батшалығына йыл һайын ете ҡыҙҙы ҡорбанға биреп барғандар, тиелә. Был һөйәктәр ошо традицияға бәйле булыуы бик мөмкин. Сөнки ундай баш һөйәктәре башҡа мәмерйәләрҙә юҡ.

**▸ Нияз Мәжитов үҙенең археологик ҡаҙыныуҙарына таянып, халҡыбыҙҙың боронғо ата-бабаларының беҙҙең эраға тиклем үк Уралда төпләнеүен кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр менән иҫбат итеп, башҡорттар Уралға ситтән килгән тигән концепцияны инҡар итте. Һинең, тарихсы буларак, Р.Кузеев менән Н.Мәжитов концепцияларына мөнәсәбәтең нисек?**

- Әлбиттә, Нияз Мәжитов электән фәндә нығынған догмаға төҙәтмә индерҙе. Йәғни ул үҙенең тикшеренеү эштәре менән башҡорттарҙың ата-бабалары беҙҙең эра башланған осорҙа үк Уралда йәшәүен иҫбат итеп, халҡыбыҙҙың боронғолоғон раҫланы, уның тарихына яңы биттәр өҫтәне. Р.Кузеев фекеренсә, ҡайһы бер башҡорт ырыуҙары Алтайҙан да, Урта Азиянан да, Ирандан да, Төньяҡ Себерҙән дә килгәндәр, шул уҡ ваҡытта Н.Мәжитов раҫлауынса, Уралда эра араларында, унан да боронғораҡ дәүерҙән алып халҡыбыҙҙың ядро өлөшөн тәшкил иткән ырыуҙар ҙа көн күргән. Башҡорттар төрлө компонентты, ырыу-ҡәбиләләрҙе тәшкил итеүсе уникаль халыҡ. Урал һәр ваҡыт башҡорт халҡының төп төйәге булған. Заманалар тыныс булғанда халҡыбыҙ ырыуҙары Уралдан ситкә сығып, киңәйеп таралған. Ауыр замандар килгәс, улар яңынан Уралға һыйынған. Урал тауҙары башҡорттоң һаҡланыр ҡәлғәһе. Ул ағастан, таштан ҡәлғә һалмаған, географик, тәбиғи ҡәлғәне хуп күргән. Шулай итеп, профессор Н.Мәжитовтың да, Р.Кузеевтың да дәлилдәре дөрөҫ булып сыҡты.

**▸ Үткән быуаттың 80-се йылдар аҙағында илебеҙҙә оло үҙгәрештәр барғанда һин "Башҡорт йәштәре иттифағы"ның әүҙем ағзаһы буларак сығыш яһаның. Ул йылдар хәтереңә нисек уйылып ҡалды?**

- Беҙ, тарих факультеты студенттары ла, үҙ-ара һөйләшеп, тарихсыларҙы бер төркөмгә йыйҙыҡ. Тәүҙә Буранбай Ильясов, мин, Урал Хисаметдинов, Әминә Яҡшыбаева (Уразова), Салауат Хәмиҙуллин һәм тағы ла бер нисә егет - йөмғеһе һигеҙ кеше инек. Беҙгә Артур Иҙелбаев та ҡушылды. Ойошманы "Башҡорт йәштәре иттифағы" тип атарға килештек. Йәштәр иттифағына Ауыл хужалығы институты, Өфө дәүләт сәнғәт академияһы, Урман хужалығы техникумынан студенттар килеп ҡушылды. Ҡыҙыҡлы хәрәкәт барлыҡҡа килде. 1990 йылда йәштәр өсөн төрлө саралар, Өфөләге "Контакт" клубында "Ант" төркөмө менән башҡорт дискотекалары ойоштора башланыҡ. Кәләшем Зөлфиә менән дә шул башҡорт дискотекаһында 1992 йылда таныштыҡ. 1994 йылдың мартында улыбыҙ Тимерхан тыуҙы. Ғөмүмән, Башҡорт йәштәре иттифағы башлаған саралар - "Һылыуҡай" конкурсы, "Урал моңо", "Йәшлек-шоу" фестивалдәре бөгөн дәүләт ҡарамағындағы саралар булып үҫеп китте.

Йәштәр хәрәкәтендә ауыр мәлдәр, ҡиҫкен осорҙар ҙа булды, әлбиттә. 1991 йылда президент һайлауҙары кисектерелгәс, Телеүҙәкте штурмланыҡ. Артабан Салауат һәйкәле янында аслыҡ иғлан иттек. Асығыуҙың етенсе көнөнә ҡаты туҡмалып, дауаханаға эләктем, ике бөйөр ҙә бер талай эшләмәй тороп, табиптар саҡ аяҡҡа баҫтырҙы. Ул замандарҙа көндәлек алып барған булһам, хәтирәләрем тағы ла ҡыҙығыраҡ булыр ине, әлбиттә.

**▸ Һинең артабанғы хеҙмәт юлыңды, тормош баҫҡыстарың барлағанда шул күҙгә ташлана: Башҡортостан Республикаһы мәҙәниәт министры ярҙамсыһы, Башҡортостан Хөкүмәтенең ойоштороу бүлеге белгесе, Республика халыҡ ижады үҙәге директоры, Башҡорт дәүләт филармонияһы директоры, әле хеҙмәт иткән БР Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге етәксеһе вазифаларын башҡарғанда, бер үк ваҡытта ижад һәм фән өлкәһендә эшләгән йәштәрҙән дә, йәмәғәтселек бурыстарын атҡарыуҙан да ситкә китмәй, һәр өлкәлә үҙеңә генә хас уңыштарға өлгәшәһең. Быны сере нимәлә?**

- Бик ауыр, шул уҡ ваҡытта еңел дә һорау. Былар барыһы ла уҡып алған белемем буйынса ғына түгел, ә рухым буйынса ла тарихҡа мөнәсәбәтемдән киләләр тип уйлайым. Мәҫәлән, Башҡортостан Хөкүмәтенең ойоштороу бүлегендә эшләгәндә йәштәр көндәре Күгәрсен районындағы Мораҙым тарлауығында үтергә тейеш ине. Сара алдынан башҡорт ихтилалдары етәкселәренең береһе Килмәк батыр Нөрөшевтең Ырымбур экспедицияһы начальнигы И.К.Кирилов ғәскәрҙәренә ҡаршы яуы үткән ерҙә, Мәләүез районы Ергән ауылы янында һәйкәл ҡуйҙыҡ. Булат Рафиҡов иҫән ине әле. Һәйкәлдең урынын да, тексын да ул тәҡдим итте. Ташҡа "Аямаған йәнен, түккән ҡанын, Һис бирмәгән башҡорт Уралын" тигән юлдарҙы яҙырға Булат ағай тәҡдим итте. Финанс яғын хәл итеүҙе Артур Иҙелбаев үҙ өҫтөнә алды. Таш артынан Динар Ишемғолов йөрөнө.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

✓ *Европала мәмерйәләрҙе һаҡлау буйынса етди эштәр эшләнгән, мәмерйәләр күсермәләренең экспозициялары менән музейҙар төҙөлгән. Музей төҙөйбөҙ икән, ул донъя кимәленән сығып эшләнгән проект булырға тейеш.*



# ВАҠЫТ МАШИНАҺЫНА УЛТЫРЫП...

## һәр тарихи дәүерҙе күрергә хыялланам

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

Республика халыҡ ижады үҙәгендә директор булып эшләгәндә йәштәр өсөн байтаҡ саралар ойоштороҙоҡ. "Һылыуҡай" бәйгеһе бында яңыса үҫеш алды, "Урал моңо" фестивален халыҡ-ара кимәлгә сығарҙыҡ. Ул сараларҙы ойоштороуҙа хәҙерге мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Рәис улы Алтынбаев төп арҡа терәге булып торҙо. Ул осорҙа Тәлғәт Ниғмәтулла улы Сәғитов мәҙәниәт министры ине. Бик түҙемле, интеллигент кеше. Хат яҙып алып килһәм, яҙыуымды оҡшатмағаны аңлашыла, йөҙө үҙгәреп китә. Әммә ауыр һүҙ әйтмәй, ошолайтыбыраҡ төҙәт, тип күрһәтеп сығара ине. Рәсми хаттар яҙыуға унан өйрәндем.

Башҡорт дәүләт филармонияһына етәксе булып эшкә килгәндә иң тәүҙә йәштәрҙән көслө команда тупланым. Дим Әҙелгужин, Флүрә Мифтахова, Заһир Ҡотлосурин, Фәүзил Маликов, Әлмирә Сафарғолова, Салауат Итбаев минең менән бергә филармония мәктәбен үтте.

Тормош юлымда аҡыл бирерлек яҡшы кешеләр осрап торҙо. Булат Рафиҡов, Нияз Мәжитов, Александр Колотурский... Улар мине күп нәмәгә өйрәтте. Свердловск дәүләт филармонияһы директоры Александр Николаевич Колотурский беҙҙә, йыш семинарҙарға йөрөттә, уҡытты. Маҡсат ҡуйып йәшәргә кәрәк, тигәне мейегә уйылып ҡалған.

**Әлеге билгән вазифаң: БР Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге етәксеһе. Үҙәктең Шүлгәнташ мәмерйәһенең һаҡлау буйынса төп бурысы нимәлә тип иҫәпләйһең?**

- Бында килгәс тә, команданы йыйып, төп миссияны билдәләнек - Шүлгәнташ мәмерйәһен һәм ундағы боронғо һүрәттәрҙе һаҡлау, мәҙәни мираҫты ЮНЕСКО исемлегенә индереү һәм "Шүлгәнташ" музей комплексын төҙөү. Музей төҙөү өсөн 1980 йылдарҙан алып өлгө күпме конкурстар үткәрелгән, әммә эш шунан ары китмәгән. Шүлгәнташты ҡомартҡы булараҡ ЮНЕСКО-ның мәҙәни мираҫ исемлегенә индереү буйынса ла эш башлап ҡарағандар ҙа, ташлағандар.

Дөрөҫөн әйткәндә, был эшкә тотонорға йөрьәт иткәс, тәүҙә нимәнән башларға икәнен беҙ ҙә белмәнек. Европала мәмерйәләрҙе һаҡлау буйынса етди эштәр эшләнгән, мәмерйәләрҙең күсермәләренең экспозициялары менән музейҙар төҙөлгән. Ә нинә велосипед уйлап табырға? Музей төҙөйбөҙ икән, ул республика, Рәсәй кимәлендә түгел, донъя кимәленән сығып эшләнгән проект булырға тейеш. Әйҙәгеҙ, Европа тәжрибәһен өйрәнәйек, тинек. "Урал батыр ере" проекты менән Башҡортостан Республикаһы Башлығының грантын отоп, ошо аҡсаның бер өлөшөнә ул ваҡытта беҙҙең ойошмала эшләгән архитектор Рөстәм Әлибаев менән үҙебеҙгә маршрут төҙөп, Европаға сығып киттек. Францияла, Испаниялағы фәнни үҙәктәрҙә, мәмерйә янында төҙөлгән музейҙарға барҙыҡ. Ил эсендә урындағы пассажир автобустарында йөрөнөк. Сәфәрҙән илһамланып ҡайтҡан архитекторыбыҙ Рөстәм Әлибаев тәрән философия һалынған, Урал батыр менән Шүлгәндең көрәшен һынландырған проект эшләне.

Беҙ был сәфәрҙә донъяла киң билдәле Испанияның Альтамира мәмерйәһе музейы директоры Хосе Антонио Лашерас, уның урынбаҫары Пилар Фатас, Францияларҙағы Тарихҡа тиклемге дәүер музейы етәксеһе Жан-Жак Клейет-Мерль менән таныштыҡ. Кем менән һөйләшһәк тә, беҙгә иң элек реставратор кәрәк, тинек. Барыһы ла Эудаль Гуиламетты (Eudald Guillamet) тәҡдим итте. Хатта береһе шунда уҡ шылтыратып, беҙгә аралашыу мөмкинлеге булдырҙы. Уның менән һөйләшеп, боронғо һүрәттәр менән эшләгән оҫтаны Башҡортостанға, Шүлгәнташты һаҡлауға арналған халыҡ-ара симпозиумға саҡырып ҡайттыҡ. Эудаль кеүек юғары кимәлдәге реставратор менән танышыу - беҙҙең өсөн ҙур уңыш. Ҡомартҡыбыҙҙы һаҡлау эшен шулай итеп Эудаль ярҙамында вандалдарҙың һүрәттәре, граффити менән сыбарланып бөткән мәмерйә диуарҙарын таҙартыуҙан башланыҡ. Мәмерйәләге сереп бөткән баҫҡыстарҙы тутыҡмай торғандарына алмаштырҙыҡ. Шүлгәнташтың микроклиматын контролдә тотоу өсөн заманына күрә алдынғы мониторинг системаһы алып урынлаштырҙыҡ...

Шүлгәнташ темаһы буйынса Рәсәйҙә лә, Башҡортостанда ла байтаҡ ғалим шөғөлләнә. Әммә һәр кем үҙ ҡаҙанында ҡайнай, Башҡортостан ҡомартҡыһын - Шүлгәнташты һаҡлау һәм өйрәнеү системаға һалынмағайны. "Шүлгәнташ" дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы иһә мәмерйәгә килгән туристарға билет һатып, аҡса эшләй, ғалимдарҙы оҙатып йөрөүҙән ары үтә алмай. Йәнә Шүлгәндәге һүрәттәр Европа мәмерйәләрендәге һүрәттәр менән ауаздаш, тип яҙалар, әммә бығаса ундағы ғалимдар менән бәйләнеш булдырылмағайны. Беҙҙең команда Бөрйәндә йыл һайын бер үк ваҡытта халыҡ-ара симпозиум ойоштороп, унда сит илдәрҙән дә ғалимдар саҡырып, был тема буйынса эшләгәндәрҙе берләштереүгә өлгәште. Бында куратор вазифаһын үҙ өҫтөнә алған Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының Палеосәнғәт үҙәге етәксеһе, хәҙер инде мәрхүмә, профессор Екатерина Дэвлет ханымға рәхмәтебеҙ сикһеҙ. Бәхәс булмаған ерҙә алға китеш юҡ. Хәҡиҡәт бәхәстә яралы, тигәндәре дөрөҫ. Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәгенең фәнни эшмәкәрлегенә ҡаялағы боронғо таш һүрәттәрҙе өйрәнгән Мәскәү, Санкт-Петербург, Кемерово, Новосибирск, Франция, Испания ғалимдарын йәлеп иттек. Шүлгәнташ һәм ундағы палеолит осоро һүрәттәрен ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы исемлегенә индереү өсөн досье әҙерләүҙә лә бер төркөм ғалимдар менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ.

Ошо арала мәмерйәнең эсен дә, тыш яҡтан биләмәһен дә 3д-сканерлау, фотограмметрия ысулы менән тикшерҙек, хатта самолет йәлеп иттек. Тәүге йылдарҙа уҡ тағы бер грант яҙып, Морат туғайында ағастан бина төҙөп, Шүлгәнташ мәмерйәһенең ваҡытлыса экспозицияһын эшләп ҡуйҙыҡ. Аҙна һайын Бөрйән юлын тапағас, мәмерйәлә эшләгән белгестәребеҙгә йылы мөйөш, ғалимдарҙы ҡабул итер өйөбөҙ булһын тип, ыҡсым ҡунаҡхана ла төҙөнөк.

**Үҙәктең Шүлгәнташ музей комплексын төҙөүҙән тыш, тағы ла ниндәй уңыштарын әйтә алаһың?**

- Беҙҙең ҡарамаҡта "Ирәндек" тарихи-археологик һәм ландшафт музейы-ҡурсаулығы бар. Ул Баймаҡ районында бихисап боронғо ҡурғандарҙы, тораҡ һәм тукталҡаларҙы үҙ эсенә алған 25 мең самаһы гектарлыҡ биләмә. Әлеге көндә унда 400-ләп ҡомартҡы булыуы билдәле. Ҡурсаулыҡ бөгөн алтын яткылыҡтары өсөн эшкәртелеп бөткән дә булыр ине, бәлки. Әммә үҙәккә эшкә килгәс тә, иң элек ҡурсаулыҡтың документтарын тергеҙеп, алтын табыуға аукционды үткәреүгә юл ҡуйманыҡ. Ҡурсаулыҡ ере ауыл хужалығы тәғәйенләнешендә ине. Хөкүмәткә мөрәжәғәт итеп, уның ярҙамы менән айырыуса һаҡланған тарих биләмәһе статусын алдыҡ. Баймаҡ ҡалаһындағы боронғо Кабанов йортонда реставрация үткәреп, унда ҡурсаулыҡ-музейҙың офисын һәм экспозиция залдарын булдырыуға өлгәштек.

**Әгәр ҙә был мөмкин булһа, тарихтың ҡайһы осороңа барып, ундағы ваҡиғаларҙа ҡатнашырға теләр инең?**

- Бәләкәй сағымдан ваҡыт машинаһына ултырып, һәр тарихи дәүерҙе күрергә хыялландым. Мәҫәлән, таш быуат дәүерендә Шүлгәнташҡа тәүге һүрәт төшөрөүсене, баҡыр быуатта көньяҡ Уралда нисек итеп ҡырағай аттарҙы - тарпандарҙы менеп йөрөүселәрҙе, Арҡайым дәүерендә шул уҡ ҡырағай аттарҙы нисек итеп ҡырандастарға егеп йөрөгәндәрен күрергә теләр инем. Сармат батшаларын нисек итеп күмгәндәрен, Аттила етәкселегендәге һундарҙың донъя емереп Европаны яулауын, уның менән бергә барған башҡорттарҙың ата-бабалары ырыуҙарының нисек итеп Уралға ҡайтыуын күрергә теләр инем. Ғөмүмән, башҡорт тарихының һәр көнөн, һәр ваҡиғаһын күреп, уларҙа ҡатнашырға, 1812 йылда Парижға башҡорт полктары менән бергә инергә теләр инем. Үткән быуаттың етмешенсе йылдарына кире ҡайтып, олатайымдан тарихты нығыраҡ һорашыр инем...

**Сармат тарихының беҙҙең халыҡ тарихына бәйле ниндәй дәлилдәре бар?**

- Туранан-тура дәлилдәре бар. Беренсенән, йылҡысылыҡ, малсылыҡ менән йәшәгән тарих уртаҡлығы, икенсенән, сарматтарҙың вариҫтары бөгөн дә йәшәй. Сарматтарҙы урта быуаттарҙа дьярмат тип атаһалар, бөгөн улар юрматылар. Тимәк, минең атай-олатайҙарым да сарматтар булған. Хәҙерге юрматылар антропологик яҡтан Европа халыҡтарына оҡшаған. Ҡыҫҡаһы, сарматтар бер ҡайҙа ла юғалмаған: башҡорт халҡының бер өлөшө булып киткән.

**Әле 50 йәште тултыраһың бит инде. Ул үҫтерҙенме, йорт һалдыңмы, ағас ултырттыңмы?**

- Ағасты бик күп ултырттым, уларҙың һаны ла, иҫәбе лә юҡ. Баҡса үҫтерергә яратам. Әле үҙем һалған йортта егерме йыл йәшәйем, хөкүмәттән фатир алманым. 90-сы йылдарҙа уҡ үҙемдең шәхси йортомдо төҙөй башланым. Улыма ла шығырҙап торған ҡарағайҙан йорт һалдым. Улым Тимерханға 26 йәш, ул бәләкәйҙән хоккей клубына йөрөп, әле муниципаль структурала эшләп йөрөй. Ҡыҙым Алтынай быйыл урта мәктәпте тамамлап, юғары уҡыу йортонда белем ала.

**Хәҙерге башҡорт йәштәрендәге ниндәй сифаттар һиңә оҡшай?**

- Улар бик тырыш, белемгә ынтылалар, иң мөһиме, ирекле фекерләй беләләр. Хәҙерге йәштәр беҙгә ҡарағанда ҡыйыураҡ, тормошҡа талапсанраҡ. Киләсәктә улар камил йәмғиәттә йәшәргә әҙерҙәр. Хәҙерге йәштәр араҡы эсмәй, тәмәке тартмайҙар, үҙенең милләте вәкиле менән ғаилә ҡорорға ынтылалар. Хәҙерге башҡорт йәштәре рухлылар.

Башҡорттоң "Егермеләгә егет егелмәгән тай" тигән мәҡәле бар. Мин дә егермелә егелмәгән тай булдым. "Утыҙҙа атылған уҡ" ти мәҡәл. Мин тап шул йәшемдә Республика халыҡ ижады үҙәгенә директор булып килдем, көнө-төнө йоҡламай эшләнем. "Ҡырҡта ҡындағы ҡылыс" сағымда, йәғни Башҡорт дәүләт филармонияһы директоры сағымда, ысынлап та, үткер, ялтырап торған, әммә ҡындағы ҡылыс булдым. Бына хәҙер "Иллелә ил ағаһы" мәлем.

*Башҡорттоң "Егермеләгә егет егелмәгән тай" тигән мәҡәле бар. Мин дә егермелә егелмәгән тай булдым. "Утыҙҙа атылған уҡ" ти мәҡәл. Мин тап шул йәшемдә Республика халыҡ ижады үҙәгенә директор булып килдем, көнө-төнө йоҡламай эшләнем. "Ҡырҡта ҡындағы ҡылыс" сағымда, йәғни Башҡорт дәүләт филармонияһы директоры сағымда, ысынлап та, үткер, ялтырап торған, әммә ҡындағы ҡылыс булдым. Бына хәҙер "Иллелә ил ағаһы" мәлем.*

**Ә алтмышта, етмештә?**

- "Алтмышта атҡа мәнә алмай, менһә, төшә алмай", "Етмештә ете йәшлек бала аҡылы" ти халыҡ аҡылы. Ләкин хәҙер заман икенсе бит. Алтмышта ла, етмештә лә бынамын тигән йөрөп ята, эшләй, донъя көтә замандаштар. Беҙ ҙә теге мәҡәлдәрҙең "танауына сиртербеҙ", Алла бирһә.

**Беҙ барыбер ҙә ошо заманда йәшәүебеҙ менән бәхетлебеҙ, шулаймы?**

- Эйе. Сөнки беҙ барыһын да күрҙек: совет осоронда октябряттар, пионерҙар, комсомолдар сафына индек. Шунан совет империяһы емерелеүенә шаһит булып, яңырыу осороноң барлыҡ ауырлыҡ-шатлыҡтарын татыныҡ. Хәҙер һанлы цивилизация ҡаҙаныштары солғанышында йәшәү бәхетенә лә өлгәштек. Гугл тәржемәсе аша донъяның барлыҡ телдәрендә туранан-тура аралаша алабыҙ. Һин әйтергә теләгән фекер шул секундында уҡ донъяның барлыҡ кешеһенә барып еткән заманда йәшәү бәхет түгелме ни!

**Әңгәмәң өсөн рәхмәт, Данир Әхмәҙи улы! Һине ил ағаһы йәшеңә етеүең менән гәзиттең меңәрләгән уҡыусылары исеменән ихлас ҡотлайбыҙ, һәр ваҡытта ла шулай зиһенеңдең ҡуҡ йөҙөләй аяҙ булыуын, ғүмер арғымағыңдың арымауын теләйбеҙ!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*✔ Беҙ үҫкәндә лә атайҙар шулай булды бит, улар, нисектер, ситтәрәк һымаҡ булды, әммә уларҙың күҙ ҡарашы, бер-ике һүҙе беҙҙе тәртиптә тотто. Башҡорт ирҙәренең күптәре ғаиләлә шулай ул. Был беҙҙең менталитеттыр, моғайын.*



БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

**Йәш быуында театр сәнғәтенә һөйөү тәрбиәләү, тамашасылар мәктәбен үҫтереү һәм сәхнә аша башҡорт телен пропагандалау өлкәһендә алыштырғыһыҙ ҙур урынды тотҡан "Сулпан" балалар театарында инде ике тиҫтә йылдар Рәмзиә һәм Фәһим СӨНӘҒӘТОВтар ғаиләһе эшләй. Ғаилә, балалар һәм хеҙмәт коллективы ғына түгел, уй-фекерҙәре лә, идеялары ла уртаҡ был парҙың. Ике кеше араһында бындай оҡшашлыҡ нимәнән барлыҡҡа килә? Яуаптарҙы иһә беҙ Сөнәғәтовтарҙың үҙҙәренән ишетәсәкбеҙ.**

# БАЛА САҠ ИЛЕНДӘ ҠАЛҒАНДАР



**➔ Ике тиҫтә йылдар балалар театры актерҙары булған кешеләргә ошондай һорау: балалар театрында уйнау өсөн ҡайҙалыр махсус уҡыталармы, өйрәтәләрме, бармы ул шундай һабаҡ бирер урын?**

**Рәмзиә:** Юҡ, балалар театры актерҙарын махсус әҙерләгән уҡыу йорттары ла, хатта айырым факультеттары йәки бүлектәре лә юҡ беҙҙә. Балалар театры ла республикабыҙҙа бары икәү генә, береһе Өфө ҡурсаҡ театры һәм шуларҙың башҡорт теллеһе ошонда - Сибайҙа.

Мин Баймаҡ ҡалаһы ҡыҙымын. Стәрлетамаҡ техникумын тамамлап, район мәҙәниәт йортонда хеҙмәт юлымды башланым. Шул ваҡыт миңә режиссер Земфира Алтыншина "Рәмзиә, һиңә театрҙа уйнарға ине", тип әйтә килде һәм "Сулпан" балалар театры асылыуын ишеткәс, шунда килдем һәм балалар театры актрисаһы булып киттем.

**Фәһим:** Мин 1999 йыл Сәнғәт институтының театр факультетын тамамланым. Беҙҙең курс Рифҡәт Исрафиловтың һуңғы сығарылышы булды. Башта бер аҙ Милли йәштәр театрында сирҡаныс алып, 2004 йылда "Сулпан"ға килеп урынлаштым һәм ошо ерлектә ныҡлы төпләнеп ҡуйҙым.

**➔ Балалар театрында эшләү драма театрҙарында эшләүҙән айырыламы ул? Бына һеҙ инде олпат йәштәге апай-ағайҙар һәм һеҙгә һаман да ҡуян-бүре булып уйнау, нисектер, күңелһеҙ түгелме? Һәр актерҙың ниндәйҙер ҙур, бөйөк образдарҙы, геройҙарҙы күрһәткеһе киләләр бит?**

**Фәһим:** Ә ни өсөн һеҙ балалар театрында уйнау еңелерәктер йә күңелһеҙҙер тип уйлайһығыҙ? Иң ауыр һәм етди тамашасы тап бала ул. Һин уны ҡыҙыҡһындыра, арбай, әүрәтә алмаһаң, ул артыҡ һанашып тормай - шундуҡ иғтибарын башҡаға йүнәлтә. Балалар донъяһы бер ҡатлы булһа ла, ул хәйләһеҙ һәм ябай. Унда ике йөҙлөлөнәп, алдап, ҡыланып ҡына һыйып булмай. Кескәйҙәр алдында саҡ ҡына "халтурить" итһәң, улар быны шундуҡ тоя һәм шаяра, һөйләшә башлайҙар, тамашаның бәҫе китә.

**Рәмзиә:** Балаларға уйнай алыу өсөн эстән үҙең дә ниндәйҙер кимәлдә бала булыу кәрәктер, тип уйлайым. Миндә, мәҫәлән, бәләкәс ҡыҙыҡай һаман да "йәшәй". Бөгөн дә мультфильмдар ҡарайым, балалар өсөн сыҡҡан яңы киноларҙы ҡалдырмайым. Берәй сюжетлы мультик рекламалана икән, балалар кеүек шуны дәртләнеп көтәм һәм илай-көлә ултырып ҡарайым. Әкиәттәр, мультфильмдар миңә драматик әҫәрҙәрҙән, ҡырҡыу сюжетлы фильмдарҙан нығыраҡ тәьҫир итә.

Унан һуң бала психологияһын яҡшы өйрәнеү ҙә шарт. Быны белмәй тороп, балалар алдына сығып тороу ҙа урынһыҙ. Сәхнә әҫәрен беренсе уҡығанда уҡ тәжрибәле актер был юлдарҙың баланы ҡыҙыҡһындыра аламы-юҡмы икәнен төшөнә. Ә шул һүҙҙәрҙе балаға еткерә алырлыҡ итеп әйтеү, хәрәкәттә, мимикала күрһәтеү инде - һинең бурыс. Һәм һин бер үк спектаклдәге бер үк ролдә, һәләтең һәм баланы аңлау кимәлеңә ҡарап, әллә нисә төрҙә бирә алаһың. Иң мөһиме, балалар менән бәйләнеш булдыра алыу. Был бәйләнеш бармы-юҡмы икәнде тамашасыңдың күҙенә, йөҙөнә, уларҙың реакцияһына ҡарап ҡына беләһең. Ә балалар улар шундай аҡыллы, отҡор ул хәҙер.

**➔ Балалар театрының республикала икәү генә, ә башҡорт теллеһенең бер бөртөк кенә булыуын иҫәпкә алып, шундай һорау тыуа: ни сәбәптән балалар театрҙары булдырылмай, кәрәкме ул беҙгә? Был тәңгәлдә һеҙҙә ниндәй фекерҙәр бар?**

**Фәһим:** Үҙҙәренә театр кәрәкме әллә кәрәкмәйме тигәнде балалар аңламай әле. Һәм был мәсьәләне балалар аңлап йәки уйлап ултырырға ла тейеш түгел. Был бары тик ололар һәм хөкүмәт кимәлендәге эштәр. Беҙ бөгөн театрҙарҙа тамашасылар аҙ, халыҡ концерттарға йөрөмәй, китап уҡымайҙар, гәзит-журналдар алдырмайҙар һәм, дөйөм әйткәндә, рухи яҡтан һайығабыҙ, тибеҙ. Был бит ҡапыл, бер көндә генә килеп сыҡҡан бәлә түгел. Йәки был мәҙәни ғәҙәттәрҙе лә улар бер көндә үҙләштерә алмай. Тимәк, баланы бәләкәйҙән сәнғәт, мәҙәниәт, әҙәбиәткә яҡын итеп тәрбиәләргә кәрәк. Кешегә ун һигеҙ тула ла, ул балиғ була тигән һымаҡ, ул ун һигеҙе тула ла, театрға йөрөй башлай, тигән һүҙ түгел. Был матур йолаға ул кескәйҙән өйрәнергә тейеш.

Биш йәшлек бала балалар театрына килеп нимәләр ала, мәҫәлән? Иң беренсе ул шундай йорт булыуын, унда үҙе кеүек бәләкәстәр йыйылыуын, бында үҙенде әҙәпле торорға, бөхтә кейенеп килергә һәм, иң мөһиме, мөғжизәле донъяла булып, уны күреп-тыңлап, ҡуша ҡыуанып, нимәләрҙелер төшөнөп, фәһем алып, күңел байлығы туплап ҡайтасағын белә. Тимәк, ул театр нимә ул һәм унда нимә була, тигән аңды ала. Артабан был бәләкәй тамашасы үҫә бара сәнғәттең дә, мәҙәниәттең дә, әҙәбиәттең дә дуҫы буласаҡ - иманым камил.

**Рәмзиә:** Театр балаларҙа сәнғәткә генә һөйөү тәрбиәләй тигән һүҙ түгел, бында шул уҡ патриотик тәрбиә лә баш ала, туған телгә, туған моңға һәм башҡа рухи ҡиммәттәргә хөрмәт, тәбиғәткә, хайуандарға, хатта уйынсыҡтарға ла мәрхәмәтле ҡараш булырға тейеш икәнгә өйрәтелә. Йәнлектәр йәки уйлап сығарылған персонаждар аралашыуы аша бала дөрөҫлөктөң, изгелектең, тоғролоҡтоң, батырлыҡтың матур миҫалдарын күрә. Хатта уларҙы ысынбарлыҡ, үҙе ҡуша йөрөгән донъя итеп ҡабул итә. Балалар театры - ул сабыйҙарҙы өгөтләмәй, мәжбүр итмәй, ҡурҡытмай, ирекһеҙләмәй генә ыңғай юҫыҡҡа, дөрөҫ йүнәлешкә бороп ала, тәрбиәләй торған мәҙәни мәктәп. Улар бында һабаҡ та ала, ял да итә, рухи яҡтан үҫешә лә. Шунлыҡтан, балалар театрҙары кәрәк кенә түгел, ә бәләкәс йәмғиәт балалар театрҙарына мохтаж, тип әйтеү дөрөҫ булыр. Һәм был өлкәгә республикабыҙ етәкселеге тарафынан етди иғтибар булһын ине.

**➔ Егерме йыллап шул балалар өсөн уйнаған актерҙар, ижад кешеләре күҙлегенән баһалағанда бөгөнгө бәләкәй тамашасыны һеҙ нисек ҡылыҡһырлайһығыҙ?**

**Рәмзиә:** Балалар аҡыллы, күпте белә. Сәхнәлә барған тамашаны, әҫәрҙең жанрын, геройҙар характерын, улар биргән идеяны һәм башҡаларҙы тиҙ генә аңлап, тойоп ала. "Былары бәләкәс төркөм, нисек уйнағанда ла бара", тип уйлағандар үтә лә ныҡ яңылыша. Бәләкәстәрҙе бигерәк тә башкөллө арбарға кәрәк уйын менән. Улар онотолоп көлһөн йәки ҡуша йүгереп китерҙәй булып ултырһын өсөн ҡара тир ағыҙырға тура килә.

Бөгөн бит интернетта балалар өсөн ҡыҙыҡтар күп, телевизорҙа махсус каналдар бар, һәр сауҙа үҙәгендә кескәйҙәргә уйын мөйөштәре асылған. Унан ҡала, телефондар, планшеттар ҙа баланың иғтибарын йәлеп итә. Балалар театрына бына ошоларҙың барыһы менән дә конкурентлыҡ итергә, бәйге торорға тура килә. Был тәңгәлдә ата-әсәләр балалары өсөн һайлай белергә тейеш: компьютер-телефонмы, әллә театрмы?

**Фәһим:** Бөгөнгө бәләкәй тамашасы шоу формаһындағы, заманса, ҡыҙыҡлы тамашалар ярата. Элекке беҙ тыңлап үҫкән әкиәттәрҙе лә хәҙер телевизорҙа яңыса форматта күрһәтәләр. Улар быларҙы күрҙе һәм театрҙан да шуларҙан кәм булмағанды көтә. Балалар беҙгә ҡарағанда күпкә алға киткән һәм уларҙың аңы ла ололар йәки беҙҙең быуын ҡабул итеп етмәгәнде үҙ иткән инде. Шунлыҡтан, беҙ улар өсөн Аҡбуҙатты ла, милли батырҙарыбыҙҙы ла, шул уҡ Етем төлкө менән Батыр әтәсте лә заманлаштырырға мәжбүрбеҙ. Беҙгә театр менән балаларҙы артҡа һөйрәргә, һаман бер үкте ҡарарға саҡырырға түгел, ә уларҙан ҡалышмай үҫешергә һәм ҡыҙыҡлы әҫәрҙәр тәҡдим итергә генә ҡала.

**➔ Әҫәрҙәр, тигәндән, балалар театры өсөн әҫәрҙәр бармы ул? Бигерәк тә башҡорт балалар театры өсөн кемдәр яҙа беҙҙә?**

**Фәһим:** Был, моғайын, балалар театрының иң ҙур проблемаһылыр. Башҡорт телендә балалар театры өсөн яҙғандар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Хикәйә, повесть йәки башҡа әҫәрҙәр яҙыр өсөн күпме көс, белем, фантазия кәрәк. Ә пьесалар яҙыу тағы ла ауырыраҡ, сөнки сәхнәнең үҙ ҡанундары бар һәм уларҙы белмәй тороп, пьеса яҙып булмай. Белә тороп та яҙған кеше һирәк. Бына, әйтәйек, ун драматургтың береһе генә балалар өсөн пьеса яҙа, шул күрһәтә лә инде хәлдәрҙең торошон. Беҙ бөгөн рус йә сит ил драматургтарының әҫәрҙәрен тәржемә итеп ҡуйырға мәжбүрбеҙ.

**➔ Һеҙ эштә лә, өйҙә лә, хатта гастролдәрҙә лә бергә, шулай бит? Егерме дүрт сәғәт бергә йөрөү ғаилә ағзаларын бер-береһенә нығыраҡ эҫендерәме, әллә ялҡытып та китәме?**

**Рәмзиә:** Беҙ 2005 йылда өйләнештек. Беҙҙең танышыу ҙа, ғаилә ҡороп ебәреү ҙә шулай тейеш булған һымаҡ, шым, тыныс һәм үҙаллы ғына килеп сыҡты. Беренсе тапҡыр Фәһимде театр фойеһында гәзит уҡып ултырғанында күрҙем дә, бик яҡын кеше итеп ҡабул иттем. Хатта "Был минең буласаҡ ирем" тигән уй ҙа үтте башымдан. Ә ул миңә ярты йылдан һуң ғына яҡын килеп һөйләшергә баҙнат итте. Шулай ҙа мин теләгәнсә булды - йәйгә өйләнештек. Бөгөнгө көндә ике үҫмер ҡыҙҙарҙың атай-әсәйебеҙ.

Көнө-төнө бергә булыу - ул беҙ бер-беребеҙгә генә ҡарап ултырабыҙ тигәнде аңлатмай бит. Эштә, мәҫәлән, ул бер спектаклдә ике-өс роль башҡара, мин дә шулай уҡ, ҡайһы ваҡыт хатта һөйләшергә лә ваҡыт булмай китә. Өйҙә лә унын үҙ мәшәҡәттәре, ҡатын булараҡ минең үҙ хәстәрҙәрем бар. Фәһим ижад итергә, яҙышырға ярата, күп уҡый, ә мин ҡыҙҙарым донъяһына сумам. Шулай итеп, беҙ бер-беребеҙҙе сикләмәй, ҡыҫмай-баҫмай, мәшәҡәтләмәй йәшәп өйрәнгәнбеҙ. Һәр кемдең үҙ ҡыҙыҡһыныуҙары булғас, ул тәңгәлдә икебеҙгә лә ирек ҡуйылғас, ғаиләлә ир менән ҡатын булараҡ икәү-арабыҙҙа идиллия тип уйлайым мин.

**➔ Һеҙҙең уйығыҙса, башҡорт ғаиләһе нисек булырға тейеш?**

**Фәһим:** Бөгөнгө заманда "Ир мал таба, ҡатын усаҡ һаҡлай" тигән төшөнсә үҙгәрә төшкән. Бөгөн ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ир-егеттән ҡалышмай эшләй, шулай уҡ аҡса таба. Шул уҡ ваҡытта өйҙә балалар ҙа бит әсәйгә күберәк көс һала. Әсәй барыбер ҙә уларға яҡыныраҡ һәм бала-сағаның күп мәшәҡәтен улар үтәй. Тәрбиә өлкәһендә лә улар беҙҙән өлгөрөрәк һәм етеҙерәк. Шунлыҡтан, бөгөн "Мин - ир, мин ғаилә башлығы, мин әйттем дә бөттө" тип өҫтәл һуғыу бары көлкө генә булыр ине. Ғаилә башлығының бурысы - ул ғаилә ағзалары, йәғни ҡатыны һәм балалары өсөн яуаплы була белеү. Мәҫәлән, мин үҫеп барған ҡыҙҙарымдың тәртибе, әҙәбе, сәләмәтлеге өсөн яуаплымын, ҡатыныма арҡа терәр көс, кәңәшсе, уны йыуатыр-йәлләр ир булырға бурыслымын. Ғаиләләге бөтөн ваҡ мәсьәләләргә лә ҡыҫылмаһам да, уны алға алып барған оло ағым үҙем икәнде беләм. Беҙ үҫкәндә лә атайҙар шулай булды бит, улар, нисектер, ситтәрәк һымаҡ булды, әммә уларҙың күҙ ҡарашы, бер-ике һүҙе, холоҡ һыҙаттары беҙҙе тәртиптә тотто. Башҡорт ирҙәренең күптәре ғаиләлә шулай ул. Был беҙҙең менталитеттыр, моғайын.

Беҙҙең башҡорт ғаиләләрендә балалар баҫалҡы, ата-әсәгә, ололарға ҡарата ихтирамлы ул. Быны мин ошо йәшемдән сығып, сағыштырыуҙарымдан алып әйтәм. Беҙ ҙә бәләкәйҙән атай-әсәйгә буйһондоҡ, уларға хеҙмәт итеп үҫтек. Һәм бөгөн дә күп таныштарымда, туғандарымда, дуҫтарымда балалар шулай үҫә. Аллаға шөкөр, үҙебеҙҙә лә "Ҡыҙым, ярамай" тиеп әйтелә икән, тимәк, бала быны эшләмәйәсәк, "Ҡыҙым, шулай кәрәк ине" тигәнең үтәләсәк икәнде беләм. Нимә тип әйтергә теләйем: беҙ, башҡорттар, бала тәрбиәләүҙе ниндәйҙер методикалар йәки әсбаптар менән түгел, ә халыҡ педагогикаһына таяныл алып барабыҙ һәм яңылышмайбыҙ ҙа. Ошо һабаҡты дауам итергә һәм киләһе быуындарға тапшырырға ғына ҡала.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ХӘҮЕФЛЕ ТОЙҒОЛАР

■ Кире эмоциялар сәләмәтлек өсөн зыянлы. Улар иммун системаһының һаҡланыу көсөн кәметә, төрлө сирҙәргә алып килә. Был турала Австралия ғалимдарының тикшеренеүҙәре күрһәтә. Иң хәүефле тойғолар булып һаранлыҡ, көнләшеү, үҙенде йәлләү тора. Һаранлыҡ ашҡаҙан-эсәк тракты ауырыуҙарына килтерә, көнләшеү ҡайһы бер гормондарҙың, мәҫәлән, тестостерондың бүленеп сығыуын тоткарлай. Башҡаларҙың уңышына шатлана белмәү инфаркт хәүефен үҫтерә. Үҙенде йәлләү һөҙөмтәһендә ацетилхолин гормоны күберәк бүленә, ул бауыр сирҙәренә килтереүе бар. Бындай кешеләрҙең ҡанында шәкәр кимәле түбән була, аш һеңдереү боҙола. Шулай уҡ үҙенде гел ғәйепле тойоу ҙа насар. Шулай итеп иммунитетығыҙҙы ҡаҡшатаһығыҙ, хатта онкологик сирҙәр барлыҡҡа килеүе ихтимал.

■ Ғалимдар беренсе тапҡыр аҙ хәрәкәтләнеүҙең иҡтисади әҙемтәләрен баһалап ҡараған һәм байҙар менән ярлылар араһында бер принципиаль айырма тапҡан. Билдәләнеүенсә, түбән социаль кимәл ялҡаулыҡ менән бәйле, улар шулай уҡ аҙ хәрәкәтләнә лә икән. The Lancet журналы яҙыуынса, ғалимдар 142 илдән йыйылған мәғлүмәттәрҙе анализлаған. Айырыуса аҙ хәрәкәтләнеү һөҙөмтәһендә ҡаҡшаған сәләмәтлекте кире нығытыу өсөн тотонолған сығымдарға иғтибар бирелгән. Халыҡтың түбән физик әүҙемлеге донъя иҡтисадына йылына 67,5 млрд һумға төшә. Йәки һаулыҡты нығытыу өсөн кешеләр ошо күләмдә аҡса тотона. Ғалимдар әйтеүенсә, был минималь һан, ысынында иһә һан тағы ла ҙурыраҡ булыуы ихтимал. Сумманың 40 проценты АҠШ-ҡа тура килә.

■ Табиптар аҙ хәрәкәтләнеүҙе бер ҡасан да хупламаны. Айырыуса ҡатын-ҡыҙҙар хәүеф төркөмөндә, тип белдерә АҠШ-тың Корнелл университеты ғалимдары. Йышыраҡ ултырыу, аҙ йөрөү ҡатын-ҡыҙ затын тура мәғәнәһендә үлтерә, ти улар. Эштәрендә көнө буйы ултырыусыларға ғәҙәттә йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәре, йөрәктең ишемик ауырыуы, яман шеш йышыраҡ янай. Бынан тыш, был артыҡ ауырлыҡ йыйыуға алып килә, был да сәләмәтлеккә насар йоғонто яһай. 35 йәштән ҡатын-ҡыҙ мускул массаһын юғалта башлай, менопауза башланғас, был процесс тағы ла әүҙемләшә. Шуға ла тән ҡартаймаһын өсөн даими рәүештә физик күнегеүҙәр эшләргә кәрәк.

■ Татлы тамаҡтар алкоголизм менән ауырымай, тип раҫлай Америка ғалимдары. Шәкәрҙе күп ашағанда баш мейеһендә опиоидлы рецепторҙары баҫылып тора, шуға ла спиртлы эсемлектәргә ынтылыш булмай. Быны тикшеренеүҙәр ҙә дәлилләгән. Быға тиклем спиртлы эсемлектәр яратыусыларҙың рационына тәмлом өҫтәгәс, улар алкоголгә битараф була башлаған, ти тикшеренеүҙәрҙең авторҙары.

■ Йыш баш ауыртыуының сәбәбе ҡояш яҡтылығы, тимәк D, B витаминдары һәм коэнзим Q10 етешмәүҙән булыуы ихтимал. Ҡояшта йөрөү мөмкинлеге һирәк эләгә икән, был витаминдарҙы ризыҡтар ярҙамында тулыландырырға мөмкин, ти ғалимдар. D витамины балыҡ һәм йомортҡала бар. B витамины - рибофлавин дөгөлә, йомортҡала һәм һөттә бар, рибофлавин нервы системаһының эшенә, күреү һәләтенә, метаболизм процестарына ыңғай йоғонто яһай. Коэнзим Q10 бауырҙа була һәм ул шәкәрҙәрҙе энергияға әүерелдерә. Лаборатор тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, хроник баш ауыртыуы менән яфаланыусыларҙа тап ошо матдәләрҙең норманан түбән булыуы асыҡланған.

ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ - 2021

# ТАРИХЫ ШУЛАЙ




## 1917 йылғы халыҡ иҫәбен алыу

Беренсе донъя һуғышы һәм илдең тиҙ үҙгәреүсән иҡтисади хәле яңы статистик мәғлүмәттәр талап итә. 1917 йылдың 16-18 февралендә үткән Бөтә Рәсәй статистиктар съезында күпселек земстволар тотош ауыл хужалығы иҫәбен алыу өсөн сығыш яһай. Земство, ҡала һәм хөкүмәт статистиктары съезының (18-22 апрель, 1917 йыл) ҡарарында анкеталар, ойоштороу мәсьәләләре, иҫәп алыуҙы тамамлау ваҡыты (15 август - 1 сентябрь), сығымдар ҡаралған халыҡ иҫәбен алыу программаһы урын ала.

Шул йылдағы Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы һәм Ер, Бөтә Рәсәй ҡала халҡы иҫәбен алыу Ваҡытлы хөкүмәт иңенә төшә. Был саҡта Ер министрлығын эсерҙарҙың лидеры В.М. Чернов етәкләй, шуға күрә переписты "Чернов переписы" тип атайҙар.

Министрҙар Советының 1917 йылдың 5 майындағы ҡарарына ярашлы, Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы һәм Ер, шулай уҡ Бөтә Рәсәй ҡала халҡы иҫәбен алыу тураһындағы положениены тормошҡа ашырырға тәҡдим итеlә. Был кампания, Финляндиянан тыш, дәүләттең бөтөн киңлегенә тарала. Переписты маҡсаты 1917-1918 йылдарҙа дөйөм аҙыҡ-түлек планын (йәғни халыҡты һәм армияны икмәк һәм ит аҙыҡтары менән тәьмин итеү), аграр реформа планын төҙөү була.

Майҙың 20-ләрендә башланған иҫәп алыу августа тамамлана. Мәғлүмәттәр урындарҙа эшкәртелеп, үҙәккә әҙер һөҙөмтә генә ебәрелә.

**Иҫәп ҡағыҙҙарының төп формалары.** Тотош хужалыҡтарҙы иҫәпкә алыу карточкаһы түбәндәге мәғлүмәттәрҙе туплай: губерна, өйәҙ, улус, ауыл, йорт хужаһының исем-шәрифе, йәмғиәт, ҡатлам, милләт- былар йорт хужаһы өсөн.

Ғаилә ағзалары өсөн: йорт хужаһына мөнәсәбәт, йәше, ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәр өсөн айырым рәүештә эшкә яраҡлылыҡ һәм ауыл хужалығы эштәрендә, промыслаларҙа ҡатнашыу тураһында билдә.

Ауыл хужалығы инвентары. Эшселәрҙе яллау хаҡында билдә. Сауҙа-сәнәғәт ойошмаһы. Еләк-емеш баҡсаһы. Бал ҡорттары. Мал-тыуар.

Ҡағыҙҙың икенсе яғында: ер эшкәртеү.

Бөтә Рәсәй ҡала халҡын иҫәпкә алыу ике форма буйынса тормошҡа ашырыла. 1-се форма һәр урам буйынса ведомосҡа ҡала, урам, йорт һаны, йорт хужаһының исем-шәрифе (йәки йортҡа хужа учреждение), кешеләр йәшәгән һәм йәшәмәгән торлаҡ фатирҙар һаны, ятаҡтар иҫәбе, кеше йәшәмәгән сауҙа-сәнәғәт биналары, йылылыҡ хаҡында мәғлүмәт туплай.

Икенсе яғында: фатир номерҙары менән фатирҙар исемлеге, фатир хужаһының исем-шәрифе, бергә йәшәүселәрҙең дөйөм һаны (ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар айырым).

2-се форма һәр фатир карточкаһы ҡала, урам, йорт һаны, йорт хужаһының исем-шәрифе, фатир номеры, фатир хужаһының исем-шәрифе йәки учреждение, фатирҙа бүлмәләр һаны, йылылыҡ, яҡтылыҡ тураһында мәғлүмәттәрҙе туплай.

Икенсе яғында: фатирҙа йәшәүселәрҙең исемлеге, исем-шәрифтәре, енестәре, йәштәре, фатир хужаһына туғанлыҡ мөнәсәбәттәре, иҫәп алған ваҡытта урында булыусылар, ваҡытлыса ситтә булыусылар, хеҙмәткә саҡырылғандар, ваҡытлыса йәшәүселәр.

Община бланкыһы теге йәки был дәрәжәлә ергә хужа булыу йә иһә уны файҙаланыу буйынса берләшкән (община йәки ер йәмғиәте) ауыл хужалыҡтарының һәр береһенә төҙөлә.

1917 йылда Өфө губернаһында халыҡ иҫәбен алыу алты: Бәләбәй, Бөрө, Минзәлә, Стәрлетамаҡ, Өфө өйәҙҙәрендә уҙғарыла.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ТАЖЗӘХМӘТ НИМӘНӘН ҠУРҠА?

**Һуңғы ваҡытта йәмғиәттә "интернет-диагноз" тигән күренеш йыш ҡуҙәтелә башланы, йәғни халыҡ интернетта тажзәхмәт тураһында ниндәй мәғлүмәт күрә, үҙендә шул билдәләрҙе таба, асыҡлай һала. Үҙенә диагноз ҡуя ла, сирҙән дауаланған кешеләр яҙған дарыуҙарҙың исемлеген күсереп алып, дауаханаға йүгерә. Хатта кредитҡа батып, дарыу алыусылар ҙа барлыҡҡа килгән, тиҙәр.**

Шул уҡ ваҡытта, беҙ үҙ тормошобоҙҙо үҙебеҙ яҙабыҙ, йәғни үҙебеҙҙең уйыбыҙ, фекерләүебеҙ, ғәмәлдәребеҙ менән ыңғай йәиһә кире күренештәрҙе тартып килтерәбеҙ. Кемдер ыңғай көйләнештә булып, сирен еңһә, икенселәр, киреһенсә, ҡурҡыуға ҡалып, үҙен-үҙе ашай башлай. Мәҫәлән, уҙған быуаттың 50-се йылдарында йөк ташыусы Португалия карабы тәғәйенләнеше буйынса Шотландия портына килеп етә. Моряктарҙың береһе шешәләр һаҡланған һалҡын отсекка инеп, тауар ҡалмаһынмы, сығарылып бөттөмө икәнен тикшерергә була. Икенсеһе унын ингәнен белмәй һәм отсекты бикләп ҡуя. Эстәге моряк сығырға теләп ҡысҡырһа ла, шаҡыһа ла, уны ишетеүсе булмай. Карап ҡабат Португалияға юллана. Бикләнеп ҡалған моряк стенаға нисек итеп уны һыуыҡ өтөп алып барыуын, нисек итеп уның аяҡ-ҡулын тундырыуын, нисек итеп туныуын яҙып бара. Карап Португалияға ҡайтып еткәс, капитан уны үле килеш таба һәм стеналағы яҙыуҙарҙы уҡый. Уны шуныһы ғәжәпкә ҡалдыра: кирегә ҡайтҡанда отсек буш булғанлыҡтан, уның һыуытыу системаһы һүндерелгән була. Моряк һыуыҡ тип уйлап, үҙенең башында тыуҙырылған уйҙырмаһы ҡорбанына әүерелә...

Ошо хәлдән дә фәһем алырға мөмкин: көйләнешебеҙҙе үҙгәртергә кәрәк. Сөнки был тормошта бөтөн нәмәнең энергияһы һәм тирбәлеше бар, беҙ нимәгә нығыраҡ баҫым яһайбыҙ - шуны алабыҙ. Бар донъяны аяҡҡа баҫтырған һәм дер ҡалтыраткан COVID-19 ҙа, башҡа теләһә ниндәй вирус кеүек уҡ, түбән тирбәлешле йән эйәһе булып тора. Уның тирбәлеше шартлы рәүештә 5,5 - 14,5 Гц. Шунан юғарыраҡ диапазонда уның әүҙемлеге кәмей, ә тирбәлеш 25,5 Гц булғанда ул бөтөнләй һәләк була.

Юғары тирбәлештә, йәғни юғары рухиәттә йәшәгән кеше өсөн ул киҫкен респиратор сиренән дә хәүефле түгел. Бөгөн Ерҙең энергияһы, шул иҫәптән тирбәлеше лә күтәрелә, шуға күрә вирус тәбиғәттә, йәғни тәндән ситтә йәшәй алмай. Ерҙең уртаса тирбәлеше 27,5 Гц булһа, был тирбәлеш тәбиғи йәки яһалма рәүештә кәметелгән геопатоген зоналар (дауаханалар, төрмәләр, ЛЭП, метро, йәмәғәт транспорты, сауҙа рәттәре) ҙа юҡ түгел. Уларҙа тирбәлеш 20 Гц-тан түбән һәм унда вирус күпләп үрсеүе мөмкин.

Шулай уҡ ҡайғы (0,1 - 2 Гц), ҡурҡыу (0,2 - 2,2 Гц), нәфрәт (0,5 Гц), көнәгәтһеҙлек (0,6 - 1,9 Гц), үпкәләү (0,6 - 3,3 Гц), тәкәбберлек (0,8 Гц), ҡыҙып китеүсәнлек (0,9 Гц), ҡуҙғыу (0,9 - 3,8 Гц), асыу (1,4 Гц), һанламау (1,5 Гц), үҙенде кемдәндер өҫтөнөрәк ҡуйыу (1,9 Гц) эске ре-

✓ *Әгәр аҫҡа төшөүсе эскалатор буйлап өҫкә йүгереүендә асыҡлаһаң, төш тә, күтәрелеүсе эскалаторға баҫ. Өҫкә йүгерергә ашыҡма. Беҙҙе ысынлап та өҫкә этәреүсе - ул тыныслыҡ һәм үҙ көсөңә ышаныс.*



## 1920 йылғы иҫәп алыу

1920 йылдың авгусында үткәрелгән был кампания советтарҙың бөтөн территория өсөн әҙерләнгән берҙәм план һәм программа буйынса берҙәм етәкселек аҫтында үткән беренсе берҙәм статистика операцияны була. РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советының декретына ярашлы, ул, демографик-профессиональ иҫәп менән бер рәттән, ауыл хужалығы буйынса һәм сәнәғәт предприятиеһының ҡыҫҡаса иҫәбен алыу, халыҡ мәғарифына тикшереү ҙә булып тора. Ауыл хужалығы иҫәбен алыу халыҡ иҫәбен алыусы кадрҙар тарафынан үткәрелә һәм ул демографик иҫәптән һуң уҙғарыла. Ҡалаларҙа сәнәғәт биналарын иҫәпләү халыҡ иҫәбен алыу менән бергә алып барылһа, ауылдарҙа ауыл хужалығы иҫәбен алыу ваҡытында башҡарыла. Бындай ҡатмарлы система төрлө ведомстволарҙың һорауҙарын ҡәнәғәтләндереүҙең башҡа юлы булмауға бәйле.

Үҙәктә переписты әҙерләү һәм үткәреү - РСФСР-ҙың Үҙәк статистика идаралығына, урындарҙа губерна статистика бюроларына йөкмәтелә. Башҡортостан Совет Республикаһы рәйесенә ебәрелгән телеграммала хатта: "Совет Республикаһын төҙөү өсөн тәү сираттағы әһәмиәткә эйә иҫәп алыуҙы үткәреүҙә етерлек киМәлдә (неэнергичное) ярҙам күрһәтмәгән өсөн ғәйеплеләр, ниндәй вазифа биләүҙәренә ҡарамаҫтан, ашығыс-тиҙ арала Революцион трибунал суды менән хөкөм ителә", - тип белдерелә.

Халыҡ иҫәбен алыу программаһы түбәндәге формулярҙан тора: шәхси бит, ауыл өйө өсөн өй хужаларының ғаилә исемлеге, ҡала өсөн йорт ведомостары, фатир карталары, шөғөл ведомосы.

Шәхси бит, имсәк балаларҙы ла индереп, бер кешегә генә тултырыла. Мөһим сара 28 августҡа тәғәйенләнә. Иҫәп алыу ваҡытында дежурҙа, яланда, урманда һ.б. шундай иҫәп алыу мөмкинлеге булмаған шарттарҙа эшләүселәр даими йәшәү урыны буйынса теркәлә, ә ябыҡ учреждениеларҙа (төрмә, дауахана) булыусылар шул учреждениела иҫәпкә алына. Ситтән килеүселәр 28 августҡа ҡарай төндә ҡайҙа ҡуна, шунда теркәлә. Ғаилә бланкылары һәр ауылға, һәр коммуна, артель, товариществоларға тултырыла. Йорттар буйынса карточкала һәр хужалыҡтың һәр ағзаһы 1919 йылдың августынан алып ниндәй эш менән шөғөлләнеүе яҙыла. Халыҡ иҫәбен алыуҙа 1917 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре төп материал булып тора, бөтөн ерҙә дөйөм халыҡ иҫәбе алына. Демографик планда иҫәп алыусылар исем-шәрифтәренән тыш, йуап биреүсенең йәше, енесе, ғаилә хәле, белеме, хәрби хеҙмәт үтеү-үтмәүе, эшкә ярамлылығы, төп һәм баҡсала эшләүе, профессиональ оҫталығы, социаль статусы тураһында мәғлүмәтте теркәй.

Ҡалаларҙа иҫәп алыу ваҡыты - 7, ауылдарҙа 14 көн була. Программа йәмғеһе 18 һорауҙан тора һәм өлөшләтә уҙаллы әһәмиәткә эйә булған халыҡҡа ентекле характеристика биргән бәләкәй һорауҙар менән бергә 30 һорауға етә. Был - 14 һорауҙан ғына торған 1897 йылғы перепись программаһынан күпкә артығыраҡ.

Иҫәп алыу һөҙөмтәләрен эшкәртеү өсөн БАССР-ҙың бөтөн учреждениелары хеҙмәткәрҙәренә мобилизация иғлан ителә. Бының өсөн улар өс көн эсендә исемлектәге составтың 10 процентын бүлергә тейеш була. Мобилизация ваҡыты - эш башланғандан алып ай ярым. Бүленгән хеҙмәткәрҙәр Башҡортостан Үҙәк статистика идаралығы ҡарамағына бирелә.

1920 йылдың 4 декабрендә Өфө губерна башҡарма комитеты президиумы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләрен иҫәпләү өсөн совет учреждениелары хеҙмәткәрҙәрен көн һайын кискеһен эш сәғәтенән һуң өс сәғәт эшләүгә ылыҡтырырға ҡарар итә. Мобилизацияланған 319 кешегә Губерна статистика бюроһы аҡса түләй, ә башҡарған эштең сифаты өсөн бер кешегә уртаса иҫәпләгәндә 15 фунт он, 7,5 фунт ит йәки балыҡ, 1 фунт шәкәр, 2 фунт сало, сирек ҡап тәмәке һәм бер ҡап шырпы бирелә.

Халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек һәм уны үткәреү шул осорҙағы ҡатмарлы сәйәси һәм социаль-иҡтисади шарттарҙа уҙа. Квалификациялы кадрҙар, ҡағыҙ, типография хеҙмәте, транспорт етешмәй. Башҡортостан Үҙәк статистика идаралығы управляющийы А. Мухиндың Мәскәүгә, үҙәк аппаратҡа ебәргән докладной яҙмаһынан күренеүенсә, "иҫәп алыуҙың урындағы шарттары иҫ китмәле ауыр" була. Башҡортостанда, Рәсәйҙәге ҡайһы бер губерналарындағы кеүек, эштең тиҙлеге атҡа бәйле була. Кампанияның ағас әҙерләү һәм продоргандарҙың көсөргәнешле эшләүе етәксе персонал менән теркәүселәрҙе йөрөтөү өсөн транспорт табыуҙы ауырлаштыра. Кадрҙар етмәү сәбәпле һәм статистика органдарының матди-техник базаһының ярлылығы бер нисә, мәҫәлән, Туҡ-Соран, Күҙәй кантондарының ваҡытында иҫәп алыуға ҡушылмауына килтерә. Артабан етәксе перепись үтмәгән кантондарҙа был эштең 1921 йылдың ғинуарында үткәреләсәген белдерә. Шуға күрә республика буйынса мәғлүмәттәр тулы булмай. Башҡортостан Үҙәк статистика идаралығы архивында Кесе Башҡортостандың 9 кантоны халҡы һаны күрһәтелә. Уларҙа барлығы 757790 кеше теркәлгән, шуларҙан 311778-е - башҡорттар, 135471-е - татарҙар, 233138-е - урыҫтар (Өфө губернаһынан, Арғаяш, Дыуан-Ҡыйғы, Ҡыпсаҡ-Етейер, Күҙәй, Табын, Туҡ-Соран, Үсәргән, Юрматы, Ялан кантондарынан башҡа).

Кесе Башҡортостандың кантондары иҫәпләнгән һәм Өфө губернаһы ингән икенсе бер таблицала халыҡ иҫәбе 2 миллион 999559 кеше тип күрһәтелгән. Иҫкәрмәлә Преображенск ҡалаһының (хәҙерге Йылайыр ауылы) милли составы тураһында мәғлүмәттәр булмау сәбәпле, дөйөм иҫәпкә индерелә, тиелгән. 33 улыс буйынса мәғлүмәттәр - 1920, ә ҡалған 14 улыс һәм Преображенск ҡалаһы буйынса 1917 йылғы мәғлүмәттәр бирелә. Тамъян-Ҡатай кантоны буйынса мәғлүмәттәр 1917 йылғы халыҡ иҫәбе буйынса күрһәтелә.

**Архив мәғлүмәттәре буйынса.**

**(Аҙағы. Башы 45-се һанда).**



зервтарҙы кәметһә, йәлләү (3,0 Гц һәм унан юғарыраҡ), рәхмәтле булыу (45 Гц), яҡындарыңды яратыу (50 Гц), киң күңеллелек (95 Гц), ихлас рәхмәтле булыу (140 Гц һәм юғарыраҡ), башҡалар менән берлекте тойоу (144 Гц һәм юғарыраҡ), шәфҡәтлелек (150 Гц һәм юғарыраҡ), бөтөн тереклекте яратыу (150 Гц һәм юғарыраҡ), шартһыҙ, йыһан мөхәббәте (205 Гц һәм юғарыраҡ), киреһенсә, вирус-бактерияларҙы юҡ итә.

Хатта кире тойғоларҙың иммунитетты кәметеүе лә фәнни раҫланған. Тимәк, беҙ вирустан ҡурҡып та уның ҡорбаны була алабыҙ. Шуға күрә үҙебеҙҙе ыңғайға көйләп, тирбәлешебеҙҙе күтәрергә тырышайыҡ.

Тормошта комедия ҡарап йәки көлкөлө китаптар уҡып, ауыр сирҙәрҙән йәки ауыр хәл-тороштан һауыҡҡан кешеләр ҙә бар. Шулай уҡ һыуыҡ һыу менән ҡойоноу ҙа иммун системаһын нығытырға ярҙам итә. Физик күнегеүҙәр эшләргә ялҡауланған булһағыҙ, әле йәйләп булһа ла ҡыбырлай башларға ваҡыт, күнегеүҙәр эшләгәндә үҙегеҙҙе һау-сәләмәт һәм 18 йәшлек итеп күҙаллап, эстән генә булһа ла "Мин сәләмәт, мин сәләмәт" тип ҡабатларға онотмағыҙ. Тәбиғәттә йөрөгөҙ һәм эске йылмайыуығыҙҙы һаҡлағыҙ.

**Вирустар тағы ла нимәнән ҡурҡамы?** Организмдың кислота-һелте балансының нормала булыуынан. Әгәр организмығыҙҙа pH 7,4 булһа, һеҙҙең вирустар, бактериялар, бәшмәктәр һ.б. паразиттарға ҡаршы барьерығыҙ бар.

Моғайын, матур еләк-емешкә бер ниндәй ҙә себен яҡын килмәгәнен беләһегеҙҙер. Ә ул саҡ ҡына әсей, боҙола башлаһа, уға себен-серәкәй ҙә, күк тә, бәшмәктәр ҙә, хатта ҡорттар ҙа ябырыла. Хәҙер күҙ алдына килтерегеҙ: беҙҙең организмдың pH балансы нормала булһа, уға бер ниндәй сир ҙә яҡын килмәй. Әгәр ошо баланс саҡ ҡына боҙолһа (организм әсеһә), барлыҡ паразиттар оялай.

Бигерәк тә оло йәштәгеләрҙең организмында pH балансы боҙола. Шуға күрә, pH-ты нормаға килтереү өсөн иртән һәм кисен ярты балғалаҡ аш содаһына эсә һыу ҡойоп һыңдереп, саҡ ҡына һалҡын һыу өҫтәргә һәм ошо эсә һыуҙы эсергә кәрәк, тәме оҡшамаһа, саҡ ҡына лимон (pH 9,9) өҫтәргә мөмкин. Шулай уҡ pH-ты авокадо (15,6 pH), һарымһаҡ (13,2 pH), манго (8,7 pH), мандарин (8,5 pH), ананас (12,7 pH), бәпембә (22,7 pH) күтәрә.

**Әммә был исемлектәге ризыҡтарҙың кемгәләр ярауы, икенселәргә ярамауы ихтимал, шуға ла уларҙы ашар алдынан дауалаусы табибығыҙ менән кәңәшләшергә онотмағыҙ!**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

### 47-се идея
### Эскалатор буйлап өҫкә һәм аҫҡа

Беҙ барыбыҙ ҙа ҡайҙалыр ашығабыҙ. Тик мин мөмкин тиклем файҙалы эшмәкәрлек өсөн ашығып, ары һуғылыу, бире һуғылыуҙың ысынлап та кәрәк булыуына шикләнәм.

Хәтеремдә, бала саҡта ата-әсәйемдәр мине үҙҙәре менән ҙур универсаль магазинға алып бара торғайны. Унда эскалатор бар ине. Мин һәр ваҡыт алдан йүгереп бара ла, аҫҡа төшөүсе баҫҡыс буйлап өҫкә ҡарай йүгерә торғайным. Бала саҡта, моғайын, күптәр шулай иткәндәр. Был ҡыҙыҡ бит ул. Һин бар көсөңә йүгерәһең, ләкин бер урында тораһың, ә шул уҡ ваҡытта башҡалар бер ҡайҙа ла йүгермәй, әммә ҡайҙалыр барып етә. Кешенең ғүмере ошоға бик оҡшаш.

Эшмәкәрлек һәр ваҡыт хәрәкәтте белдермәй бит. Ҡайһы берҙә беҙ, тыштан ҡарағанда бер нәмә менән дә шөғөлләнмәгән кеүек булһаҡ та, байтаҡ эштәр башҡарабыҙ. Ә ҡайһы берҙә күп ваҡыт бушҡа әрәм ителә. Иртәме-һуңмы, беҙҙең өсөн нимә мөһим, ә нимә мөһим түгеллеген хәл итергә тура килә. Сөнки әгәр беҙ бөтәһен дә бер юлы эшләргә маташһаҡ, был мотлаҡ файҙанан бигерәк зыян килтерәсәк.

Аң - ул тыштан да, эстән дә баҫымға һәм көсөргәнешкә дусар ителгән нескә һәм ҡатмарлы инструмент. Сиктән тыш ҙур баҫым йыш ҡына өҙлөгөүгә килтереүе мөмкин. Аҡыл арыуы физик арыуға ҡарағанда күпкә йонсотҡос булыуы ихтимал. Белеүемсә, түҙеүҙең берҙән-бер сысулы бар, һәм был сысул беҙҙең эсебеҙҙә булған Сығанаҡ, бөтә ғүмеребеҙ һәм йәшәүгә һәләтлегебеҙ Сығанағы менән даими бәйләнешкә ҡайтып ҡала.

Әйләнеп торған ваҡыт тәгәрмәсе көпсәгендә хәрәкәтһеҙ бер нөктә бар. Әгәр тәгәрмәс арасаһына әләгергә йәки ситкә осорға теләмәһәк, ошо үҙәккә сигенергә өйрәнергә кәрәк. Эшмәкәрлек йөрөгендәге тыныслыҡ - Аллаһы Тәғәлә беҙҙең менән аралаша алған берҙән-бер урын; тимәк, әгәр беҙ күңел тыныслығы теләһәк, ошо урынға әләгергә өйрәнергә тейешбеҙ. Был аҡыл, физик һәм рухи көстәрҙе яңыртыу сере. Үҙеңдә ошо урынды табып, һин үҙ үҙәгеңдә асыҡлаған аҡыл ышаныслығына эйә булырһың. Үҙ үҙәген асыҡлаған аҡыл, төрлө йүнәлешкә ташланған аҡылға ҡарағанда, донъяны күпкә әүҙемерәк танып белә.

Бөтәһе менән дә шулай була. Туҡта ла, үҙ-үҙеңдән: "Мин аҫҡа төшкән эскалатор буйлап өҫкә йүгермәйемме?" тип һора. Бик йыш беҙ тормош ағымына ҡаршы йүгерәбеҙ, ә уның менән бергә бармайбыҙ. Әгәр аҫҡа төшөүсе эскалатор буйлап өҫкә йүгереүендә асыҡлаһаң, төш тә, күтәрелеүсе эскалаторға баҫ. Өҫкә йүгерергә ашыҡма. Беҙҙе ысынлап та өҫкә этәреүсе - ул тыныслыҡ һәм үҙ көсөңә ышаныс.

**Роберт ЭНТОНИ.**

**(Дауамы бар).**



### 16 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.05 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Казанова". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.05 Познер. [16+]
2.40, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Теорема Пифагора". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-3". [16+]
4.05 Т/с "Гражданин начальник-3". [16+]

### БСТ

**7.00 Профилактика.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 20.00, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.30, 0.00 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**21.20 Хоккей. СКА (Санкт-Петербург) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.30 Х/ф "Байконур". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Плачу вперед!" [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 17 НОЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50, 2.25, 3.05 Модный приговор. [6+]
12.10, 0.05 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Казанова". [16+]
22.25 Премьера сезона."Док-ток"[16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
1.40 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Теорема Пифагора". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-3". [16+]
4.05 Т/с "Гражданин начальник-3". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 По сути дела. [12+]**
**22.00, 5.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Полное дыхание". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Ночь, как вся жизнь". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 18 НОЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50, 3.20 Модный приговор. [6+]
12.10, 23.40, 2.40, 3.05 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.10 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.45 Т/с Премьера. "Казанова". [16+]
22.40 Д/ф Премьера. "Диагноз для Сталина". [12+]
0.40 Футбол. Сборная России - сборная Сербии. Лига наций UEFA 2020-2021. Прямой эфир из Сербии.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Теорема Пифагора". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.05 Т/с "Гражданин начальник".[16+]
2.20 Т/с "Каменская-3". [16+]
4.05 Т/с "Гражданин начальник-3". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.30 Этно-краса. Дневник "Мисс International - Ufa-2020". [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Короткие волны". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Суд матери". [12+]**
**4.30 "Трудное счастье". [12+]**
**5.15 "Весело живем!" [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 19 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Казанова". [16+]
22.25 Большая игра. [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.05 Д/ф Премьера. "Как Хрущев покорял Америку". [12+]
2.50, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Теорема Пифагора". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-3". [16+]
4.05 Т/с "Гражданин начальник-3". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.15 Х/ф "Любовь, это все, что тебе нужно". [16+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Кавардак Forever". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 20 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50, 2.50 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.40 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Пусть говорят". [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.40 Вечерний Ургант. [16+]
0.35 Д/ф Премьера. "Звуки улиц: Новый Орлеан - город музыки". [16+]
2.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Юморина. [16+]
0.40 Х/ф "Любовь как стихийное бедствие". [12+]
4.05 Т/с "Гражданин начальник-3". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Курай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Спартак" (Москва). КХЛ.**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 "Автограф". [12+]**
**0.00 Х/ф "1+1. Нарушая правила". [16+]**
**2.30 Спектакль "Моя семья". [12+]**
**4.30 "Уҙаман". [12+]**
**5.00 "Весело живем!" [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**

### 21 НОЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "101 вопрос взрослому". [12+]
11.10, 12.20 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.05 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при-2020. Женщины. Короткая программа. Москва. [0+]
15.20 Угадай мелодию. [12+]
16.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50 "Ледниковый период". Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
21.20 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при-2020. Мужчины. Произвольная программа. Москва. [0+]
22.40 Д/с "Самые. Самые. Самые". [16+]
0.20 Наедине со всеми. [16+]
1.50 Модный приговор. [6+]
2.40 Давай поженимся! [16+]
3.20 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.30 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Х/ф "Королева "Марго". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Несчастный случай". [12+]
1.00 Х/ф "Не отпускай меня". [12+]
4.13 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30, 4.45 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Хазина о хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт. [12+]**
**17.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.00, 5.15 Д/ф "Свет теплого дома". [12+]**
**19.45, 4.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**20.00 Ради добра. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байык-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.00 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Ночь одинокого филина". [12+]**
**2.45 Спектакль "Подарок". [12+]**
**4.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

### 22 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.10, 6.10 Х/ф "Пурга". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Юбилей Софии Ротару на музыкальном фестивале "Жара". [12+]
16.20 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при-2020. Женщины. Произвольная программа. Пары и танцы. Произвольная программа. Москва. [0+]
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. Финал. [16+]
21.00 Время.
22.00 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при-2020. Произвольная программа. Москва. [0+]
23.00 Т/с Премьера сезона. "Метод-2" [18+]
23.55 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при-2020. Показательные выступления. Москва. [0+]
2.25 Модный приговор. [6+]
3.15 Давай поженимся! [16+]
4.00 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.20, 1.30 Х/ф "Малахольная". [12+]
6.00 Х/ф "Течёт река Волга". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Парад юмора. [16+]
13.50 Х/ф "Ни к селу, ни к городу". [12+]
18.15 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.23 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Курай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Башкорттар. [0+]**
**15.45 "Дорога к храму". [0+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Барыс" /Нур-Султан/. КХЛ.**
**19.00 Осторожно, дорога! [12+]**
**19.15 "Байык-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Х/ф "Фабрика грез". [12+]**
**2.30 Спектакль "Шестая жена Ивана Грозного". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Ноябрь (Рабигел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (1) дүшәмбе | 7:21 | 8:51 | 13:30 | 15:39 | 17:09 | 18:39 |
| 17 (2) шишәмбе | 7:23 | 8:53 | 13:30 | 15:38 | 17:08 | 18:38 |
| 18 (3) шаршамбы | 7:25 | 8:55 | 13:30 | 15:36 | 17:06 | 18:36 |
| 19 (4) кесе йома | 7:27 | 8:57 | 13:30 | 15:35 | 17:05 | 18:35 |
| 20 (5) йома | 7:29 | 8:59 | 13:30 | 15:33 | 17:03 | 18:33 |
| 21 (6) шәмбе | 7:31 | 9:01 | 13:30 | 15:32 | 17:02 | 18:32 |
| 22 (7) йәкшәмбе | 7:33 | 9:03 | 13:30 | 15:31 | 17:01 | 18:31 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*АФАРИН!*

# БЫЛ КОЛЛЕДЖДА...

## башҡортса белгән кадрҙар әҙерләнә

**Заман талаптарына яуап биргән мәғариф учреждениелары республикабыҙҙа бихисап һәм, әлбиттә, шуларҙың тос өлөшө баш ҡалабыҙға тура килә. Айырым иғтибарға лайыҡ белем усаҡтары араһында Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжын атап китергә булыр ине. Был урта һөнәри белем биреү учреждениеһының тарихы 1932 йылдан башлана һәм атамаһы үҙгәреп торһа ла, бөгөнгәсә илгә кәрәкле техник һөнәрле белгестәр әҙерләү тәғәйенләнеше һаҡланып ҡалған.**



Ошо дәүер эсендә уҡыу йортон тамамлап, төрлө тармаҡтарҙа лайыҡлы хеҙмәт иткән белгестәре менән дан алған колледжда бөгөн 108 уҡытыусы хоҡуҡ белгесе, иҡтисадсы, бухгалтер, ер-мөлкәт мөнәсәбәттәре, мәғлүмәтте яҡлау, компьютер системалары, компьютер селтәрҙәре, мәғлүмәти системалар, программалаштырыу йүнәлештәрендә белем бирә. Уҡыу йорто республиканың ғына түгел, Рәсәйҙең техник вуздары менән хеҙмәттәшлек итә һәм студенттарға һөнәри үҫеш өсөн барлыҡ уңайлы шарттар булдырырға тырыша. Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа популяр WorldSkills чемпионаттарында ла колледж студенттары әүҙем ҡатнаша һәм еңеүҙәр яулай. Уҡыу йорто етәкселеге әйтеүенсә, йәш һөнәрмәндәргә төрлө яҡлы белем биреү бурысы ҡуйылған һәм республикабыҙ өсөн бик мөһим булғандарының береһе - уларҙы башҡорт телен дә аңлаған, ошо телдә ярҙам күрһәтә алған белгес итеп әҙерләү. Колледждың башҡорт теле уҡытыусыһы Гөлназ Йомағолова әйтеүенсә, шуға ла бында студенттар башҡорт дәүләт телен 1-се курста өйрәнә, 2-се курста уларға "Башҡорт теле профессиональ эшмәкәрлектә" тигән предмет уҡытыла.

- Шулай ҙа студенттар үҙҙәре йөлеп ителгән осраҡта ҡыҙыҡһыныу юғары була. Быны иҫәптә тотоп, уларҙан башҡорт телен өйрәнеүгә ҡағылышлы мобиль ҡушымталар әҙерләүгә ылыҡтыра башланыҡ, - ти Гөлназ Камил ҡыҙы. - Былтыр колледждың компьютер системалары һәм программалаштырыу факультетында белем алған студенттар "Бөрлөгән" атамалы мобиль ҡушымта әҙерләне. Был мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн башҡорт әлифбаһын өйрәнергә ярҙам иткән ҡушымта булды. Техник яғын да, ҡушымтаның эстәлеген дә уҡытыусылар етәкселегендә студенттар үҙҙәре әҙерләне. Ә быйыл инде, сентябрь айында үткән Башҡорт теле уҡытыусыларының төбәк-ара форумында республика Башлығы Радий Хәбиров һөнәри белем биреү ойошмаларында башҡорт телен уҡытыуҙың абруйын күтәреү, телде өйрәтеүҙә заманса алымдар һәм саралар ҡулланыу кеүек мәсьәләләрҙе күтәргәс, өр-яңы мобиль ҡушымта эшләү идеяһы барлыҡҡа килде. Әле бына шул эште бойомға ашырыу маҡсаты менән янып йөрөйбөҙ.

Әйткәндәй, башҡорт телен өйрәнергә теләгән киң ҡатлам йәмәғәтселек өсөн уңайлы буласаҡ был яңы проекты ла Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжының студенттары Демид Хәбибуллин, Владислав Гольдштейн һәм Роман Бушмелев эшләйәсәк. Уларға техник йәһәттән программалаштырыу буйынса уҡытыусы Рената Йыһаншина, эстәлеген әҙерләүҙә башҡорт теле уҡытыусылары ярҙам күрһәтә.

- Былтыр Өфөләге "ВДНХ-Экспо"ла ойошторолған күргәҙмәлә үҙебеҙ уйлап тапҡан уйын менән ҡатнашҡайныҡ. Балаларға күрһәтеп, уйнап торғанда БР мәғариф министры Айбулат Хажин эргәбеҙгә килде һәм бәләкәй балалар өсөн башҡорт телен өйрәтеүгә ҡоролған берәй уйынмы, ҡушымтамы әҙерләй алаһығыҙмы, тип һорашты. Булдырабыҙ, тинек тә, "Бөрлөгән" проектын эшләп тә ҡуйҙыҡ. Бына шунан "Башҡортостан" дәүләт телевидение һәм радиотапшырыуҙары компанияһы сайттарын ҡушымтаға әүерелдерергә тигән тәҡдим алдыҡ. Ә инде башҡорт теле буйынса яңы проектыбыҙ "Бөрлөгән" ҡушымтаһының функцияларын арттырыуға, өлкән йәштәгеләргә лә файҙалы мәғлүмәттәр туплауға, телде өйрәнеүҙе еңелләштереүгә ҡороласаҡ, тип ниәтләйбеҙ. Мәғлүмәттәр күп буласаҡ, шуға уҡытыусыларыбыҙға таянасаҡбыҙ, - тип һөйләй колледждың 4-се курс студенты Демид Хәбибуллин. Ижади коллективтың етәксеһе Рената Йыһаншина әйтеүенсә иһә, ҡушымта тағы ла үҙ эсенә ҡыҙыҡлы уйындар, квест, Башҡортостандың иҫтәлекле урындары тураһында видео дәрестәр, ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәрҙе аласаҡ.

Әйткәндәй, Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжы башҡорт теленән яңы мобиль ҡушымта проектын Башҡортостан Башлығының Дәүләт телдәрен һәм республика халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән гранттар конкурсына тәҡдим итә һәм йәштәр тарафынан бойомға ашырылған яңы идея тиҫтерҙәре өсөн иң кәрәклеһенә әүерелер, тигән ышаныс белдерә. Бына шулай, заман менән бергә атлаған белем усағы үҙенең студенттарына һөнәри оҫталыҡ ҡына түгел, йәмғиәтебеҙгә мөһим булған башҡорт телен үҫтереүгә лә үҙ өлөшөн индерергә өйрәтә.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ТАБИП КӘҢӘШЕ*

# ҺАУЛЫҠТЫ...

## һатып алып булмай



**Йыл һайын 14 ноябрҙә Бөтә донъя диабетҡа ҡаршы көрәш көнө билдәләнә. Уның девизы - "Сирҙе еңер өсөн берләшәйек". Был дата шәкәр ауырыуы һәм унан дауаланыу саралары тураһында халыҡҡа мәғлүмәт еткереү, социаль реабилитациялау, сәләмәт тормош алып барыуҙы пропагандалау, физик культура һәм спорт менән шөғөлләнеүҙе популярлаштырыу маҡсатында Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы тарафынан булдырылған. Әлеге ваҡытта донъяла был сир менән 425 миллиондан ашыу кеше ауырый. Күбеһенең - II типтағы диабет.**

Рәсми статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, беҙҙең илдә диабет менән сирләгән 4,3 миллион кеше теркәлгән. Рәсәй эндокринологтары билдәләүенсә, был - иҫәптә тороусылар ғына. Ә ысынында 8 миллион тирәһе кеше ауырый, 30 миллионға яҡыны диабет алдында тора. Статистика прогноздары буйынса диагноз ҡуйылмаған, үҙенең ауырығанын белмәүселәр ҙә күп.

Шәкәр диабеты инвалидлыҡҡа һәм үлемгә дусар иткән өс ауырыу иҫәбенә ингән (атеросклероз, яман шеш һәм диабет). Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәте буйынса, был сир 2-3 тапҡырға үлемде арттыра һәм кеше ғүмере оҙайлығын ҡыҫҡарта. Был сирҙән тейешле дауаланмаған осраҡта ул йөрәк ауырыуына, бөйөр етешмәүсәнлегенә, һуҡырайыуға килтерә. Диабетты дауалау шәкәр һәм ҡан тамырҙарын зарарлаған башҡа хәүеф факторҙары кимәлен кәметеүгә ҡоролған. Беренсе типтағы менән ауырығандарға - инсулин, ә икенсе типтағыларға шәкәрҙе кәметеүсе терапия ҡаралған.

Был сирҙән нисек һаҡланырға? Иң беренсе, туҡланыу рационын яҡшыртыу мөһим. Шәкәр һәм таҙартылған углевод булған ризыҡтан баш тартығыҙ. Газлы эсемлек эсмәгеҙ, уларҙа шәкәр, консервант, билдәһеҙ өҫтәмә күп. Сәләмәт йәшәү рәүеше алып барығыҙ, артыҡ ауырлыҡтан һаҡланығыҙ, физик яҡтан әүҙем булығыҙ, дөрөҫ туҡланығыҙ, майлы ризыҡтарҙы кәметегеҙ. Шулай уҡ тәмәке тартыуығыҙҙы ташлағыҙ. Был зарарлы ғәҙәт йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына килтерә. Ошо ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәгәндә сирҙе иҫкәртергә мөмкин.

**Татьяна ХОЛОСТОВА,**
**врач-эндокринолог.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*



# БУЛАСАҠ ӘСӘЙҘӘР ҠОЛАҒЫНА

**"Тыуымдан ҡалмағас, үлемдән дә ҡалмайһың" - халҡыбыҙҙың ошо һүҙҙәре бөгөнгө көндә бигерәк тә актуаль яңғырай: тажзәхмәт тигән афәт көн һайын сафтарыбыҙҙан йә теге, йә был кешене алып китеүе тураһында ишетәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта был донъяға яңы кеше тыуа, әммә был хаҡта күп осраҡта белмәй ҙә ҡалабыҙ. Әлбиттә, пандемия шарттарында бәпес алып ҡайтырға йыйыныусы әсәйҙәр өсөн дә сикләүҙәр һәм талаптар бар. Был хаҡта Республика клиник перинаталь үҙәгенең табип-акушеры, ультратауыш тикшереүе табибы Динар ҒАБДРАХМАНОВ бына ниндәй кәңәштәр бирә.**

**➔ Ҡайҙа бала табырға?**

Бала табыу йорттары сәләмәт пациенттарҙың вирус йоҡтороуын мөмкин тиклем кәметергә тырыша. Өфөлә Республика клиник перинаталь үҙәгендә, Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһында, Дим районындағы 3-сө бала табыу йорттарында өс обсервация бүлеге асылған. Уларға коронавирус инфекцияһына шик булған пациенттар килтерелә. Һөҙөмтәлә, бала табыу йортона вируслы ҡатын-ҡыҙ эләгеү ихтималлығы булмай. Коронавирус менән сирләгән ауырлы ҡатындар өсөн Дим районындағы дауахана нигеҙендә айырым бала табыу йорто эшләй. Сир үткәргән һәм 14 көн карантинда булған ҡатындар Перинаталь үҙәктә бала таба.

**➔ Ҡасан ПЦР тапшырырға?**

Йөклөлөктөң 37-се аҙнаһынан ҡатын-ҡыҙ аҙнаһына бер тапҡыр ПЦР-ға танауҙан һәм тамаҡтан анализ тапшырырға тейеш. Уның һөҙөмтәләре ике көндән әҙер булғанлыҡтан, был анализды 5 көн һайын тапшырып торорға кәрәк, ул ваҡытта ҡулығыҙҙа һәр саҡ яңы ПЦР анализы буласаҡ. Был иһә, анализдар кире булған осраҡта, обсервация бүлегенә инмәй, тура бала табыу йортона инеү мөмкинлеген бирә. Әгәр ПЦР анализына бер аҙна булмайынса, пациентта киҫкен респиратор инфекцияһына шик бар икән, антиматдәләргә тест-система ҡулланыла. Игеҙ бала көтөүселәргә ПЦР анализын 33 аҙнанан тапшырырға тәҡдим ителә.

**➔ COVID-йөклөләр**

Дим районындағы бала табыу йортонда ятыусы урта һәм ауыр урта дәрәжәләге сирле ҡатын-ҡыҙҙар көн һайын телемедицина аша Мәскәүҙең академик В.И. Кулаков исемендәге акушерлыҡ, гинекология һәм перинатология милли медицина тикшеренеүҙәр үҙәгенән консультация ала. Һорауҙар килеп тыуған осраҡта табиптар консилиумы үткәрелә. Пациенттарҙы бер нисә табип тикшерә, дауалаусы табип бер үҙе генә ҡарар ҡабул итмәй.

**➔ COVID-йөклөләрҙе нисек дауалайҙар**

Дарыуҙар йөклөлөктөң триместрынан сығып, кире йоғонтоһо иҫәпкә алынып, билдәләнә.

**➔ КТ-тикшереүе: эшләтергәме, юҡмы?**

КТ ҡәтғи күрһәтмә буйынса эшләнә. Тикшереү ваҡытында баланы радиация нурланышынан һаҡлау өсөн ҡатындарҙың эсе ҡурғаш алъяпҡыс менән ҡаплана. Әгәр табиптар КТ кәрәк тип ҡарар иткән икән, тимәк, уны эшләтергә кәрәк.

**Ксения КАДИНИНА.**

## СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ЕВРАЗИЯ КОРОЛЕВАҺЫ - ҮҘЕБЕҘҘӘ...



**Төркиәлә "Евразия королеваһы-2020" халыҡ-ара матурлыҡ конкурсы уҙҙы. Башҡортостан исеменән Зөһрә Мөхәррәмова сығыш яһаны.**

Зөһрә Салауат районында тыуып үҫкән, уға 23 йәш. Ҡыҙ Башҡорт дәүләт университетын тамамлағандан һуң, Малайҙ мәктәптәренең береһендә эшләгән һәм бынан тыш үҙенең матурлыҡ салонын да асҡан. Быға тиклем ул "Башҡортостан һылыуҡайы-2019" республика конкурсы еңеүсеһе булған, шулай уҡ "Рәсәй студенттары араһында вице-мисс-2017" тигән титулы ла бар.

Төркиәләге конкурс барышында "Мисс талант" (Зөһрә бында французса телендә йырлай), "Мисс бикини", "Иң матур милли кейем" (дизайнер Альбина Жерлицына), "Тамашасылар һөйөүе" этаптарында көс һынаша. Уларҙың һәр береһендә Зөһрә Мөхәррәмова беренсе урын яулай. Еңеүсе ҡыҙ алтын ҡул сәғәте, ҡунДан тегелгән кейем, затлы таж, таҫма һәм конкурстың статуэтҡаһы менән бүләкләнә.

# ЙОЛАЛАР БАРЛАНА...

**"Ырыу ағасы" республика форумы сиктәрендә 20 ноябрҙә Шаран районында онлайн форматта "Туй йолаһы" Асыҡ йола фестивале уҙғарыла. Фестиваль барышында конкурсҡа килгән видеояҙмалар ҡарала, еңеүселәр бүләкләнә һәм Zoom платформаһында ижади коллектив етәкселәре өсөн ғилми-ғәмәли конференция ойошторола. Сараны БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Шаран районы хакимиәте үткәрә.**

"Туй йолаһы" фестивале Шаран районында 2018 йылдан алып уҙа. Унда Башҡортостан халыҡтарының йолаларын һаҡлаусы һәм таратыусы ижади коллективтар, фольклор коллективтары етәкселәре, ғилми хеҙмәткәрҙәр, үҙешмәкәр коллективтар, биҙәү-ҡулланма сәнғәте, халыҡ кәсептәре һәм һөнәрҙәре оҫталары йыйыла. Шуға күрә сара күп милләтле республикабыҙҙа йәшәгән халыҡтарҙың йола мәҙәниәтен үҫтереү йәһәтенән бик әһәмиәтле ваҡиға һанала. Ә инде 2021 йылда Башҡортостанда уҙасаҡ Бөтә донъя Фольклориадаға әҙерләнгәндә республиканың фольклор коллективтары эшмәкәрлеген әүҙемләштереү маҡсатында ул бигерәк тә әһәмиәтле. Фестивалдә ҡатнашыу өсөн ғаризалар 2020 йылдын 17 ноябренә тиклем tuy.yola@mail.ru электрон адресына ҡабул ителә. Ойоштороу мәсьәләләре буйынса "Үҙәк район мәҙәниәт йорто" директоры Рәйлә Яҡупова һәм учреждениеның методик бүлеге мөдире Регина Манапова яуаплы.

# МИЛЛИ КЕЙЕМЕНДӘ...

**Башҡортостанда башҡорт милли кейеме оҫталарының "Тамға" халыҡ-ара конкурсы иглан ителде. Проект тәүгә ойошторолара һәм унда еңеүселәрҙә - ҡиммәтле призлар, ә Гран-при алыусыны 300 мең һум аҡса көтә.**

Сара бер нисә этапта үткәрелә: 30 ноябргә тиклем ғаризалар ҡабул ителә, шунан һайлап алыу туры һәм конкурс эштәрен яҡлау - 1-5 декабрҙә, конкурсҡа йомғаҡ яһау, еңеүселәрҙе һәм призёрҙарҙы бүләкләү 14 декабрҙә була. Ойоштороусылар белдереүенсә, ҡатнашыусыларҙың эштәре "Башҡорт милли кейеме - реконструкция", "Заманса авторлыҡ кейеме", "Балалар кейеме", "Башҡорт милли ювелир биҙәүестәре", "Башҡорт кейеме аксессуарҙары" тигән номинациялар буйынса баһаланасаҡ. Милли кейемдең үҙенсәлекле ҡиммәттәренә иғтибарҙы йәлеп итеүгә йүнәлтелгән сара Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Башҡортостан Республикаһының Милли музейы тарафынан уҙғарыла. Конкурсҡа ғаризалар "Башҡорт милли кейеме 2020" билдәһе менән **tamga.ufa@gmail.com** электрон адресына ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: **8 (347) 272-36-50.**

## БАШҠОРТ ҺҮҘЕ

# УЛ ЙӘНДЕ ЙЫЛЫТА

**Башҡорт телендә матур һүҙҙәр бик күп. Улар араһында башҡа телдәрҙә туранан-тура мәғәнәһе булмағандары ла бар. Мәҫәлән, моң... Уны урыҫсаға "мелодия" тип тәржемә итәбеҙ. Әммә ул барыбер һүҙҙең тулы мәғәнәһен бирә алмай. Уның тик башҡорт телендә генә осрауында ниндәйҙер бер сер йәшеренгән, моғайын.**

"Иң матур башҡорт һүҙе" акцияһына "Рәхмәт"те тәҡдим итер инем. Был, әлбиттә, онотолоп, ҡулланылыштан төшөп барған һүҙ түгел. Киреһенсә, уның башҡорт телендәге яңғырашын республикала йәшәгән бөтә милләт тә белә. Өҫтәүенә, бик күп төрки халыҡтарҙа бер төрлө яңғырай: рахмат, рахмет...

Студент йылдарында булған бер ваҡиға бер ҙә иҫтән сыҡмай. Поезд вагонында бик эҫе ине. Купеға инеү менән шешәнән стаканға һыу ҡойҙом да эсә лә башланым. Шул ваҡыт оло йәштәге бер инәй иплән кенә ҡулыма ҡағылды ла:

- Һеҙлем, бисмилланды әйттеңме? - тип һораны.

Минең яуап биргәнемде лә көтмәй:

- Ул һүҙҙе әйтергә оялаһың икән, эстән генә доға уҡы. Доға уҡый белмәһең, рәхмәт әйтеп эс, - тине. Мин таныш түгел ҡатынға нимә әйтергә белмәй, аңшайып торған арала ул был һүҙҙең ҙур тәьҫир итеү көсө барлығын аңлатып бирҙе.

Олоғая килә "рәхмәт" һүҙенең хатта кеше тормошон үҙгәртә алыу көсө барлығын тойғаным бар. Рәхмәтле кешеләрҙең еңелерәк йәшәгәнен беләм. Психологтар әйтеүенсә, рәхмәт әйтә белгәндәр яҡшылыҡты күп күрә, юҡ-ҡа-барға борсолмай, булғанына шөкөр итә, тормошонан ҡәнәғәт. Врачтар ҙа был һүҙҙе күп әйткән йәки ишеткән кеше ауырыуға тиҙ бирешмәй, сирләһә лә, тиҙ шәфәйә, тыныс йоҡлай, тип билдәләй.

Кемгә булһа ла ошо хисте кисергән кеше үҙен физик яҡтан да, рухи яҡтан да яҡшы тоя. Был - фән менән раҫланған факт. Бәрәү һиңә ихлас күңелдән рәхмәтле булыуын белдерһә, был ҡоро һүҙ генә түгел, ә уның күңел төрөнән сыҡҡанын аңлайһың. Рәхмәт әйтеү йәки уны башҡаларҙан ишетеү йәшәүгә көс бирә.

Иғтибар итһәгеҙ, башҡа һүҙҙәрҙе нәфрәтләнеп тә, ҡайғырып та, илап та әйтергә мөмкин. Ә рәхмәте асыуланып әйтеп ҡарағыҙ әле, йәки үпкәләп... Килеп сыҡмаймы? Эйе, был һүҙҙе асыуланып, ҡайғырып, хәсрәтләнеп әйтеп булмай. Уны тик йылмайып, һөйөнөп, шатланып ҡына әйтәһең. Йөрәк түренән сыҡҡанға шулай ул. Ошо матур һүҙебеҙҙе йышыраҡ әйтергә һәм ишетергә яҙһын барыбыҙға ла.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИШӘК - АУЫРЫҒАНЫН, ир ҡартайғанын белмәҫ

Ауыҙҙағы һүҙгә һин эйә, ауыҙҙан сыҡҡан һүҙ һиңә эйә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бергәүҙәр - вазифаға, икенселәр - батырҙарға, өсөнсөләр - көскә, дүртенселәр Аллаға табына һәм ошо табыныуҙары арҡаһында үҙ-ара бәхәсләшә, ләкин... барыһы ла аҡсаға табына икәнен генә береһе лә танымай.

**(Марк Твен).**

Аҡса барыһын да эшләй, тигәндәр ысынында аҡса өсөн барыһын да эшләй.

**(Д. Галифакс).**

Бәләкәй генә бәләләргә ҡапҡа асыуҙан һаҡлан - улар артынан тағы ҡурҡыныслыраҡ бәләләр инәсәк.

**(Б. Грасиан).**

Бер нисә сит телде өйрәнеү өсөн алты йыл етә, әммә туған телеңде өйрәнеүгә бер ғүмер ҙә етмәй...

**(Вольтер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер крәҫтиән көн һайын бер алмағас янынан үтә икән. Ундағы бер алманы булһа ла өҙөп ашарға теләй, ти, ләкин һорамайынса кешенекен алырға ярамай икәнен дә нык үҙләштергән булғас, ҡыйыулығы етмәй, ти. Ләкин хәйләкәр кеше һәр саҡ юлын таба. Был крәҫтиән дә, сираттағы тапҡыр алмағас алдында туҡтап, шулай ти икән:**

**- Алмағас, алмағас, миңә бер-ике емешеңде генә өҙөп ашарға рөхсәт ит әле!**

**Шунан:**

**- Биш-алтыны ал! - тип үҙ-үҙенә яуап та ҡайтара, ти.**

**Татлы ризыҡты ауыҙ итеү был кешегә шул тиклем оҡшап китә, хатта ул көн һайын алмағастан һыйланырға керешә. Тиҙҙән баҡса хужаһы алмаларҙы кемдер урлап ашағанын шәйләп ҡала. Бер ваҡыт ҡарауыллап ултырып, ул бурҙы тота:**

**- Кеше алмаһын урларға нисек баҙнат иттең? - тип һорап ул, ярһып.**

**- Асыуланма, асыуланма инде миңә, - тип һүҙ башлай крәҫтиән. - Мин урламаным, мин гел һорап алдым!**

**- Шулаймы ни? Ә кемдән һораның?**

**- Алмағастан! - тип яуап бирә крәҫтиән. Һәм шундуҡ алмағастан нисек рөхсәт һорағанын һорап күрһәткән. Баҡса хужаһы, күп тә уйлап тормаған, быны ҡоҙоҡҡа елтерәтеп алып барған һәм:**

**- Ҡоҙоҡ, ҡоҙоҡ, ошо ахмаҡты һиндә бер-ике тапҡыр сумдырырға рөхсәт ит әле! - тип ҡысҡырған. Үҙ-үҙенә шундуҡ яуап та бирә икән:**

**- Биш-алты мәртәбә сумдыр һин уны!**

**Шулай итеп, баҡса хужаһы крәҫтиәнде ҡоҙоҡҡа бер нисә тапҡыр сумдырып сығарып, урлау теләге мәңгегә онотолорлоҡ итеп һабаҡ биргән".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
13 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3007
Заказ - 918/11